ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

4-10 июнь (һөтай) 2022

№22 (1012)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

Хәлдәр һәйбәт булһын, үҙебеҙсә булһын! 2



Жирафҡа яҡшыраҡ күренәме? Ә шулай ҙа атай-әсәй кәңәше мотлаҡ! 7,10



Аралбаевтар улар! 8-10



Бөгөнгөнө үткәнгә ялғап, киләсәккә күпер һалыусылар 12-13



ТВ-программа 14

***АРЗАНҒА ЯҘЫЛЫП ҠАЛ!***

***Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ! 6 июндән 16 июнгә тиклемге ун көнлөктә республиканың һәр ҡалаһында-ауылында ПР905 индекслы "Киске Өфө"гә 2022 йылдың икенсе яртыһы өсөн ташламалы хаҡ менән 664 һум 66 тингә яҙыла алаһығыҙ. Әйҙәгеҙ, "Киске Өфө"гә дәррәү яҙылып, гәзитебеҙҙең быйылғы 20 йыллыҡ юбилейына бер бүләк эшләйек!***

***МӨХӘРРИРИӘТ.***

*"КИСКЕ ӨФӨ"ГӘ - 20 ЙЫЛ*

# АҠЫЛЛЫ ӘҢГӘМӘСЕ...

**Милли матбуғатты яратып уҡыйым. Үҙебеҙҙең телдә донъя күргән гәзит-журналдарҙың барыһын да алдырыр инем хәлемдән килһә, ләкин яртышар йылға ғына алмашлап яҙылырға тура килә. Шулай ҙа гәзиткә яҙылыу кампанияһы башланыу менән ике баҫмаға бер йылға уҡ яҙылып ҡуям. Ул да булһа - район гәзите һәм "Киске Өфө". Ошо ике гәзит өйөмә килеп тормаһа, нимәлер етмәй кеүек.**



Әле бына "Киске Өфө"нөң меңдән ашыу һанын ҡулға алыуыбыҙҙы белгәс, иҫтәрем китте. Беҙ, гәзит уҡыусы, шундайын да мәғлүмәтле, йөкмәткеле һәм фәһемле баҫманың йортобоҙға килеүен көтөп алабыҙ, ә уның өсөн күпме көс һәм хеҙмәт һалынғанын баһалайбыҙмы икән? Был гәзиттең һәр бер бите мәғлүмәти хазинаға тиң - бер артыҡ, буш мәҡәлә юҡ, барыһы ла урынлы һәм ваҡытлы. Баҫманың хеҙмәткәрҙәре һәр бер мәғлүмәт, хәбәр, мәҡәлә менән дөрөҫ эшләй белә, ҡыҙыҡлы әңгәмәселәр йәлеп итә һәм барыһына ла файҙалы булырҙай рубрикалар алып бара.

Беләһегеҙме, баҫма гәзит һәм журналдар тағы ла нимәһе менән интернеттан өҫтөн тора? Уларҙа хаталар булмай, сөнки гәзиттең һәр бер бите әллә күпме кешенең күҙе аша үтеп, ентекле тикшерелеп кенә донъя күрә. Ә интернеттағы хәбәрҙәргә күҙ һалығыҙ әле - әллә күпме хата унда, мәғәнәүи йәһәттән дә, орфографик хаталар ҙа тулып ята, сөнки унда артыҡ яуаплылыҡ юҡ был йәһәттән. Уларға тиҙ генә, башҡаларҙан алда сығарып өлгөрөргә кәрәк, ә уның хаталы тексына йәки мәғәнәһенә иҫтәре китеп бармай. Гәзит сифаты менән алдыра. Ә "Киске Өфө" был сифатҡа өҫтәп, уҡыусыһына уйланырлыҡ фекер "төрөп" бирә.

"Киске Өфө" гәзите донъяға ҡарашты киңәйтә, сөнки төрлө өлкәне үҙ эсенә ала. Ул - кәңәш биреүсе лә, аҡыллы әңгәмәсе лә, төплө белем донъяһы ла. Ҡайһы саҡта гәзиттәге берәй мәҡәлә йәки әңгәмәне уҡыйым да, күңелемдә оҙаҡ йөрөтөп тә хәл итер юл тапмаған мәсьәләне сисер әмәл табам. Ҡайһы берҙә гәзиттәге нидәйҙер фекер йәки аҡыллы һүҙ тәүәккәл аҙымға этәреп ҡуя. Бына бит ул ҡайҙа һүҙ көсө, ҡағыҙға баҫылған фекер ҡеүәһе!

Гәзиттә донъяла барған хәлдәргә төплө анализ эшләп, артыҡ ҡатмарлы фразалар менән "биҙәмәй" генә халыҡҡа еткереүсе иҡтисадсылар, сәйәсмәндәр менән мәҡәләләр йышыраҡ баҫылһа ине, тип теләйем. Шулай уҡ банк өлкәһендә эшләүсе, юрист кәңәштәре лә артыҡ булмаҫ ине. Тағы ла психологтар, психотерапевтар менән мәҡәләләрҙе кеше көтөп алыр, тип уйлайым. Бына хәҙер IT-технологиялар өлкәһендә эшләүселәргә һорау күп, ләкин үҙебеҙҙең егет һәм ҡыҙҙар был өлкәнең барлыҡ нескәлеген аңлап етәме? Ошо өлкәлә эшләүсе белгес үҙенең эшмәкәрлеге тураһында һөйләһә, балалар ҙа бер үк төрлө һөнәрҙәр һайлап, уҡып бөтөп эшһеҙ йөрөмәҫ ине. Табиптар менән әңгәмәләр биреп барыуығыҙ бик хуп, артабан да ошондай мәҡәләләр туҡтамаҫ, тип ышанам. Бигерәк тә, махсус йүнәлеш буйынса эшләгән табиптар кәңәшен тыңлар инек. Мәҫәлән, ололар табибы - гериатрҙар - бар икән дә, мин генә түгел, барлыҡ оло быуын кешеләре уның кәңәштәрен йотлоғоп уҡыр ине.

Бына ошо булыр әйтер һүҙем шундай оло юбилей туйларға торған баҫма тураһында. Алдағы йылдарҙа ла арымай-талмай яҡты, хисле, матур йөкмәткеле гәзит сығарыуығыҙҙы дауам итегеҙ. Һеҙ яҙып, беҙ алдырып ҡыуанып торайыҡ.

**Зөлфәр ӘХМӘҘУЛЛИН.**
**Өфө ҡалаһы.**

*АФАРИН!*

# БОРОН-БОРОН...

**Борон-борон заманда, кәзә командир, өйрәк үрәтник, күркә дисәтник, һайыҫҡан һалдат булғанда барлыҡҡа килгән халыҡ әкиәттәрен беҙҙең көндәрҙә баш ҡала балалары М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры сәхнәһенән бәйән итте. Быйыл барыһына ла мөғжизәгә ышаныс, фәһем һәм күңел күтәренкелеге бүләк иткән был байрамда - "Һаумы, һаумы, әкиәт!" Донъя халыҡтары әкиәттәрен башҡортса һөйләүселәрҙең ҡала конкурсында меңгә яҡын бала ҡатнашты.**

Конкурс Өфөлә ун өсөнсө тапҡыр үткәрелә һәм унда балалар баҡсаһы тәрбиәләнеүселәре, мәктәптәрҙең башланғыс синыф уҡыусылары бик ихлас ҡатнаша. Быйыл 970 бала-саға, ҡаланың мәғариф учреждениеларынан 70 фольклор коллективы үҙ оҫталығын һынаны. Конкурста еңеүселәрҙе билдәләүе бик еңелдән булмағандыр баһалама ағзаларына, сөнки һәр кем бәйгегә етди әҙерләнеп килгән. Был театр сәхнәһендә сығыш яһаусыларҙан да күренде: әкиәтселәр кейемдәренән алып сәхнәләштереү өсөн кәрәк-яраҡтарға тиклем ентекле хәстәрләгән. Конкурстың "Йәнһүрәттәр һәм анимацион фильмдар" номинацияһына 30-ға яҡын йәнһүрәт килгән һәм улар араһынан беренсе урынға 111-се гимназия уҡыусылары лайыҡ булды. Ә бына йәш ҡәләм тирбәтеүселәр араһында иң-иңдәрен билдәләргә ярҙам иткән "Йәш әкиәтсе" номинацияһында 40-ҡа яҡын ижади эш ҡаралған һәм 166-сы Башҡорт балалар баҡсаһы тәрбиәләнеүсеһе Динислам Нурмөхәмәтов беренсе урынға сыҡты. Һүрәт төшөрөргә әүәҫ кескәйҙәр "Әкиәттәр - халыҡ аҡылы хазинаһы" тигән номинацияла билдәләнде һәм Өфөнөң 103-сө мәктәбенән Диана Әминева 200-гә яҡын дәғүәсене артта ҡалдырып, төп еңеүсе тип танылды.

**(Дауамы 6-сы биттә).**



*(Гран-при ялаусы Алмас Вәлиев).*

12+

✓ *Кафе, магазин, бутик һәм киоскылар, хеҙмәттәр күрһәтеүсе салондар атамаларының алтаҡталары сит ил һүҙҙәре менән сыбарланды. Баштан аяҡ! Әйтерһең дә, беҙҙә тик американдар, инглиздәр йә французлар йәшәй.*



КЕМ АЛЫҠ?

# ИҢ ШӘП БҮЛӘК - КИТАП!

**Гәзит-журналдарға яҙылыу кампанияһының иң ҡыҙыу мәле бара. Халыҡ гәзит-журнал-китап уҡыуҙан төңөлә бара, тип уфтаныла ла, дуҫтарыбыҙҙы бөтөнләй юҡ юғалтып бөтмәгәнбеҙ икәненә ышанабыҙ. Бар әле гәзит һүҙен үҙ иткәндәр, "Гәзиттә бит шулай яҙылған!" тип, һәр һүҙен гәзит һүҙе менән йөпләүселәр - улар беҙҙә ҡағыҙ баҫмаларҙың киләсәктә лә йәшәйәсәгенә өмөт уята.**

Шулай итеп, **16 июнгә тиклем 2022** йылдың икенсе яртыһы өсөн **ПР905** индекслы **"Киске Өфө"** гәзитенә ташламалы хаҡҡа - **664 һум 66 тингә** яҙылып ҡуйһағыҙ, беҙ был өмөттөң аҡланыуынан дәртләнеп, уҡыусыларыбыҙҙы рухиәт менән һуғарыуҙы, кәрәкле мәғлүмәттәр еткереүҙе дауам итербеҙ.



● **Был миҙгелдә лә гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәр араһынан кемдәрҙер:**
- Зәйнәп Биишеваның "Кәмһетелгәндәр", "Оло Эйек буйында", "Яҡтыға";
- Һәҙиә Дәүләтшинаның "Ырғыҙ";
- Ноғман Мусиндың "Һайланма әҫәрҙәр";
- "Башҡорт халыҡ ижады"ның X, XV томдары;
- Таңһылыу Кусимованың "Башҡорт исемдәре";
- Буранбай Иҫҡужиндың "Хазина" һәм башҡа матур ғына китаптарға лайыҡ буласаҡ.

Квитанцияға ҡушып, гәзитебеҙ тураһындағы фекерегеҙ теркәлгән ҡош теләндәй генә хатығыҙҙы ла һалһағыҙ, бик шат булырбыҙ

● Ә кемдәрҙә бүләктәр ҡыҙыҡһындырмай, улар беҙгә **тыуған көндәрен** хәбәр итһен.

● **"Киске Өфө" - бүләгем" акцияһы ла дауам итә.** Уға ҡушылып, ауылдарҙағы туғандарығыҙға, атай-әсәйҙәргә, мәсеттәргә, таныштарығыҙға гәзитебеҙҙе яҙҙырып шатландырығыҙ, тимәксебеҙ.

● **Почтальондар иғтибарына!** Гәзит-журналдарҙың таралыуы һеҙҙең егәрлелек, ныҡышмалыҡ, һеҙҙең йүгереп йөрөүҙәр аша атҡарылғанын беләбеҙ һәм баһалайбыҙ. Хеҙмәтегеҙҙе һүҙ менән генә түгел, бүләктәребеҙ менән дә билдәләмәксебеҙ. "Киске Өфө"гә иң күп кешене яҙҙырыусы почта хеҙмәткәрҙәрен бүләктәр көтә.

● **Өфөлә йәшәүселәр өсөн гәзитебеҙгә яҙылыуҙың шундай юлдары ла бар:**
- Яҡын йәшәгәндәр редакциябыҙҙа яҙылып, гәзитте аҙна һайын үҙе килеп алып йөрөй ала: ярты йылға 336 һум.
- Коллектив менән яҙылыусыларға (кәмендә 5 дана) гәзит ярты йылға шулай уҡ 336 һумға төшәсәк, уларға баҫманы редакция үҙе килтереп бирәсәк.

● Йәшәгән йортобоҙ подъезында почта йәшниктәре юҡ, тип зарланыусылар **"Өфөматбуғат"** ("Тотум" ЯСШ) киоскыларында арзаныраҡҡа - **540 һумға** яҙылып, почтальон килгәнен көтмәй, һәр шәмбе һайын үҙе барып алырға мөмкин.

● **Иҫкәртеү.** Почталарҙа, киоскыларҙа гәзиткә яҙҙырыуҙан баш тарталар икән, йә яҙҙырған булып та, өйҙәрегеҙгә гәзитте алып килмәйҙәр икән, зинһар, редакцияға шылтыратып хәбәр итегеҙ.

● Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**. Беҙҙең электрон почта: **kiskeufa@mail.ru**.

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

БЫНАҒАЙЫШ!

**Бөгөн сит ил тауарҙарын үҙебеҙҙеке менән алыштырыу бурысы санкцияларға яуап ҡына түгел, ә илдең иҡтисади үҙаллылығын үҫтереү менән дә бәйле. Был осорҙағы һәр бер башланғыс ҡиммәт һәм һәр яҡлап хуплауға, ярҙамға мохтаж. Тауар, аҙыҡ-түлек етештереү генә түгел, хеҙмәттәр күрһәтеү һәм йәмәғәт туҡланыуы рәүешен дә үҙгәртеп ҡороу талап ителә.**

# ХӘЛДӘР ҺӘЙБӘТ БУЛҺЫН,

## үҙебеҙсә булһын!




Дөрөҫ, Рәсәй ҡулланыусылары ғүмер буйы сит ил тауарҙарына өҫтөнлөк биреп, ватан продукцияһын хурлап, сит ил "өлгө"ләренә һуҡырҙарса эйәреп, табынып йәшәне. Айырыуса йәштәребеҙҙә джинсылар, фирма кроссовкаларымы, электроникамы йә машинамы, шулай уҡ башҡа төр сит-ят тауарҙарға бәйлелек барлыҡҡа килде. Үҙебеҙҙең илдә етештерелгәндә файҙаланыу хатта ки ниндәйҙер кәмселек, тормоштан артта ҡалғанлыҡ билдәһе итеп, кәмһетеп ҡаралды.

Патриотизм ҡайҙа булды, тип аптырарға кәрәкмәй, ул йәш быуын аңынан ана шул сит-ят тауар, бургер, кока-кола һәм сепрәк-сапраҡтар менән ҡыҫырыҡлап сығарылды. Был ғына етмәне, беҙҙең урамдарҙағы һәр төрлө кафе, магазин, бутик һәм киоскылар, хеҙмәттәр күрһәтеүсе салондар атамаларының алтаҡталары сит ил һүҙҙәре менән сыбарланды. Баштан аяҡ! Әйтерһең дә, беҙҙә тик американдар, инглиздәр йә французлар йәшәй; рус һәм башҡорт телдәре зымзыя онотолдо. Былдай атамаларҙы теҙеп һанап сығыу ҙа кәрәкмәй - Өфө урамдарына бер сығып әйләнеүең дә етә.

Былдай хәлдәрҙең йыш ҡына көлкөлә хәлдәр тыуҙырыуына ла шаһитбыҙ. Мәҫәлән, сифатлы, тәмле милли ризыҡы һәм ҡиммәтле башланғысы менән илгә танылыу алған Aibat Hallyar кафеһының атамаһын ғына алайыҡ. Юҡ, кафе ризыҡы, ғөмүмән, эшҡыуар Марат Нәсхетдинов проектына ҡарата Рәсәй Президенты ла, Башҡортостан Башлығы ла маҡтау һүҙҙәре генә белдерҙе, хупланы һәм, ысынлап та, ул быға лайыҡ. Һүҙ сит ил хәрефтәре хаҡында. Әйткәндәй, Президент Владимир Владимировичтың урыны менән төртмә телле, юморға бай кеше икәнен беләбеҙ. Әлеге Aibat Hallyar атамаһына ҡарата ла уның "Айпад Халява" тип шаяртып алыуында кинәйә юҡ түгелдер. "Һәйбәт хәлдәр" тип тултырып башҡортса, үҙебеҙҙең туған, күнелебеҙгә яҡын хәрефтәр менән яҙып ҡуйғандан ғына кафе үҙенең бәйәһен, ҡиммәтен һис юғалтмаҫ ине...

Бөгөн, санкциялары менән Америка һәм Европа илдәре үҙҙәренең ысын йөҙөн күрһәтеү генә түгел, ә беҙгә ҡарап, "теш ыржайтҡан" мәлдә беҙ һаман да уларҙы ҡабатлап, уларҙыҡын өҫтөн күреп, уларса йәшәргә тейешме ни? Нимә генә тиһәң дә, илһөйәрлек, телһөйәрлек тойғолары иң тәүҙә ана шундай ваҡ тойолған, әммә ҙур юғалтыуҙарға килтереүе ихтимал хәрефтәргә лә бәйле.

Әйткәндәй, күптән түгел РФ Дәүләт Думаһы депутаты Солтан Хәмзәев, Рәсәйҙәге коммерция ойошмаларына һәм офистарға сит телдә яҙылған алтактлар ҡуйыуҙы тыйырға кәрәк, тигән тәҡдим индерҙе. Депутат шулай уҡ закон нигеҙҙәренә һәм хоҡуҡ нормаларына тейешле үҙгәрештәр индереп, шул нигеҙҙә үҙебеҙҙең һәм Рәсәйҙә эшләүсе сит ил предприятиеларын алтаҡталарҙы рус телендә яҙыуҙа талап итеү мәсьәләһен ҡарауҙы ла һорана. Ысынлап та, быны һис кенә лә "принципҡа барыу" тип ҡарарға ярамай. Уйлап ҡараһаң, сит ил һүҙҙәрен менән сыбарланған был атамаларҙы кешегә ҡапылда аңлауы ла ҡыйын булып китә. Этник һәм халыҡ-ара тикшеренеүҙәр үҙәгенең ғилми етәксеһе Антон Бредихин Дәүләт Думаһы депутатының тәҡдимен яҡлап, беҙгә, ысынлап та, рус телен популярлаштырыу кәрәклеге хаҡында әйтте: рус һүҙҙәрен сит телдекенә алыштырыу йөмғиәттең мәҙәни кодын юғалтыуға килтерә, тине ул. Был берҙәй үк кимәлдә беҙҙең туған телебеҙгә лә ҡағыла түгелме?

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Өфөлә Башҡортостандың агросәнәғәт кластерын алдан яҡлау уҙғарылды. Уға вертикаль-интеграция бәйләнеше төҙөгән ун ауыл хужалығы предприятиеһы инә. Был процестарҙы баҫыуҙан алып сауҙа кәштәләренә тиклем контролгә алырға булышлыҡ итәсәк. "Киң мәғлүмәт сараларында Рәсәйҙең төрлө субъекттарында аҙыҡ-түлек өсөн төргәк, йәиһә башҡа әйбер етешмәй тип ҡурҡытҡан саҡтарында, ә ҡайһы ваҡыт нигеҙле иҫкәртеүҙәр булғанда, былдай проблемаларҙы хәл итергә тап ошондай агросәнәғәт кластерҙары булышлыҡ итәсәк", - тине РФ Кластерҙар һәм технопарктар ассоциацияһы директоры Андрей Шпиленко.

✓1 июндә "Торатау" конгресс-холында "АРТ-Ҡоролтай. Балалар" форумы уҙғарылды. Был проект һәләтле балаларҙы үҫтереүгә, уларҙың талантын тормошҡа ашырыу өсөн мөмкинлектәрҙе киңәйтеүгә йүнәлтелгән. Форумдың эшлекле программаһында "Заманса шарттарҙа матди булмаған мәҙәни мираҫты һаҡлау", "Мәҙәниәт өлкәһендә берҙәм белем биреү киңлеген булдырыу" секциялары эшләне, шулай уҡ "Тамырым башҡорт" балалар-үҫмерҙәр форумында ҡатнашыусылар өсөн майҙансыҡ ойошторолдо.

✓27 майҙан Башҡортостандың ситуация үҙәге 3 йәштән 7 йәшкә тиклемге балаһы булған ғаиләләргә түләүҙәр мәсьәләләре буйынса шылтыратыуҙар ҡабул итә башланы. Операторҙар көн һайын иртәнге сәғәт 8-ҙән киске 8-гә тиклем эшләй. Ситуация үҙәгенең ҡыҙыу бәйләнеш номерҙары: +7 (347) 218-19-19, 122. Бынан тыш, белгестәр ярҙамында башҡа социаль әһәмиәтле темалар буйынса (эшҡыуарлыҡҡа дәүләт ярҙамы, ковидты иҫкәртеү) консультация алырға мөмкин.

✓Башҡортостан Хөкүмәте тарафынан эргә-тирәһендәге магазиндарҙа һәм дөйөм туҡланыу урындарында спиртлы эсемлектәр һатыу тыйылған юғары хәүефле сығанаҡтар исемлеген билдәләнде. Унда 250 хәүефле производство объектты ингән. Улар араһында - газ һәм нефть эшкәртеү предприятиеларының етештереү майҙансыҡтары, шыйыҡландырылған газ һәм нефть продукттарын һаҡлағыстар, полимер каучуктарҙың тауар-сеймал базаһы, файҙалы ҡаҙылмалар сығарыу карьерҙары, ТЭЦ, химия производствоһы предприятиелары, рудниктар, ҡорос сым производствоһы һәм башҡа объекттар.

✓ *Илебеҙ күберәген сеймал һатып көн итә, ауыр, еңел сәнәғәт, ауыл хужалығы әле һаман ныҡлап үҫешә алмай. Бындай шарттарҙа ҡулы эш белеүсе махсус белемлеләр үҙ эшен аса, юғары һөҙөмтәләргә өлгәшә.*



*КИЛЕШМӘЙЕМ!*

# ДӨРӨҪ ЯҘАЙЫҠ...

**Мәләүез ҡалаһы буйлап маршрут автобусында ҡайтып киләм. Ҡаршы ултырғыстарҙа икенсе-өсөнсө кластарҙа уҡыған һап-һары сәсле ике уҡыусы бер-береһенә һорау бирешә. Тәҙрәгә яҡыны: "Дедушка башҡортса нисек була?"- ти. Икенсеһе ҡәнәғәт йөҙ менән: "Улатай",- тип яуаплай. Үҙе шунда уҡ ҡаршы һорау бирә: "Бабушка нисек атала?". "Улясай" булды яуап. Шунан башҡортса нисәгә тиклем һанай белеүҙәрен, тағы ниндәй һүҙ запастары барлығы менән уртаҡлаштылар. Уларҙың телебеҙҙе ҙур теләк менән өйрәнеүе йөҙҙәренән үк күренеп тора ине. Шул саҡ бынан бер егерме бишләп йыл элек булған ваҡиға иҫкә төштө.**



Салауат ҡалаһында ағайым менән аҙыҡ-түлек магазинына индек. Дөрөҫөрәге, тәүҙә ул инеп китте, машинамдың ишектәрен бикләгәс, мин дә магазин ишеген астым. Сират ярайһы ғына ҙур. Ағайым янына килеп, бер-ике һүҙ ҙә әйтеп өлгөрмәнем, сиратта торғандар: "Беҙҙең артҡа баҫ, гел шулай үҙҙәренсә "калякать" итеп, сиратһыҙ алырға өйрәнделәр", - тип шаулашты. Шул саҡ һатыусы эшен туҡтатып, бөтәһенә лә боролоп, тауышын күтәрә биреберәк: "Минең ирем дә элек, ниңә башҡорт телен уҡытып, улыбыҙҙың башын ҡатыраһың, тип мыжыны. Күптән түгел икәүләп Мәскәүгә барҙылар. Купела ике көньяҡ кешеһе иремде вагон-ресторанға араҡы артынан ебәрә. Үҙ телдәрендә: "Әйҙә, был урыҫты иҫертеп, аҡсаһын алайыҡ", - тип һөйләшәләр. Улым быларҙы аңлап, коридорҙа атаһына әйтә. "Ә һин ҡайҙан беләһең?" - тигән һорауға: "Улар башҡортсаға оҡшаған телдә һөйләшә", - ти улым. Мәскәүҙән ҡайтыу менән ирем улыбыҙҙы башҡорт теле дәрестәрен күберәк уҡытҡан класҡа бирергә ҡушты. Һеҙ ҙә өйрәнегеҙ урындағы халыҡ телен, шул ваҡыт башҡа кеше һөйләшкән "калякать" булмаҫ", - тип һөйләп ташланы...

Хәҙер халыҡ грамоталы, тигәнде йыш ишетергә тура килә. Шулай ҙа төптө ҡолаҡҡа ятмаған факттарҙы ла осратаһың. Мәҫәлән, игеҙәк малайҙарға Әмир һәм Эмир тигән исемдәр ҡуштыралар. Һуңғыһы шул уҡ Әмир була бит инде. Имам аҙан әйтеп, уң ҡолағына исемде әйтә, һуңынан ҡәмәт төшөрөп, һул ҡолағына өндәшә. Бына шулай итеп яңы тыуған баланы имам Аллаһу Тәғәлә менән бәйләй һәм ошо мәлдән алып бөтә мәғлүмәт яңы аталған исемгә килә башлай. Әгәр ике балаға бер исем (мосолманса) ҡушыла икән, береһенә йүнәлтелгән мәғлүмәт, сауап икенсеһенә эләкмәҫ тип кем гарантия бирә ала? Быны белеп тә үҙһүҙлегенә барып эшләгән атай-әсәйгә ни тип әйтәһең?

Элек тыуыу тураһында таныҡлыҡты ауыл советында биргәндәр, исемдәрҙең дөрөҫ яҙылышы тураһында китап-фәлән юҡ, хакимиәттәрҙә эшләгәндәрҙең дә белем кимәле бөгөнгөләр менән сағыштырырлыҡ түгел. Шулай бер хәл иҫкә төшә. Гәзиттә эшләгәндә район кимәлендәге бер ҙур булмаған ойошма етәксеһе тураһында юбилей мәҡәләһе баҫтыҡ. Икенсе көндә эш башланыр алдынан был кеше гәзит тотоп, редакцияға килеп инде. Тупһанан уҡ асыулы йөҙ менән: "Минең атайым Миңлеғужа түгел, ә Минғужа!" - тип дәғүә белдерҙе һәм паспортын күрһәтте. Бынан алтмыш йыл элек ауыл хакимиәте белгесе тел нормаларын һанға һуҡмай, атаһының исемен шулай яҙғанға гәзит яуаплы түгел бит инде, ләкин юбиляр быны ишетергә лә теләмәне. Таңһылыу апай Кусимова "Исемдәр донъяһы" китабында Миңлеғужа - башҡортса, фарсыса миңле+ғужа һүҙҙәренән тора, тип аңлата. Миңле күп халыҡтарҙа, шул иҫәптән башҡорттарҙа, бәхет символы, үҙенә генә хас яҙмыш билдәһе иҫәпләнә.

Әйткәндәй, Башҡортостанда донъя күргән һәр башҡорт гәзите үҙ төбәгендә туған тел нормаларын һаҡларға тейеш. Ә бына республика баҫмалары дәүләт телдәре ҡағиҙәләрен мотлаҡ үтәргә бурыслы. Бына ошоларҙан сығып, хөрмәтле уҡыусыларҙың, башҡорт филологтарының, журналистарының иғтибарын бер исемгә йүнәлтмәксе буламын.

Беҙҙең оҙаҡ йылдар көрәшеп, йөҙәрләгән мең ҡултамға йыйып, тарихи дөрөҫлөктө ҡайтарған геройыбыҙ бар. Эйе, ул - Рәсәй Геройы Миңлеғәли Шайморатов. Һәр баҫма ҡаһарманыбыҙ исемен үҙенсә яҙа: Миңлеғәле тип тә, Миңлеғәли тип тә. Башҡортостан телевидениеһы дикторҙары Миңлеғәли ти, ә аҫта йүгергән юлда Миңлеғәле тип яҙыла. Кемдер бер хәрефтә айырма юҡ кеүек күрер, ә бына башҡалабыҙҙың Совет майҙанында 11 октябрҙә асыласаҡ һәйкәлдәге яҙыуҙа исем тел нормаһына тура килергә тейеш һәм һәр республика баҫмаһы уны үтәргә бурыслы.

Шуны аңлау мөһим: телебеҙҙе башҡа милләттәр ҙә өйрәнә башланы, ә беҙ, башҡорттар, милли батырыбыҙҙың исемен дә дөрөҫ яҙа белмәйбеҙ. Теге автобустағы һары сәсле, зәңгәр күҙле ике малай берәй башҡорттан: "Генерал Шайморатовтың исемен ниңә төрлөсә яҙаһығыҙ?" - тип һораһа, уныһы нисек яуап бирер, сөнки бер баҫма бер төрлө, икенсеһендә икенсе төрлө яҙыла. Оятҡа ҡалмаҫ элек был мәсьәләне хәл итергә кәрәк түгелме икән?

**Сәйфулла ӘМИРОВ.**
**Мәләүез ҡалаһы.**

*ӨС ДӘЛИЛ: АБВ*

# АТҠА БЕСӘН КЕМ ҺАЛА?




**Яңыраҡ үҙенең автосервисы булған бер башҡорт егете менән байтаҡ ҡына һөйләшеп торҙом. Ул Өфө автотранспорт техникумын тамамлаған. Тәүҙә бюджет тармағында эшләп ҡараған, һуңынан үҙ эшен асырға мәжбүр булған. Хәҙер уның айлыҡ килеме уртаса алғанда 250 мең һум самаһы. Егеттең фекеренсә, кемдәр юғары уҡыу йортон тамамлай, улар 20-30 мең һумға бюджет өлкәһендә хеҙмәт итә, ә техникум, училище белемлеләр мотлаҡ рәүештә үҙ эшен асып, юғары белемлеләрҙән 10-15 тапҡырға күберәк айлыҡ килем ала. Был егет фекеренсә, хәҙерге заманда юғары белем мотлаҡ түгел. Бик ҡыҙыҡлы фекер, шул хаҡта уй ҡорайыҡ.**

А "Һин дә мулла, мин дә мулла, атҡа бесән кем һала?" тигән әйтем бар ине совет осоронда. Образлы итеп әйткәндә, техникумдар, профессиональ техник училищелар "атҡа бесән һалыусы" һөнәренә, ҡул, оҫталыҡ, тәжрибә менән башҡара торған аныҡ һөнәргә (тракторсы, водитель, машинист, токарь, иретеп йәбештереүсе, крансы, маляр, тегенсе, столяр, трамвай, троллейбус йөрөтөүсе һ.б.) өйрәтә. Юғары уҡыу йорто иһә, күберәк осраҡта, тағы ла образ теленә күсергәндә, ошо барлыҡ һөнәрҙәрҙе классик кимәлдә ойоштороусыларҙы, бер һүҙ менән әйткәндә, буласаҡ етәкселәрҙе әҙерләне. Ә тормошта һәр ваҡыт аныҡ эш башҡарыусы, йәғни атҡа бесән һалыусы ота. Был хаҡта артабан икенсе дәлилдә.

Б Ни өсөн махсус урта белемлеләр юғары белемлеләргә ҡарағанда отошлораҡ хәлдә ҡалды һуң? Минеңсә, беҙҙең илдә юғары белем биреү системаһы совет осоро иҡтисады системаһына яраҡлаштырылып, ундай иҡтисад юҡҡа сыҡҡандан һуң да күпселектә үҙгәрешһеҙ ҡалып, икешәр-өсәр юғары уҡыу йортон тамамлаусыларҙы ла эшһеҙ торғоҙоп ҡалдырҙы. Икенсе һүҙ менән әйткәндә, беҙ элеккене емерҙек, әле һаман булһын яңы осор иҡтисадын барлыҡҡа килтермәгәнбеҙ. Илебеҙ күберәген сеймал һатып көн итә, ауыр, еңел сәнәғәт, ауыл хужалығы әле һаман ныҡлап үҫешә алмай. Бындай шарттарҙа ҡулы эш белеүсе махсус белемлеләр шул бушлыҡтың аҙ ғына өлөшөн тултырып, үҙ эшен аса, юғары һөҙөмтәләргә өлгәшә. Уларҙың был уңышы иҡтисадыбыҙ үҫеше зарурлығын аңлата.

В Белемле белеменә, һөнәрле һөнәренә таяна. Үкенескә күрә, илебеҙ тормошона көтмәгәндә килеп ингән баҙар иҡтисады үҙ даирәһендә уңышҡа өлгәшеү өсөн белемдән бигерәк әрһеҙлекте талап итә. Әлбиттә, беҙ үҙ иҡтисадыбыҙҙың һәр тармағын үҫтереүгә өлгәшһәк, үҙ автомобилдәребеҙҙе юғары сифатлы итеп сығарһаҡ, ауыр һәм еңел сәнәғәтебеҙ донъя баҙарына сығарырлыҡ кимәлдә үҫешһә, ауыл хужалығы тармағы сәскә атһа, юғары белемлеләр ихтыяжы килеп тыуасаҡ, әлегә был хәл үҫешебеҙҙең ниндәй кимәлдә икәнлеген күрһәтә лә инде. Нимә генә тимә, юғары интеллектлы белгес йылдар буйы эшләгән аҡсаны, йылғырҙар бер көндә, бер сәғәттә эшләп ала. Күрәһең, илебеҙ был осорҙо мотлаҡ үтергә тейештер.

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостан Ауыл хужалығы министрлығының оператив мәғлүмәттәре буйынса, республикала планлаштырылған 425,5 мең гектарҙың 350 мең гектарына тиерлек майлы культуралар сәселгән. Аграр ведомствонан хәбәр итеүҙәренсә, быйыл майлы культураларға 2021 йылға ҡарағанда 47 гектарға күберәк ер бүленгән.

✓26 майҙа Рәсәй банкының директорҙар советы төп ставканы йылына 11 процентҡа тиклем кәметеү тураһында ҡарар ҡабул итте. Был хаҡта Үҙәк банктың матбуғат хеҙмәте хәбәр итте. "Һуңғы аҙналағы мәғлүмәттәр ағымдағы хаҡтар үҫеше темпы һиҙелерлек тотҡарланыуын күрһәтә. Апрелдә йыллыҡ инфляция 17,8 процентҡа етһә, 20 майға ҡарата баһалау буйынса, Рәсәй банкының апрелдәге фаразынан тиҙерәк кәмеп, 17,5 процентҡа төштө", - тиелә банк белдереүендә. Шул уҡ ваҡытта Рәсәй өсөн тышҡы шарттар ҡатмарлы булып ҡала, был иҡтисади әүҙемлекте шаҡтай сикләй.

✓1932 йылдың 16 майында Ишембай ауылы янындағы 702-се скважинанан, 680 метр тәрәнлектән, тәүге нефть фонтаны урғылып сыҡҡан. Был көн рәсми рәүештә Башҡортостан нефтен асыу көнө тип иҫәпләнә, быйыл ошо датаға 90 йыл тулыу билдәләнә. Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров йыл башында ошо мөһим юбилейға әҙерләнеү һәм уны ойоштороу тураһында Указға ҡул ҡуйҙы. Республика етәксеһе һүҙҙәренсә, Башҡортостан нефте юбилейын лайыҡлы кимәлдә уҙғарырға кәрәк.

✓Башҡортостан Хөкүмәте республиканың резерв фондындағы бюджет аҡсаһын файҙаланыу тәртибенә үҙгәрештәр индерҙе. Атап әйткәндә, уны Донецк һәм Луганск халыҡ республикаларында йәшәүселәргә гуманитар ярҙам күрһәтеү өсөн файҙаланырға мөмкин. Резерв фонд Башҡортостан бюджеты аҡсаһының республиканың сығым йөкләмәһен үтәү өсөн тәғәйенләнгән бер өлөшө. 2021 йылда Башҡортостан Хөкүмәтенең Резерв фондына 2,6 миллиард һум һалынған.

✓"Биорон" компанияһы Башҡортостанда B2 витаминын етештерә башларға ниәтләй, ул "Алға" махсус иҡтисади зонаһы резиденты булды. Компания ошо биләмәлә йылына дөйөм ҡеүәте 900 тонна рибофлавин (B2 витамины) етештереү буйынса заманса производство асырға йыйына. Быйыл тормошҡа ашырыла башлаған проекттың маҡсаты - Көнбайыш Европанан һәм Ҡытайҙан килтерелгән продукцияны алмаштырыу. "Биорон" йәмғиәте 2021 йылдың июлендә Стәрлетамаҡ районында теркәлгән.

✔ Башҡортостанда һуттар етештереү заводын асыу тураһында һөйләшеп килешелгән. Бынан тыш, Башҡортостан мамыҡ эшкәртеү буйынса берлектәге производство булдырыу мөмкинлеген дә ҡарай.



ҠЫҪҠАСА

# УҠЫТЫУСЫ, ӘЙҘӘ!

**1 июндән Башҡортостанда ауыл ерендә эшләп йөрөгән йәш уҡытыусыларға грант конкурсына документтар ҡабул ителә, тип хәбәр иттеләр республика Мәғариф һәм фән министрлығының матбуғат хеҙмәтенән.** 2022 йылда 690 мең һумлыҡ 25 грант бүлеү ҡаралған. Ғаризаларҙы 30 июнгә тиклем ебәрергә кәрәк. Конкурста халҡы 15 меңдән артмаған ауыл биләмәһенең дөйөм белем биреү ойошмаларына эшкә урынлашкан 35 йәшкә тиклемге уҡытыусылар ҡатнаша. Бынан тыш, уларҙың йөкләмәһе бер ставканан кәм булмаҫҡа тейеш. Быға тиклем ошондай грант алған уҡытыусылар конкурста ҡабаттан ҡатнаша алмай. Документтар Өфө ҡалаһы, Минһажев урамы, 120 адресы буйынса ҡабул ителә.

✔ **1 июндә Өфөлә йәштәрҙең Стандарттар олимпиадаһының финал туры үтте.** Унда 2022 йылдың августында Көньяҡ Кореяла үтәсәк Халыҡ-ара олимпиадала илебеҙ исеменән сығыш яһаясаҡ йыйылма команда ойошторолдо. Бер ай дауамында жюри ағзалары "Стандарттар ни өсөн кәрәк?" темаһына 13-18 йәш төркөмөндәге мәктәп уҡыусылары тарафынан башҡарылған анкеталар һәм эсселарҙы баһаланы. Конкурска 230-ҙан ашыу ғариза килгән. Һайлап алыу турына - 75, финалға 35 уҡыусы үтте. "Сифат идеологияһы етештереүселәргә лә, ҡулланыусыларға ла аңлайышлы булырға тейеш. Уны мәктәп эскәмйәһенән үк формалаштыра башлау мөһим, - тине Башҡортостан Республикаһының сәнәғәт, энергетика һәм инновациялар министры Александр Шельдяев. - 2022 йыл Башҡортостан Башлығы тарафынан Һөнәри белем биреү тармағын яңыртыу, лайыҡлы эш шарттары һәм хеҙмәт династиялары йылы тип иғлан ителде. Шуға күрә Өфөлә йәштәрҙең Стандарттар олимпиадаһын үткәреү эшсе һөнәрҙәрҙе үҫтереүҙең мөһимлеген һәм әһәмиәтен тағы бер тапҡыр билдәләй. Был - Башҡортостан тураһында заманса мәғариф һәм хеҙмәт баҙарын комплекслы үҫтергән һөнәри йүнәлешле төбәк булараҡ белдереү өсөн шәп мөмкинлек".

✔ **Башҡортостандың иҡтисади үҫеш һәм инвестиция сәйәсәте министры Рөстәм Моратов республиканың Үзбәкстан менән ауыл хужалығы өлкәһендә бер нисә берлектәге инвестиция проекттарын тормошҡа ашырыу пландары хаҡында һөйләне.** "Теплица хужалығы, баҡсалар, тундырыу, сублимация - быларҙың барыһы ла беҙгә билдәле бер аҙымдар яһарға мөмкинлек биргән яңылыҡ ул. Башҡортостанда һуттар етештереү заводын асыу тураһында һөйләшеп килешелгән. Үзбәкстандағы коллегаларыбыҙ осрашыуҙа шундай ниәт менән сығыш яһаны", - тип билдәләне Рөстәм Моратов. Үзбәкстан да картуфты үҫтереү һәм тәрән эшкәртеү буйынса хеҙмәттәшлек менән ҡыҙыҡһына, сөнки ерҙең үҙенсәлектәре уларға быны эшләргә мөмкинлек бирмәй, тип өҫтәне ул. "Үзбәкстандың чипсы етештереү менән шөғөлләнгән компанияһы менән дә һөйләшеп килешелгән. Шулай уҡ шәкәр сөгөлдөрөн етештереү, эшкәртеү һәм үҫтереү пландары бар", - тине Рөстәм Моратов. Бынан тыш, Башҡортостан мамыҡ эшкәртеү буйынса берлектәге производство булдырыу мөмкинлеген дә ҡарай.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ҺОҠЛАНҒЫС ПРЕДПРИЯТИЕ

**Өфөгә эш сәфәре менән килгән Рәсәй Президентының Волга буйы федераль округындағы Тулы хоҡуҡлы вәкиле Игорь Комаров һәм Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Рәсәйҙә быраулау һәм скважиналарҙы капиталь ремонтлау өсөн юғары технологик ҡорамалдар һәм реагенттар етештереүселәрҙең береһе "БУРИНТЕХ" ғилми-етештереү предприятиеһының эшмәкәрлеге менән танышты.**

"БУРИНТЕХ" ғилми-етештереү предприятиеһының генераль директоры Ғиниәт Ишбаев ҡунаҡтарға коллективтың Рәсәйҙә тәүге тапҡыр ҡырҡыу-бурау эшмәкәрлеге бырауын әҙерләүе һәм ҡулланыуға индереүе тураһында һөйләне. Быға тиклем илдең яғыулыҡ-энергетика комплексында сит ил әйберҙәре файҙаланылған. Предприятиеның был эшләнмәһе быраулау тиҙлеген ҡырҡа арттырырға һәм скважиналар тәҙөүгә сығымдарҙы кәметергә мөмкинлек биргән. "БУРИНТЕХ" етештергән тауар сит ил етештереүселәре менән уңышлы ярыша һәм Төньяҡ һәм Көньяҡ Америкаға, БДБ илдәре, Яҡын Көнсығыш, Европа һәм Төньяҡ Африка илдәренә ебәрелә. Предприятиеның тағы бер ғилми нигеҙҙәге импортты алмаштырыған проекты поликристаллик алмас композиттар - PDC ҡырҡҡыстар етештереү менән бәйләнгән. Экстремаль ҡатылыҡ һәм ныҡлыҡ ҡиммәттәре булған ҡырҡҡыстар тузыуға сыҙамлы һәм юғары һөҙөмтәле тау тоҡомдарын емереүсе быраулау ҡоралын эшләү өсөн кәрәк.

Игорь Комаров көнбайыш илдәренең санкциялары компания эшенә йоғонто яһау-яһамауы, сығарылған продукция күләменең артыу мөмкинлектәре менән ҡыҙыҡһынды. Ғиниәт Ишбаев һүҙҙәренсә, компания продукция сығарыуҙы яҡынса 1,5 миллиард һумға арттырырға ниәтләй. "Был предприятие - республикабыҙҙың ғорурлығы. Бөгөн уның етәксеһе Ғиниәт Ғарифулла улы Ишбаев импортты алмаштырыу продукцияһын күрһәтте. "БУРИНТЕХ"тың күп деталдәре, ҡоралдары, әйберҙәренең Рәсәйҙә аналогтары юҡ. Әлегерәк уларҙы сит илдәрҙән һатып ала торғайнылар. Хәҙер тормош үҙебеҙҙә ошондай продукция етештереүгә этәргес бирә", - тине Радий Хәбиров.

Әйткәндәй, "БУРИНТЕХ" ғилми-етештереү предприятиеһында ике меңгә яҡын кеше эшләй, уртаса эш хаҡы 84 мең һум тәшкил итә. Һуңғы 20 йылда инвестициялар күләме яҡынса туғыҙ миллиард һум тәшкил иткән.

# ДАРЫУҘАР - ҮҘЕБЕҘҘЕКЕ



**"Фармстандарт-УфаВИТА" йәмғиәте 1941 йылға тиклем кондитер изделиелары етештергән завод ине. Бөгөн ул витаминлы продукция етештереүсе предприятие булараҡ фарминдустрияла үҙ урынын тапты. Унда 119-ҙан ашыу төр дарыу сығарыла. Күптән түгел был йәмғиәттә Волга буйы федераль округы буйынса Рәсәй Президентының тулы хоҡуҡлы вәкиле Игорь Комаров һәм республика Башлығы Радий Хәбиров булды.**

Предприятиеның генераль директоры Наил Низаметдинов 2020 йылдың декабренән бында Спутник V (Гам-КОВИД-Вак), 2021 йылдан Спутник Лайт вакциналары етештерелеүе хаҡында һөйләне. Игорь Комаров һәм Радий Хәбиров полимер флакондарҙа күҙ дарыуы һәм быяла ампулаларҙағы инъекция препараттары етештерелгән яңы производстволарҙы ҡараны. Тәүге проектҡа 918 миллион һум инвестиция һалынған һәм 125 эш урыны булдырылған.

Унда шулай уҡ таблетка төрөндә дарыуҙар сығарыла, уның етештереүсәнлеге йылына - 3 миллиард һум. Инвестиция күләме 1,53 миллиард һум, 235 эш урыны булдырылған. Быға тиклем ярыша бында гемофилия менән ауырыусыларҙы дауалау өсөн препарат етештереү буйынса цех төҙөүгә тамамларға тейештәр. Препарат 2023 йылда сығарыла башлаясаҡ. Проект хаҡы - 1,58 миллиард һум. 80 яңы эш урыны булдырыласаҡ.

2017 йылда "Фармстандарт" ҡаланың экологияһына көсөргәнеште кәметеү тураһында ҡарар ҡабул итте. Йүнәлештәрҙең береһе - заводтан сыҡҡан һыуҙы ҡала канализация селтәренә ағыҙыр алдынан таҙартыу. Проектлаусыларҙың маҡсаты - фармацевтика һыуын ағыҙыу өсөн алдынғы технологиялар талаптарына яуап биргән заманса таҙартыу ҡоролмаһын булдырыу. Уны бойомға ашырыуға йәмғиәт 257,7 миллион һум тотонған һәм ул ағымдағы йылдың беренсе кварталында тамамланған. Таҙартыу ҡоролмаһы техник һәм технологик һынауҙарҙы тулыһынса үткән һәм үҙенең һөҙөмтәлелеген күрһәткән.

**Азат ҒИЗЗӘТУЛЛИН.**

# СӘНӘҒӘТТЕ ҮҪТЕРӘБЕҘ



**Башҡортостан сәнәғәт кластерҙарын үҫтереүгә баҫым яһай, тип яҙҙы Радий Хәбиров социаль селтәрҙәге сәхифәһендә.**

"Иҡтисадыбыҙ алдында торған саҡырыуҙар шарттарында Башҡортостан сәнәғәт кластерҙарын үҫтереүгә баҫым яһай. Предприятиеларҙы берләштереү импортҡа бәйлелекте кәметергә, яңы эш урындары булдырырға мөмкинлек бирә. Башҡортостандың мебель етештереү өлкәһе илдә тәүгеләрҙән булып Рәсәйҙең Сәнәғәт һәм сауҙа министрлығы реестрына инде. Унда ҡатнашыусылар 775 миллион һумлыҡ проекттарҙы ғәмәлгә ашырырға ниәтләй. Алдағы 3-4 йылда ошо кластер предприятиеларында 1200-ҙән ашыу кеше эшләр тип көтөлә. Пилотһыҙ авиация өлкәһе юғары хеҙмәт хаҡы түләнгән тағы 5 мең эш урынын тәьмин итергә тейеш. Бында пилотһыҙ осоу аппараттары өсөн компоненттар һәм мәғлүмәт системаларын сығарыу планлаштырыла. Быны менән генә туҡтап ҡалмайбыҙ. Етештереүселәребеҙ производствоның төрлө өлкәләрендә берләшергә йыйына. Машина эшләү, сәнәғәт һәм агросәнәғәт кластерҙары - ойоштороу барышында. Беҙҙең ҙур предприятиелар уларҙа ҡатнашырға әҙер.

Башҡортостан - кластерҙарҙы үҫтереүҙә яңы алымдар индереү буйынса Рәсәйҙең пилот төбәктәренең береһе. Бөгөн "Яңы иҡтисади шарттарҙа предприятиеларҙы берләштереү" халыҡ-ара конгресының Өфөлә үтеүе осраҡлы түгел. Республикабыҙға илдең 40-тан ашыу төбәгенән делегациялар, Ирандан, Белоруссиянан, Ҡаҙағстандан партнерҙарыбыҙ, сит ил компанияларының вәкилдәре килде. Улар һәм Рәсәйҙең Кластерҙар һәм технопарктар ассоциацияһы директоры Андрей Викторович Шпиленко менән кластер үҫеше, халыҡ-ара кооперация мәсьәләләре, резиденттарға бирелгән субсидияларҙы һәм өҫтөнлөктәрҙе тикшерҙек, тәжрибә уртаҡлаштыҡ. Мөмкинлектәр киң, алға барабыҙ", - тип яҙҙы республика етәксеһе.

## Б А Ш  Ҡ А Л А  Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✔М-5 "Урал" трассаһы буйлап Өфөгә ингән урын (Дим районының Үҙәк урамы) дүрт һыҙатка тиклем киңәйтелә, тип хәбәр иттеләр "Приуралье" федераль автомобиль юлдары идаралығынан. Төҙөләш эштәрен 2022-2023 йылдарҙа башҡарыу күҙаллана. 2025-2027 йылдарға Шакшанан алып Иглин районы Балтика ауылына тиклемге участканы киңәйтеү планлаштырыла. Әлеге ваҡытта Благовар, Бүздәк, Туймазы райондары һәм Октябрьский участкаларында трасса 6 һыҙатка тиклем киңәйтелә.

✔Июндә "Өфө-Арена" боҙ һарайында Рәсәй уҡыусыларының XI йәйге Спартакиадаһын асыу тантанаһы була. Башҡортостан Республикаһы Спорт министрлығының матбуғат хеҙмәте хәбәр итеүенсә, абруйлы ҡунаҡтар, шул иҫәптән Рәсәй Федерацияһының спорт министры Олег Матыцин, Дәүләт Думаһының физик культура һәм спорт комитеты рәйесе Дмитрий Свищев, Рәсәйҙең Олимпия комитеты президенты Станислав Поздняков килеүе көтөлә. Спартакиада программаһына индерелгән 47 спорт төрө буйынса спортсыларҙың тантаналы парадын уҙғарыу планлаштырыла.

✔27 майҙа Өфөнән Анталъяға чартер авиарейстары асылды, тип хәбәр итте баш ҡала аэропортының матбуғат хеҙмәте. Рейстар шишәмбе, йома һәм йәкшәмбе көндәрендә башҡарыла. Бөгөн 232 пассажир тәүге "Боинг-767-300" менән Төркиәгә юлланды. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, Башҡортостанда йәшәүселәргә ял итеү өсөн 14 авиайүнәлеш, шул иҫәптән Истанбул, Дубай һәм Ереван асыҡ.

✔10 июндән Red Wings авиакомпанияһы Өфөнән Истанбулға даими осош программаһын башлай, тип хәбәр иттеләр Өфө аэропортының матбуғат хеҙмәтенән. Осоштар аҙна һайын, йома көндәрендә, Sukhoi Superjet-100 самолетында башҡарыла. Юлға биш сәғәт ваҡыт китә. Билеттарҙы авиакомпанияның һәм "Өфө" халыҡ-ара аэропорты сайтында һатып алырға мөмкин.

✔Рәсәйҙең 11 аэропортына - Анапа, Белгород, Брянск, Воронеж, Геленджик, Краснодар, Курск, Липецк, Дондағы Ростов, Симферополь һәм Элиста аэропорттарына осоу ваҡытлыса сикләнде. Рәсәй авиакомпанияларына пассажирҙар ташыуҙы Сочи, Волгоград, Минераль Һыуҙар, Ставрополь һәм Мәскәү аэропорттары аша альтернатив маршруттар буйынса ойоштороға тәҡдим ителде. Илдең башҡа аэропорттары штат режимында эшләй.

**БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

✔ *"Ниндәй ҡалала йәшәргә теләр инегеҙ һәм ул ҡала ниндәй булырға тейеш?" - тигән һорауға Ратмир Мәүлиев һис икеләнеүһеҙ Өфөнө атаны һәм уның төрлө категория граждандар өсөн уңайлы ҡала булырға тейешлеген әйтте.*



*КӨНАУАЗ*



# "БУШ ВӘҒӘҘӘЛӘР БИРЕРГӘ ЯРАТМАЙЫМ"

**2 июндә Өфө ҡала хакимиәте башлығы Ратмир Мәүлиев киң мәғлүмәт саралары журналистары өсөн матбуғат конференцияһы уҙғарҙы. Был сараны уның мэр вазифаһын башҡарыусы булып тәғәйенләнгәндән алып үткән 100 көн йомғаҡтары тип билдәләргә лә мөмкин.**

Тәү сиратта, ҡала башлығы Өфөлә башҡарылған эштәр буйынса дөйөм мәғлүмәт бирҙе. "Мин һәр районда булып, халыҡ менән осраштым, аралаштым, ғөмүмән, кабинетта ултырып түгел, урынға сығып, проблемаларҙы үҙ күҙем менән күреп хәл итеү яҡлымын", - тип белдерҙе ул. Иң элек алдағы аҙнала уҙасаҡ Ҡала көнө тураһында бәйән итте, уның программаһында ҡаралған ҡыҙыҡлы мәлдәргә туҡталды. Мәҫәлән, 12 июндә Өфөнөң 450 йыллығы брендбуғы геройы тулыһынса күрһәтеләсәк. Шулай уҡ ҡаланың төрлө майҙандарында сағыу тамашалар ҡаралған. Ленин урамында төрлө ҡалаларҙан саҡырылған урам театрҙары тамаша күрһәтәсәк, "Кашкаҙан" паркы асыласаҡ, Мәжит Ғафури паркында Әүҙем ғүмер оҙайлығы йылы буйынса саралар ойоштороласаҡ, ике тапҡыр Советтар Союзы Геройы исеменә лайыҡ булған ҡаһарман яҡташыбыҙ Муса Гәрәевтың тыуыуына 100 йыл тулыуға арналған саралар үтәсәк. Шулай уҡ ҡала хакимиәте башлығы кубогына көрәш буйынса ярыш та уҙғарыла.

Ратмир Рәфил улының сығышында, әлбиттә, Өфө ҡалаһы (Өфө ҡалғәһе) төҙөлөүҙең 450 йыллығы уңайынан сафҡа индерелергә тейешле объекттарға ҙур иғтибар бирелде. Шулай уҡ аҙна һайын оперативкаларҙа яңыраған темалар буйынса ентекле яуаптар алды журналистар. "Халыҡ менән бәйләнеш нисек ойошторолған?" - тигән һорауға ҡала башлығы сығышының башында уҡ билдәләп киткән осрашыуҙарҙы атаны, шулай уҡ инцидент порталына даими мониторинг эшләнеүен билдәләне.

Һуңғы ваҡытта хакимиәттә кадрҙар алмашыныуы йыш күҙәтелеүе тураһында хәбәр иткәйнек инде, был мәсьәләгә аңлатма биреп, Ратмир Мәүлиев: "Кадрҙар мәсьәләһендә иң мөһиме булып профессионаллек һәм ышаныс тора", - тип билдәләп, командаһына шундай хеҙмәткәрҙәрҙе йыйыуын, бер ыңғай 80 вакансия барлығын да белдерҙе.

Өфөгә ингән урында, Салауат проспекты башланған ерҙә баш ҡаланың йөҙөк ҡашы булырҙай мәсеттең һаман төҙөлөп бөтмәүенә әсенеп, уның юбилейға тиклем тамамланыу мөмкинлеге менән ҡыҙыҡһыныусыларға мэр бындай "һаҡаллы" объекттарҙың бөрөү генә булмауын һәм үҙе лә уларҙың тиҙерәк сафҡа индерелеүен теләүен белдерҙе.

Матбуғат конференцияһында Ратмир Рәфил улының ғаиләһенә һәм шәхси тормошона ҡағылышлы һорауҙар ҙа яңғыраны. Мәҫәлән, Копенгагенда уҡыған осоронон фәһемле мәле тип ул бер осрашыуҙа ҡала мэры булып эшләп киткән биш кешенең бер өҫтәл артында ултырыуы һәм үҙҙәренең эшмәкәрлеге ваҡытында тормошҡа ашыра башлаған стратегияһы менән таныштырыуы, үҙ артынан килгән мэрға тапшырыуы тураһындағы сығышын билдәләне. "Мин дә үҙемдән алда мэр булып эшләгән Павел Качкаев, Ирек Ялалов, Сергей Грековтар менән осраштым, уларҙың стратегияһын өйрәнәм, уларҙы дауам итергә кәрәк", - тип белдерҙе һәм бөгөн Рәсәй кимәлендә юғары вазифа биләгән ошо шәхестәр аша ҡалаға инвестициялар йәлеп итеү зарурлығын билдәләне.

"Ниндәй ҡалала йәшәргә теләр инегеҙ һәм ул ҡала ниндәй булырға тейеш?" - тигән һорауға Ратмир Мәүлиев һис икеләнеүһеҙ Өфөнө атаны һәм уның төрлө категория граждандар өсөн уңайлы ҡала булырға тейешлеген һыҙыҡ өҫтөнә алды.

Ике сәғәт дауам иткән матбуғат конференцияһында ниндәй генә һорауҙар яңғырауға ҡарамаҫтан, ҡала мэры уларға тулы яуап бирергә тырышты, бер һүҙ менән әйткәндә, ура-тып-суратып ваҡыт уҙғарманы. "Әгәр ниндәйҙер һорау буйынса, мәҫәлән, аныҡ объекттың тапшырылыу ваҡыты, ишетергә теләп тә ишетмәгәнһегеҙ икән, аптырамағыҙ - ялған һәм буш вәғәҙәләр бирергә яратмайым", - тип белдерҙе Ратмир Рәфил улы осрашыу һуңында. Шулай уҡ ул киң мәғлүмәт саралары журналистары менән айырым осрашып әңгәмәләшергә лә әҙер булыуын һыҙыҡ өҫтөнә алды.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

*...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ*

# ӘКИӘТИ ҠАЛА



**Башҡортостандың баш ҡалаһында ағастан скульптуралар эшләү буйынса беренсе асыҡ конкурс тамамлана. Уның башланғысында ҡала хакимиәте башлығы Ратмир Мәүлиев тора һәм ул ошо көндәрҙә эш барышы менән танышты.**

- Һис шикһеҙ, эштәр бик матур. Уларҙың һәр ҡайһыһында тәрән мәғәнә ята. Скульптураларҙың форматы төрлө, иң ҡыҙығы - уларҙы эшләү бик ҡатмарлы. Был онотолған сәнғәт төрө. Шуға күрә бурысыбыҙ - ҡырҡып ташланған ҡарт ағастарҙы ташламаҫҡа, ә улар менән ҡулланырға өйрәнергә кәрәк. Беҙ был материалға икенсе ғүмер бирергә тейеш, - тип билдәләне Ратмир Рәфил улы.

Конкурста 13 кеше - профессионалдар ҙа, һәүәҫкәрҙәр ҙә ҡатнаша. Улар үҙҙәренең эшендә Һыу инәһе, Арыҫлан менән бәләкәй Урал батыр, Һомай ("Урал батыр"), Зөһрә ҡыҙ ("Алдар менән Зөһрә"), Шүрәле, Азамат, Зәлиә һәм сихырсы ("Ҡаҙ тәпәйе") кеүек башҡорт эпостары, әкиәттәре һәм легендалары геройҙарына мөрәжәғәт итә. Шулай уҡ ҡатнашыусылар ағастан тутыйғош Кешаны, тау бөркөтө, урмандағы айыу балалары, һыуһар, балыҡ тотоусы малай, "өс шөрәп" һәм Ильф менән Петровтың "12 ултырғыс" әҫәре буйынса скульптуралар эшләгән.

Оҫталарҙың эше тиҙҙән ҡаланың йәмғиәт урындарын биҙәйәсәк. Уларҙы "Өфө муйынсағы" маршрутына урынлаштырыу планлаштырыла. Конкурсҡа йомғаҡ 12 июндә яһаласаҡ һәм еңеүселәр бүләкләнәсәк. Килһе йылдарҙа ла был бәйге дауам итәсәк һәм ул тағы ла киңерәк ҡолас алыр тип күҙаллана.

*ҠАЛА ХАКИМИӘТЕНДӘ*

# МӘШӘҠӘТТӘРҘЕҢ... оҫо-ҡырыйы юҡ



**Йәш килендең йортта оҙаҡҡа ҡалыу ниәте менән төшөүен борон уның туйҙан һуң үҙе артынан килтергән әйберҙәрен элеп, урынлаштырып сығыуына ҡарап белгәндәр. Әгәр ул һандығындағы ҡаралтыны бушатып, ҡорғандарҙы алмаштырып, һәр ергә үҙенең мал-мөлкәтен урынлаштыра икән - тимәк, ул ысынлап донъя көтөргә, төшкән ергә таш булып батырға уйлай. Әгәр киреһенсә икән, тимәк, ул ҡәйнә-ҡайны йортонда йәшәргә бик илтифат итмәй.**

Яңы ҡала хакимиәте башлығының ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә хакимиәттә кадрҙар мәсьәләһен үҙенсә хәл итеп, үҙ командаһын туплауы ла ошо хәҡиҡәтте раҫлағандай: әгәр тағы ла юғарыраҡҡа үрләтмәһәләр, оҙаҡҡа килгән был кеше, сөнки сираттағы оператив кәңәшмәлә тағы ла кадрҙар алмашыныуы белдерелде, тағы бер урынбаҫар итеп Дамир Ғәлиуллин тәғәйенләнде. Ул иҡтисад өлкәһен контролдә тотасаҡ.

Шулай уҡ Ратмир Мәүлиев Өфө делегацияһының Ижау ҡалаһында Волга буйы ҡалалары ассоциацияһы ағзалары йыйылышында ҡатнашыуы йомғаҡтары менән дә таныштырҙы. Унда тәбәк-ара һәҙәмтәле хеҙмәттәшлек, тәжрибә, иң яҡшы практикалар менән уртаҡлашыу мөмкин була, торлаҡ-коммуналь хужалыҡтың, иҡтисадтың көнүҙәк мәсьәләләрен ургаға һалып һөйләшеү ойоштоorola, муниципаль идаралыҡты камиллаштырыу буйынса тәҡдимдәр әйтелә. "Беҙ мәнфәғәттәр низағын булдырмау буйынса коррупцияға ҡаршы эшмәкәрлекте цифрлы трансформациялауға бәйле проект тәҡдим иттек. Кадрҙар хеҙмәтенең ҡалала иң цифрлашҡан бүлексәһе булыуы ҡыуанҙыра", - ти Ратмир Рәфил улы.

Йәй - каникулдар һәм ялдар мәле. Ике йыл үҙкурсаланыуҙа ултырып ялҡҡан халыҡ тәбиғәткә, дүрт стена араһын ҡалдырып, ҡайҙалыр йөрөп, ер-һыу гиҙеп килергә ашҡына. Ер-һыу тигәндән, шәмбе ойошторолған "Ағиҙел - 2022" йөҙөү саралары фестивале йәйге туристик миҙгелде асыуға старт бирҙе тиергә лә мөмкин. Унда ҡатнашыусылар Дуҫлыҡ монументынан алып Затондағы "Аҡ яр" пляжына тиклем ете саҡрымлыҡ маршрутты үтте. Шулай уҡ йылға училищеһы курсанттары, 15 судно пароды күрһәтелде, Башҡортостандағы беренсе туристик-мәғлүмәт үҙәге асылды.

Оператив кәңәшмәнең көн тәртибендә быйыл тормошҡа ашырыласаҡ "Башҡортостан ихаталары" республика программаһы буйынса ла сығыш булды. Уға ярашлы, баш ҡалала 54 күп фатирлы йортто берләштергән 15 ихата төҙөкләндереләсәк. Был маҡсатта 300 миллион һумдан ашыу аҡса ҡаралған. Уның 283 миллион һумы республика бюджетынан бүленһә, 16 миллиондан ашыуы ҡала бюджетынан, 3 миллион самаһы торлаҡ биналары милекселәре өлөшө.

Кәңәшмәлә шулай уҡ баш ҡала парктарын реконструкциялау мәсьәләләре, сүп-сар йыйыу өсөн урынлаштырылған тимер контейнерҙарҙы пластик евроконтейнерҙар менән алмаштырыу мәсьәләләре ҡаралды, 1000 ведосипедсы көнөнә йомғаҡ яһалды.

# ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

## Псориаз

❖ Был ауырыуҙан топинамбур һабаҡтарынан яһалған ванна ярҙам итә. Дауаланыу өсөн 2 килограмм топинамбур һабағына 6 литр һыу ҡойоп 5 минут ҡайнатырға, шунан төнәтергә. Кискеһен ошо төнәтмәне ваннаға ҡойоп, шунда инергә. Бөтәһе 5 тапҡыр эшләргә. Ауырыу эҙемтәһендә сыҡҡан сөйәлдәр, ҡутырҙар бөтөп ҡала.

❖ Үрҙә килтерелгәнсә, топинамбур ярҙамында дауаланғандан һуң, сөйәл үләнен ит турағыстан үткәрергә һәм үҫемлек майы ҡушырға. Был дауаны 2 аҙна дауамында көнөнә ярты сәғәт ғына балғалаҡ эсергә. Тик уны ашҡаҙан-эсәк ауырыуҙары булғандар һаҡ ҡулланырға тейеш.

❖ Сөйәл үләне менән дауаланғандан һуң, 1 ҡалаҡ бал, 1 йомортҡа ағы, 400 грамм солидол, балалар өсөн кремды бергә ҡушып, яҡшы болғатырға һәм псориаз сыҡҡан урындарға һөртергә. Халыҡ дауаһының был исулдары нервы ҡаҡшауға бәйле булған псориазға ҡаршы һөҙөмтәле. Шулай уҡ сәй урынына меңъяпраҡ, баҫыу ҡыҡбыуыны һәм топинамбур төнәтмәһе эсергә мөмкин.

## Ҡарабойҙай

❖ Ашҡаҙан аҫты биҙе һәм бауырҙың эшмәкәрлеген яҡшыртыу өсөн өймәләм 1 ҡалаҡ ҡарабойҙай онона 1 стакан сей ҡатыҡ йәки кефир ҡойорға. Бер балғалаҡ сорбит ҡушырға мөмкин. Яҡшылап болғатып, төнгәләккә ҡалдырырға кәрәк. Иртәнсәк ас ҡарынға 1 стакан һыу эсергә, шунан 15 минут үткәс кистән әҙерләгән дауаны. Был рәүешле 1 ай дауамында көн дә дауалаңғас, 1 айға туҡтап торорға. Ашҡаҙан аҫты биҙе һәм бауыр ғына түгел, бөтә ашҡаҙан-эсәк юлының торошо яҡшырыр, һәр хәлдә зыяны юҡ. Әйткәндәй, ҡарабойҙай онон үҙегеҙ миксер йәки ҡәһүә тарткыс ярҙамында тартып ҡулланырға кәрәк. Бының өсөн тәүҙә ҡарабойҙай ярмаһын яҡшылап йыуырға, шунан табала киптерергә, шунан онтаҡларға. Ондо быяла һауытта һаҡлау яҡшыраҡ. 1 ҡалаҡ ҡарабойҙай онон ярты стакан кефирға һалып эсеү ҡан баҫымын да түбәнәйтергә ярҙам итә.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

ЙОЛАНДАН ЙҮН ТАП!



# АҒАС ҺАУЫТ-ҺАБА

Беҙҙең көнгә тиклем килеп еткән боронғо һауыт-һаба араһында семәрләнгәндәре лә байтаҡ. Семәрле тәпәндәр һәм ағас биҙрәләр күп кенә музейҙарҙың башҡорт коллекцияларында һаҡлана: М.В. Нестеров исемендәге художестволы музейҙа, Башҡортостандың Милли музейында, Санкт-Петербург ҡалаһындағы Рәсәй этнография музейында, Будапешт ҡалаһындағы Венгрия этнография музейында һ.б. Бындай һауыт-һаба башҡорт ауылдарында ла һаҡланып ҡалған, уларҙың бер өлөшө мәктәп һәм клубтарҙағы тыуған яҡты өйрәнеү музейҙарына эләккән.

Билдәле бер төр әйберҙәр һырланған: ҡунаҡтарға ҡымыҙ һәм һитә балы тәҡдим итә торған тәпәндәр, бал батмандары, ҡымыҙ бешеү өсөн көбөләр, бейә һауғыстар һәм ҡайһы бер ваҡ-төйәк һауыттар.



*Семәрле ҡымыҙ тәпәне һәм ижауы. Бөрйән районы Кейекбай ауылы, XX быуаттың 60-сы йылдары. С.Ф. Миржанова материалдарынан*

Семәрле һауыттар эшләнгән төбәк Башҡортостандың баш ҡалаһы Өфө урынлашҡан параллелдән саҡ ҡына көньяҡтараҡ ятҡан. Ул көньяҡ-көнсығыштағы тау-урман һәм ялан райондарын, Ағиҙел йылғаһы буйын һәм ҡайһы бер көньяҡ-көнбайыш райондарын үҙ эсенә алған. Биҙәкле ҡымыҙ көбөләре Ырымбур һәм Силәбе башҡорттарына ла барып еткән. Әммә бындай һауыттар, айырыуса ундай әйберҙәр эшләнмәгән төбәктәрҙә, үтә ҡиммәт торған һәм бай ғаиләләрҙә генә булған. Хатта Башҡортостан биләмәһендә лә Ашҡаҙар, Өршәк һәм Дим буйында (көньяҡ-көнбайыш районлар) йүкә булмағанлыҡтан, семәрле һауыт-һаба һирәк осраған, уны Ағиҙел аръяғынан алып килгәндәр. Тик көньяҡ-көнсығышта һәм көньяҡта ғына ул көнкүрешкә хас әйбергә әүерелеүҙән тыш, ҡунаҡ ҡаршылауҙа һәм туй йолаларын үтәүҙә ныҡлы урын алған. Тәпәшәк һәм ҡапҡасы тығыҙ кейҙерелеп ябылған һауытта - көрәгәлә йәш кәләштең туғандары ҡалым артынан килгәндә һитә балы йәки әсе бал алып килгәндәр. Уның ҡапҡасын асырҙан алда кейәүҙең ата-әсәһе көрәгәләге эсемлек өсөн һарыҡ йәки тәкә бүләк итеүҙәрен әйткәндәр. Ҡайһы бер осраҡтарҙа кейәү яғы иҫерткес эсемлекле көрәгәне сигеүле таҫтамал менән ҡаплап, уның менән бергә туйға йыуаса ла алып килгән. Туйҙағы күңел асыуҙарҙа "көрәгә бейетеү" тигән ҡатын-ҡыҙҙарҙың шаян бейеүе һауыттағы эсемлекте эсеп бөткәс башҡарылған. Шуға ауыл халҡының туйға семәрле көрәгә әҙерләп ҡуйырға ынтылышын аңларға мөмкин.



*Ҡымыҙ тәпәне. Бөрйән районы Байназар ауылы. РЭМ фондынан. XX быуат башы*

Этнография материалдарына ҡарап фекер йөрөткәндә, XIX быуат аҙағына урындағы йолаларға таянған, сағыу милли үҙенсәлектәрҙе сағылдырған һәм юғары сәнғәт өлгөһө булырҙай семәрле ҡымыҙ һауыттары эшләү буйынса үҙенә күрә айырым үҙәктәр барлыҡҡа килә. XIX быуаттың икенсе яртыһында бының менән Ағиҙел йылғаһының уң яҡ ҡушылдыҡтарындағы тау тарлауыҡтарында һәм үҙәндәрҙә урынлашҡан, шулай уҡ Оло Эйек, Ҡаҫмарт, Йылайыр йылғалары һәм Һаҡмарҙың башҡа ҡушылдыҡтары буйындағы тиҫтәләгән башҡорт ауылдарында кәсеп иткәндәр.

**Светлана ШИТОВА.**
**"Башҡорттарҙа ағас семәрләү һәм биҙәк төшөрөү" китабынан.**

АФАРИН!

# БОРОН-БОРОН...



**(Башы 1-се биттә).**

Конкурс баш ҡаланың әүҙем, татыу һәм әртислек һәләте менән алдырған күркәм башҡорт ғаиләләре менән дә танышыу йәһәтенән әһәмиәтле. Сөнки унда "Ғаилә менән сәхнәләштереү" номинацияһы булдырылған. Быйыл унда баш ҡаланың 18-се балалар баҡсаһынан Ишдәүләтовтар - өсөнсө, 92-се балалар баҡсаһынан Ҡыуандыҡовтар - икенсе, М. Исҡужин исемендәге 136-сы Башҡорт лицейынан Нәбиуллиндар беренсе урын яуланы. Ә гран-при 308-се Башҡорт балалар баҡсаһынан Сәғитовтар ғаиләһенә тапшырылды. Улар "Йомро икмәк" урыҫ халыҡ әкиәтен сәхнәләштергән. Сәғитовтарҙың сығышы баһалама ағзаларына ғына түгел, тамаша залына йыйылған һәр кемдең күңеленә хуш килде. Унда йомро икмәкте ашайым тип, әсәйҙәрен ҡосоп алған "хәйләкәр төлкө"нөң иркәлеге, был ғаиләлә үҫеп килгән береһенән-береһе һылыу дүрт ҡыҙҙың наҙлы, күңел йылыһы бөркөп торған мөхиттә тәрбиәләнеүе сағылды.

"Әкиәтте сәхнәләштереү" номинацияһында М. Кәрим исемендәге 158-се Башҡорт гимназияһының фольклор коллективы абсолют еңеүсе тип танылды. Улар "Етем төлкө" башҡорт халыҡ әкиәтен бик оҫта уйнаны. "Әкиәтте яңғыҙ башҡарыусылар" номинацияһында 18-се Башҡорт балалар баҡсаһынан Алмас Вәлиев менән 42-се лицей уҡыусыһы Марат Яубаҫаровҡа оҫталыҡтары буйынса етеүсе булманы. Улар әкиәтте ысынлап та ойотоп һөйләй, телдәре-телгә йоҡмай, ихласлыҡтары менән дә арбай. "Бөгөн мин конкурста ҡатнашырға килдем, миңә 4 йәш. Башта "Һарыбай" әкиәтен һөйләнем, шунан "Ялҡау кәзә"не. Уны миңә тәрбиәсем Зөбәржәт Солтанова апай өйрәтте. Әкиәтте ятлауы ауыр булманы, оттом да алдым. Ә өйҙә йоҡлар алдынан әкиәтте миңә атайым һөйләй", - ти тел биҫтәһе Алмас Вәлиев. Уның кеүек башҡортса тәтелдәп торған, тыуған мөхитендә тәрбиә алып, әкиәттәр һәм йолалар аша халҡының рухи ҡиммәттәрен күңеленә һеңдергән балаһағаны күҙәтеп, "Һаумы, һаумы, әкиәт!" конкурсының ойоштороусыларына мең рәхмәтле булып, һоҡланып ҡайтты һәр кем. Был ярышҡа нигеҙ һалыусыларҙың береһе, БР Мәғариф министарлығының Милли мәғариф бүлеге етәксеһе Розалия Сафиуллина, уны йыл да ойоштороусы баш ҡаланың Мәғариф идаралығы хеҙмәткәрҙәре үҙ тырышлығының емешен татып ҡыуанғандыр. Ә Өфө ҡала хакимиәте башлығы урынбаҫары Гөлләриә Ялсыҡаева балаларҙа башҡорт теленә, башҡорт халҡының ауыҙ-тел ижадына ҡыҙыҡһыныу уятҡан, һөйөү тәрбиәләгән атай-әсәйҙәргә, тәрбиәселәргә һәм уҡытыусыларға оло рәхмәттәрен еткерҙе.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**"Борон-борон заманда ойошторола башлаған" тип һөйләргә яҙһын был күркәм күңел байрамы, һәләттеләр ярышы "Һаумы, һаумы, әкиәт!" тураһында киләсәк быуындарға. Оҙаҡ йылдар үткәрелһә лә, һис үҙенең һөйкөмлөгөн юғалтмаҫ һәм ихласлығын һаҡлап ҡалыр, олоһона ла, кесеһенә лә мөғжизә бүләк итер сара булыр ул.**

**Сәриә ҒАРИПОВА.**

БЕЛЕМ УСАҒЫ

# ЗАМАНҒА ЯРАШЛЫМЫ?



**ҺОРАУ: "Мәктәпте тамамлаусылар киләсәк һөнәрен һайлау алдында тора. Уларҙың ошо юҫыҡтағы ниәтен, маҡсатын, хыялын тормошҡа ашырыр өсөн һеҙҙең уҡыу йортоноң заманға ярашлы ниндәй тәҡдиме бар?"**

***Сәйфетдин ҠУНЫСБАЕВ, Өфө сервис һәм иҫәпләү технологиялары колледжы директоры:*** Беҙ, ниндәй генә заман булыуға ҡарамаҫтан тотороҡлоҡто һаҡлап киләбеҙ һәм республикала ғына түгел, Рәсәйҙә лә үҙ урыныбыҙ бар, танылыу яулағанбыҙ. Рекламаға мохтаж түгелбеҙ, сөнки 2021-2022 уҡыу йылында 310 бюджет урынына 7,5 мең кеше дәғүә итте. Әлеге ваҡытта 10 һөнәр буйынса белем бирәбеҙ, үткән уҡыу йылында ике яңы: финанстар һәм логистика специальностары буйынса уҡыта башланыҡ. Өс уҡыу-лаборатория корпусыбыҙ бар.

Ситтән килеп уҡыусылар өсөн ике ятағыбыҙ бар, уларҙа ял, уҡыу өсөн уңайлы шарттар булдырылған. Студенттар бушлай вай-фай менән ҡуллана. Былтыр оҫтаханалар астыҡ, был йүнәлештә эшмәкәрлекте дауам итәбеҙ. Төрлө конкурс-ярыштарҙа әүҙем ҡатнашабыҙ һәм призлы урындар яулайбыҙ. Бының менән нимә әйтергә теләйем: студенттарыбыҙ бик шәптәр һәм уңышлылар.

Юғары уҡыу йорттары менән тығыҙ хеҙмәттәшлек итәбеҙ. Тәүгеләрҙән булып Башҡорт дәүләт университеты менән университет комплексы асҡайныҡ, хәҙер иһә ӨДАТУ, ӨДНТУ, БДАУ, М. Аҡмулла исемендәге БДПУ менән бәйләнештәбеҙ, башҡа уҡыу йорттарының Өфөләге филиалдары ла беҙҙең студенттарҙы үҙҙәренә ҙур теләк менән ылыҡтыра. Әммә үҙебеҙҙе юғары уҡыу йортона студенттар әҙерләү курсы тип баһаламайбыҙ. Беҙ бары тик яҡшы һәм сифатлы эшләйбеҙ, сифатлы белем бирәбеҙ һәм сифатлы студенттар сығарабыҙ, һәр студентҡа эшсе профессияларының кәрәкле һәм әһәмиәтле икәнлеген еткерәбеҙ. Был, минеңсә - иң мөһиме. Шуға ла уларҙың һәр ҡайһыһы, 100 процент менән тиерлек, эш таба. Йәғни беҙ иҡтисад өсөн эшләйбеҙ, хеҙмәткә әҙер белгестәр әҙерләйбеҙ. Студенттар өсөнсө курстан производствола практика үтә башлай һәм шунда уҡ эш урындарында белгес булараҡ ныҒына. 4-се курста ҡайһы берҙәре дәрестәргә ирекле йөрөүгә рөхсәт ала йәки ситтән тороп уҡыуға күсә. Көндөҙгө бүлектә уҡыусылар ҙа күп, әммә беҙ производствоға, студенттарыбыҙҙың үҙ урынын табыуына һәм уҡыуын тамамлау менән үк аҡса эшләй башлауына йүнәлеш тотабыҙ.

***Светлана ШАҺАПОВА, Башҡортостан копператив техникумы директоры:*** Сығарылыш синыфы уҡыусыларын алда сағыу һәм бай осор - студент тормошо көтә. Был йәһәттән, Башҡортостан кооператив техникумы һеҙгә үҙенең ишектәрен генә түгел, һәр яҡлап үҫешеү, нимәлер уйлап табыу, ҡыҙыҡлы асыштар яһау һәм алдығыҙға ҡуйған маҡсаттарға өлгәшеү өсөн яңы киң мөмкинлектәр ҙә аса. Былар ябай ялтырауыҡлы һүҙҙәр генә түгел, сөнки үҙенең эшмәкәрлеге осоронда уҡыу йорто һәр һүҙен эше менән раҫлай. Беҙ студенттарға заман талаптарына яуап биргән һөнәрҙәр тәҡдим итәбеҙ. Эшҡыуарлыҡ һәм башҡа компетенцияларға "Коммерция", "Иҡтисад һәм бухгалтер иҫәбе", "Банк эше", "Хоҡуҡ һәм социаль тәьминәтте ойоштороу", "Мәғлүмәт системалары һәм программалау", "Ер-мөлкәт мөнәсәбәттәре" специальностары аша эйә булырға мөмкин.

Һайлаған һөнәр төрө буйынса студенттар практиканы һәм стажировканы "Росбанк" асыҡ акционерҙар йәмғиәте, Башҡортостан Республикаһы буйынса Эске эштәр министрлығы, мировой судтар, район судтары, Дәүләт пенсия фонды, дәүләттеке булмаған пенсия фонды, "Минең документтарым" күп функциялы үҙәктә үтә. Шулай уҡ "Социум" халыҡты социаль хеҙмәтләндереү үҙәге автономлы коммерцияға ҡарамаған ойошма һ.б. беҙҙең кадрҙар партнеры булып тора. Кадрҙар партнерлығы сиктәрендә коммерция банктарында, юридик ойошмаларҙа, дәүләт һәм дәүләттеке булмаған предприятиеларҙа күсмә дәрестәр ойошторола. Башҡа техникум-колледждар кеүек үк, юғары уҡыу йорттары менән тығыҙ бәйләнештә эшләйбеҙ, йылдар буйына һыналған хеҙмәттәшлек булдырылған. Һөҙөмтәлә Башҡортостан кооператив техникумын тамамлаусылар белем алыуҙы юғары уҡыу йорттарында ҡыҫҡартылған программа буйынса дауам итә.

**Земфира ХӘБИРОВА яҙып алды.**

"Киске Өфө" гәзитенең махсус бите

17

Ғаиләм-ҡәлғәм

4-10 ИЮНЬ (һөтай) 2022 йыл
№22 (1012)

ФӘҺЕМЛЕ РИҮӘЙӘТ



# АЙЫРЫЛЫШЫУ ХАҠЫ

Бер саҡ Мөхәббәт ашыға-ашыға китеп барыусы Айырылышыуҙы осратҡан һәм уның бер ғаиләнең яҙмышын хәл итергә юлланыуын белгәс:

- Ашыҡмай тор, әйҙә, мин бер тапҡыр ғына ул ир менән ҡатындың йөрәктәренә юл ярып ҡарайым, ә һуңынан һин улар янына күпме теләһәң, шунса барырһың. Күрәйек - айыра алырһыңмы икән уларҙы? - тип тәҡдим иткән.

Айырылышыу ризалашҡан. Мөхәббәт йәш пар янына килеп, уларға һаҡ ҡына ҡағылған да, күҙҙәренә баҡҡас, уларҙа осҡон барлыҡҡа килеүен күргән. Шунан инде Айырылышыуға:

- Йә, хәҙер инде һинең сират! - тигән.

Тегеһе иһә:

- Юҡ, әле уларҙың йөрәге ***һөйөү*** менән тулған. Шуға ла бер нәмә лә эшләй алмаясаҡмын. Мин һуңғараҡ килермен, - тигән.

Ваҡыт үткән. Айырылышыу был парҙы тағы иҫенә төшөргән. Йәш әсәнең сабыйын ҡыҫып һөйөүенә шаһит булған ул. Ире лә улар янында өйөрөлә икән. Айырылышыу, мөхәббәттәре үткәндер, моғайын, тигән өмөт менән өй түренә уҙған. Әммә ир менән ҡатындың күҙҙәренә баҡҡас, ***рәхмәтле булыу*** тойғоһон күргән һәм кире боролорға мәжбүр булған:

- Мин бында һуңғараҡ килермен, - тигән.

Ваҡыт үткән. Айырылышыу йәнә яҡынлаған быларға. Хәҙер инде өйҙә балалар сырсыу килгән. Йорт хужаһы эштән арып ҡайтҡан, хужабикә балаларын тынысландырған. Айырылышыу хәҙер ысынлап та уларҙы айыра алырына ышанған, ***мөхәббәт һәм рәхмәтле булыу*** тойғолары үткәндер, тип уйлаған. Әммә уларҙың күҙҙәренә бағып, ***ихтирам*** һәм бер-берендә ***аңлау*** тойғоһон күргән.

- Мин һуңғараҡ килермен инде, - тигән Айырылышу.

Ваҡыт үткән. Йортҡа йәнә Айырылышыу килгән. Инде ғаиләләге балалар үҫкән. Айырылышыу йәнә уларҙың күҙҙәренә баҡҡан һәм өмөтһеҙлеккә бирелеп, ауыр тын алып ҡуйған. Ир менән ҡатындың ҡараштарында ***ышаныу*** тойғоһон күргән ул.

- Мин һуңғараҡ килермен, - тигән Айырылышыу һәм йорттан сығып киткән.

Күпмелер ваҡыт үткәс, ул йәнә ишек шаҡыған. Хәҙер инде уларҙың ейәндәре йүгереп йөрөүен күргән. Ҡатын кеше олоғайып киткән. Мейес ҡаршыһында уйланып ултырған сағы булған. Ниһайәт, минең сәғәтем һуҡты, тип ҡыуанған Айырылышыу. Ул ҡатындың күҙҙәренә бағырға теләгән, әммә шул мәлдә ҡатын кеше торған да өйҙән сыҡҡан. Айырылышыу уның артынан киткән. Тиҙҙән ҡарсыҡ зыяратҡа барып еткән һәм иренең ҡәбере янына яҡынлаған.

- Һуңлағанмын, ахыры, - тип уйлаған Айырылышыу. - Ваҡыт минең өсөн үҙ эшен башҡарып та ҡуйған.

Һәм Айырылышыу ҡарсыҡтың йәшле күҙҙәренә төбәлгән. Унда ул ***мөхәббәт, рәхмәтле булыу, ихтирам, бер-береңде аңлау, ышаныс хаҡындағы хәтерҙе*** күргән. Эйе, ғаиләнең нигеҙе ошо тойғоларҙан һәм төшөнсәләрҙән ҡорола икән, миңә унда урын юҡ, тип һығымта яһаған Айырылышыу.

ҒАИЛӘ МӘКТӘБЕ

# ЖИРАФҠА ЯҠШЫРАҠ КҮРЕНӘМЕ?



## Ә шулай ҙа атай-әсәй кәңәше мотлаҡ!

**Гәзитебеҙҙең быйылғы 5-се һанында "Ғаилә ҡороп алдынан... атай-әсәй кәңәшен тыңла, йәш кеше!" тип аталған бик фәһемле бер мәҡәлә баҫылып сыҡҡайны. Шамил Батыршиндың мәҡәләлә сағылдырған фекерҙәрен оло кинәнес менән, йайлап ултырып уҡыным. Бәлки, кемдәргәлер сәйер ҙә тойолор, әммә ошо мәҡәләне уҡығас, мәшһүр артист Владимир Высоцкийҙың бер йыры иҫемә килеп төштө: "В желтой жаркой Африке, в центральной ее части, как-то вдруг вне графика случилося несчастье. Слон сказал не разобрав: "Видно быть потопу!.." Вообщем так: один Жираф влюбился в Антилопу… Тут поднялся галдеж и лай, и только старый Попугай громко крикнул из ветвей: "Жираф - большой, ему - видней!.."**

Авторҙың ғаилә төҙөү темаһына ҡағылышлы был мәҡәләһе минең һымаҡ олпат йәшкә еткән бик күптәрҙе битараф ҡалдырмағандыр. Ә бит, ысынлап та, борон-борондан беҙҙең ата-бабаларыбыҙ улдарына килен әйттереү, ҡыҙҙарын кейәүгә биреү мәсьәләһенә ифрат етди ҡараған. Килен буласаҡ ҡыҙҙың (йәки буласаҡ кейәүҙең) ата-әсәләрен, башҡа туған-тыумасаларын белешеп бөтмәй тороп, балаларына тормош ҡорорға ризалыҡ бирергә ашыҡмаған беҙҙең ата-бабаларыбыҙ. Ислам дине йолаһы буйынса, никахҡа инеү өсөн ҡыҙҙың ризалығынан тыш, уның атаһының рөхсәте булыуы мотлаҡ. Ә инде кейәү егеттең был өлкәлә өҫтөнлөгө бар. Никах мәсьәләһен ул үҙе хәл итеүгә хоҡуҡлы. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, борон йәш егеттәр ҙә ата-әсәнең кәңәшен тоторға тырышҡан... Ғаилә тарҡалыу тигән нәмәне әүәле белмәгәндәр ҙә тиерлек. Айырым осраҡтарҙа динебеҙ тарафынан рөхсәт ителгән булыуына ҡарамаҫтан, ир-ҡатын айырылышыуы хәҙерге кеүек ғәҙәти хәлгә әүерелмәгән.

Ә бөгөнгө көндә ни күрәбеҙ? Никах тарҡалыу күрһәткесе - 75 процент! Ҡот осҡос һан бит был! Әлеге мәҡәлә авторы һымаҡ уҡ, минең дә ныҡлы инаныуым - ошо бәләлә никах төҙөргә ниәтләгән йәштәрҙең ата-әсә менән кәңәшләшеү тигән нәмәне бөтөнләйгә инҡар итеүе сәбәпсе. Яҡындарының буласаҡ ҡоҙалары хаҡында "Уларҙың ғаиләһендә шундай-шундай кешеләр йәшәй", йә "Әсәһе яньялсы", йә "Атаһы, ағалары эскесе, үҙе лә төшөргөләй тиҙәр..." тигән һымағыраҡ иҫкәртеүҙәрен буласаҡ ир йә кәләш бөтөнләйгә битараф. Әлеге йырҙың дауамына иғтибар итәйек әле: "...Ну что же, что рога у ней, - кричал Жираф любовно, - ныне в нашей фауне равны все поголовно! И если вся моя родня будет ей не рада: не пеняйте на меня - я уйду из стада!" Бына шуға оҡшаш шарттар ҡуйып, ата-әсәһенең ауыҙын тиҙ генә "яба һалып", үҙҙәренә-үҙҙәре ғәҙелһеҙлек ҡылыуын белмәй бәғзе йәштәр. Меҫкен ата-әсә хәҙер, ысынлап та, бер ни ҙә эшләй алмай. "...В желтой жаркой Африке не видать идиллий: Льют Жираф с Жирафихой слезы крокодильи. Только горю не помочь - нет теперь закона: у Жирафа вышла дочь замуж за Бизона!..."

Бына шулай, нәҡ әлеге йырҙа йырланған һымаҡ, улы Антилопаға өйләнеп, ҡыҙы Бизонға кейәүгә сығып кит-кән жираф ғаиләһендәй, туғандарының һүҙенә бөтөнләйгә ҡолаҡ һалмай, тәү уянған "ялҡынлы хистәр" мәлендә ашығыс ҡарар ҡабул итеп тормош ҡора йәштәр. Әммә күп тә тормай, "баллы ай" үтеп китеү менән, айырылышыу яғын ҡайыра башлайҙар шул улар. Сөнки ҡатын йә ир, йә иһә икеһе лә етди ғаилә ҡороп йәшәргә бөтөнләйгә әҙер түгел булып сыға. Тик һуңынан ғына килә үкенеүҙәр. Айырыуса, әлеге меҫкен ата-әсәһенең: "Тор инде, балам, шул кейәү (килен) менән, уртаҡ сабыйығыҙ ҙа бар бит. Һис ғәйепһеҙ баланы нисек йәлләмәй етем итмәк булаһығыҙ?" - тигән һымағыраҡ ялыныуҙары башлана.

**(Дауамы 10-сы биттә).**

БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР

# ПРОКУРОР ТӘРБИӘҺЕ



**Благовещен район-ара прокуратураһында эшләп йөрөгәнемдә булған бер ғибрәтле хәл иҫкә төшә.**

Элегерәк прокуратура, милиция хеҙмәткәрҙәренә балиғ булмаған хоҡуҡ боҙоусыларҙы тәрбиәгә беркетә торғайнылар. Беркетеп кенә ҡалмай, квартал һайын улар хаҡында отчет талап итәләр ине. Миңә лә бер малайҙы беркеттеләр. Уның ата-әсәһе ярайһы уҡ ҙур урында эшләп, белемдәре, вазифалары юғары булыуға ҡарамаҫтан, малайҙы, ғәйепле булһа ла, гел генә яҡлап тороп, боҙоп, аҙҙырып бөткәйнеләр. Шуға ла малайҙың ата-әсәһе менән һөйләшеү, уларҙы өгөтләү файҙаһыҙ ине.

Бер ваҡыт әлеге малай район үҙәгендә урынлашҡан бер ойошмаға ҙур ғына зыян килтерҙе. Милиция хеҙмәткәрҙәре уның ғәйебен тулыһынса иҫбат итте. Малайҙың ата-әсәһе был юлы ла, ғәҙәт буйынса, балиғ булмағандар комиссияһына саҡыртып һөйләшерҙәр ҙә, шуның менән ҡотолорбоҙ, тип уйлағайны, күрәһең. Килеп сыҡманы. Ул замандағы закон буйынса, балиғ булмағандарҙың ҡылған ҡылыҡтарынан күрелгән зыянды ата-әсә ҡапларға тейеш ине. Мин прокурор исеменән дәүләт ойошмаһы күргән матди зыянды ҡаплатыр өсөн судҡа мөрәжәғәт иттем. Бындай аҙымды берәү ҙә көтмәгәйне. Судҡа малайҙың әсәһе килде. Тәүҙә ул бик дорфа ғына һөйләшеп маташты, әммә прокурор дәғүәһенең шаярыу түгеллеген һәм ҙур ғына сумманан ҡолаҡ ҡағасағын аңлағандан һуң, ҡатын бөтә асыуын улына төшөрҙө. Быға тиклем гел генә һыуҙан ҡоро килеш ҡотолоп өйрәнгән малайға судта әсәһе алдында яуап бирергә тура килде.

Ҡатындың штраф суммаһын кәметеүҙе үтенеүен суд кире ҡаҡты һәм ғаиләгә балиғ булмаған тәрбиәһеҙ улдары арҡаһында дәүләт күргән зыянды тулыһынса ҡапларға тура килде. Ғаилә бюджетына килгән зыяндан ярһыған әсәһе малайҙы суд залында уҡ типкеләй башланы - түҙеп кенә тор. Милиция саҡыртып, көс-хәл менән тынысландырҙылар теге ҡатынды. Малайҙы тәрбиәләү эше, "өшкөрөү" өйҙә лә дауам иткәндер, тип уйлайым. Сөнки ошонан һуң малайыбыҙҙың өнө лә, тыны ла ишетелмәне. Унда ла, бында ла эш боҙоп, милиция хеҙмәткәрҙәренең күрһәткестәрен, отчетын боҙған малайҙан шулай ҡотолдоҡ. Бының өсөн милиция егеттәре миңә рәхмәт уҡыны.

Минең уйлауымса, малайҙың ҡылыҡтары улай тиҙ генә үҙгәрмәгәндер. Йәмғиәттәге дөйөм талаптарҙы, дәүләт закондарын һанға һуҡмай, уларҙы нисек теләй, шулай боҙоп өйрәнгәйне бит инде ул. Әммә тәртип боҙһа, язаның уны ҡыуып етәсәген аңлау һәм шул күрәсәк язанан ҡурҡыу тойғоһо уны тәртип боҙоуҙарҙан тыйып килде. Ошо факт ҡына ла ғәйеплеләрҙән штраф кеүек мәжбүри аҡса түләтеүҙең бик һөҙөмтәле алым икәнен күрһәтә. Закондарҙың төп функцияларының береһе - ғәйепле кешенең мотлаҡ аласаҡ язанан ҡурҡыу тойғоһо бит.

**Зәкирйән ӘМИНЕВ,**
**пенсиялағы прокурор.**

*✓ Талаптар шулай ине: алдашмаҫҡа, урлашмаҫҡа, татыу булырға. Бала-саға үпкәләшеп, сыйышып китәһең, ул һәр саҡ ярҙамға килде. "Һеҙ бер туғандар", тип аңлатып, ҡулды бирҙереп, килештереп ҡуя торғайны.*

# АРАЛБАЕВТАР

**Беҙҙең халыҡта борон-борондан "ир тәрбиәһе биреү" тигән төшөнсә йәшәп килә. Ир баланы ғаилә, ырыу, милләт өсөн яуаплы булырға өйрәтеү ҙур маҡсаттарҙың береһе ул. Был осраҡта атай һәм әсәйҙең, ҡартатай, өләсәй, ҡартәсәйҙең роле ниндәй? Тыуған ер ҡәҙерен белеү ҡайҙан килә? Ошо һорауҙар бөгөн дә көнүҙәк булып ҡала һәм беҙ уларҙы Баймаҡ районының Буранбай ауылынан Аралбаевтар ғаиләһе ағзаларына төбәнек. Әйткәндәй, Таңһылыу һәм Фәррәх Аралбаевтарҙың ғаиләһендә тыуып үҫкән биш улдың һәр береһе тормошта күптән үҙ урынын тапҡан һәм ижтимағи тормошта ла ҡайнап йәшәйҙәр. Иң мөһиме, улар бәхет, йәки оҙон аҡса эҙләп, ситкә сығып китмәгән, ә тыуған ергә тоғролоҡ һаҡлап, уның бәрәкәтен арттырып йәшәгән ир-уҙамандар. Беҙҙең алда ҡуйылған һорауҙарыбыҙға уларҙың фекерҙәрен белергә теләп, Фәррәх ағайҙың биш улын да бер ҡорға йыйҙыҡ. Исемләп таныштырабыҙ: Фәтих - мәғариф ветераны, хаҡлы ялда, Баймаҡ ҡалаһында йәшәй. Фәрит - урман хужалығы мастеры, Буранбай ауылында йәшәй. Фәттәх - мәғариф ветераны, хаҡлы ялда, Буранбай ауылында йәшәй. Фәйез - тәбиғәтте һәм хайуандарҙы һаҡлау буйынса Баймаҡ һәм Йылайыр райондарында әйҙәүсе белгес, Баймаҡ ҡалаһында йәшәй. Фәннүр - физкультура уҡытыусыһы, Буранбай ауылында йәшәй. Был ғаиләләге иң өлкән бала- Айһылыу апайҙары шулай уҡ уҡытыусы булған. Иғтибар иткәнһегеҙҙер, был ғаиләлә күптәр уҡытыусылыҡ һөнәрен һайлаған. Быға ғәжәп итергә түгел, беҙҙә борон-борондан мөғәллимлек иң ҙур дәрәжә һаналған бит.**

**▸ Һеҙ, Аралбаевтар, үҙегеҙҙең затырыуығыҙҙы белеп үҫтегеҙме? Буранбай ауылы менән һеҙҙе ниндәй хәтер ептәре бәйләй? Иң башта шуны асыҡлап китәйек әле.**

**Фәрит (ғаиләлә 2-се ул):** Атайыбыҙ Фәррәхтең төп сығышы Баймаҡ районы Таулыҡай ауылынан. Уның атаһы - Насип ҡартатай заманында коллективлаштырыуға риза булмайынса, Баймаҡҡа күсеп китә. Унда шахтала эшләй һәм үпкә ауырыуы менән ауырып киткәс, ҡайтып үләм, тип, кире Таулыҡайға ҡайта. Беҙҙең атайға өс йәш булғанда атаһы мәрхүм булып ҡала. Күп тә үтмәй, әсәһе лә вафат була. Мостафа тигән ағаһы ла бик иртә үлеп ҡала. Нәжип ағаһы Юлыҡҡа китеп, артелдә урман ҡырҡып йөрөй, һуғышҡа китеп хәбәрһеҙ ғәйеп була. Атайымды әле бер туғаны, әле икенсе туғаны ҡарай. Шунан балалар йортона ебәрәләр. Унда буласаҡ йырсы Рамаҙан Йәнбәков менән бергә тәрбиәләнәләр. "Һуғышып-көрмәкләшеп, уйнап үҫтек", тип һөйләй ине атайым. Мәктәпкә уҡырға барғас, ҡартатайҙың бер туған ҡарындашы, беҙҙең Мәрхәп ҡәртәсәй, йәйгелектә беҙҙә йөрөһөн, тип, атайымды үҙҙәренә Буранбайға алып ҡайта. Ибраһим ҡартатай бик сос була: "Фәррәх минеке",- тип, опекунлыҡҡа документ эшләй һәм уны балалар йортона ебәрмәй, алып ҡала. "Аралбаев Фәррәх Насип улы Фәхретдинов Ибраһимға опекунлыҡҡа бирелә," тигән бер һары ғына ҡағыҙ миндә һаҡлана. Шулай итеп, атайым Буранбайҙа ҡала ла ҡуя. Әсәйебеҙ Таңһылыу Таулыҡай ауылыныҡы. Оморҙаҡов Әбделхәбир ҡартатайҙың ун балаһы булған. Дүрт улдан һуң әсәйем өлкән ҡыҙ булып донъяға килә. Өләсәйем иһә Буранбайҙыҡы, ул Буранбай сәсәндең ейәне Әйүптең ҡыҙы була.

**▸ Атайығыҙҙы Ибраһим олатай Буранбайҙа алып ҡала, ә уның артабанғы яҙмышы нисек булған?**

**Фәрит:** Атайыбыҙ Ибрай ҡартатайҙа йәшәп, балиғ булғас, колхозда эшләй башлаған. "Армияға китһәм, ҡайтмайым, генерал булам", тип хыяллана торғайным, Ибраһим ҡартатай менән Мәрхәп ҡәртәсәйҙе көтөргә кәрәк, тип, мине хәрби хеҙмәткә алманы ла ҡуйҙылар", тип һөйләне. Атайым ғүмере буйы дөйөм хужалыҡта эшләне, башта балта оҫтаһы, төҙөүсе булһа, олоғайғас, һыйыр һауыу машинаһы операторы булып китте.

**▸ Ир балаларҙы тәрбиәләүе еңел түгел. Был осраҡта атай роле алға сыға, тип уйлайым. Уландар тәрбиәләү ысулдары ғаиләлә ниндәйерәк булды? Һәр хәлдә, төп иғтибар (ауырлығы ла, еңеллеге лә) өлкән улға төшкәндер бит инде?**

**Фәтих (ғаиләлә 1-се ул):** Атайыбыҙ беҙҙе, улдарын, дәртләндереү сараһын оҫта ҡуллана торғайны: "Һарайҙы көрәйһегеҙ, йәйгелеккә мин һеҙгә велосипед алып бирәм". Әлбиттә, ҡыуанаһың, өмөт итәһең һәм ҡуйылған бурысты яуаплы итеп башҡараһың. Бына шулай, атай малайҙарына маҡсатлы йәшәргә өйрәтте. Тәүҙә бер велосипед алып бирҙе, беҙ ул саҡта биш малай инек, алмашлап йөрөнөк. Шунан тағы берҙе һатып алды. Берҙәмлек, татыулыҡ хөкөм һөргәс, барыһы ла етеш булды. Атайыбыҙҙың һигеҙ класс ҡына белеме булһа ла, математиканан шәп ине. Дәрес әҙерләшер ине.

**Фәттәх (ғаиләлә 3-сө ул):** Эйе, атай ҡыҙыҡһындырыу сараһын, нимә менән булһа ла иғтибарҙы йәлеп итеү, көнелдә дәрт осҡоно тоҡандырыу юлын таба белде. Мәҫәлән, экскурсияларға алып йөрөтөүен һис оноторлоҡ түгел. Шунда алып бара, бында алып бара. Поезд йөрөй башлағас, "Һеҙгә ҡаланы, поезды күрһәтәм", тип, Сибайға алып барҙы. Поезд ошолай була икән тип, ғәжәп итеп ҡарап торғайныҡ.

**Фәйез (ғаиләлә 4-се ул):** 5-се, 6-сы кла-сты дүртле, бишлегә генә бөттөниһәгеҙ, Өфөгә алып барам, тине. Беҙ ҡустым менән тырышып уҡып бөттөк, һәм атайым баш ҡалаға алып килде, йөрөттө. Беҙ унда "Ағиҙел" ҡунаҡханаһында ҡундыҡ, ә сәфәрҙән самолет менән осоп ҡайттыҡ.

**Фәннүр (ғаиләлә 5-се ул):** Хәҙер бына уҡытыусы булып йөрөйөм, ә атай һымаҡ, балаларҙы самолет менән йөрөтөп, ҡунаҡханаларҙа йоҡлатыу мөмкинлеге юҡ. Ябай колхозсы булһа ла, ул шуны эшләне. Ҙур маҡсаттар ҡуя ине ул, минең йырсы булыуымды теләй ине. Шуға ла миңә Башҡорт дәүләт опера һәм балет театрын күрһәтеп: "Уҡырға килерһең, артабан бына ошонда йырларһың",- тине.

**Фәйез:** Эйе, был сәфәрҙә атай беҙгә барлыҡ юғары уҡыу йорттарын күрһәтте һәм сәнғәт училищеһына ла алып барҙы. Мәктәпте һәйбәт тамамлаһағыҙ, ошонда уҡырһағыҙ, тине.

**▸ Тимәк, һеҙ атайығыҙҙың өмөтөн аҡланығыҙ? Ул теләгәнсә һәйбәт уҡынығыҙ?**

**Фәтих:** Уның йөҙөнә ҡыҙыллыҡ килтермәҫкә тырыштыҡ. Тәрбиә сараһына килгәндә, әсәй ҙә беҙҙе бер ваҡытта ла күҙ уңынан ысҡындырманы, ул үҙе лә ата-әсәләр комитеты ағзаһы булды, гел алда йөрөнө, йыйылыштарҙы ҡалдырманы. Беҙгә әйтмәй генә дәрескә инеп ултыра торғайны.

**Фәннүр:** Уҡырға сығып китәһең, әсәй бер нәмә лә өндәшмәй өйҙә тороп ҡала. Бер заман класс ишеге асылып китә лә, унан әсәй килеп инә. Бит яна башлай торғайны, сөнки уҡытыусы дәресте мотлаҡ һинән һораясаҡ бит. Әсәйҙең тәрбиәһе лә көслө булды.

**Фәттәх:** Эйе, күмәк балалы ғаиләлә тәрбиәләнеп үҫкәс, әсәй ҙә беҙҙе үҙе белгәнсә тәрбиәләргә тырышты. "Ярай-ярамай"ҙы бәләкәй саҡтан белеп үҫтек. Талаптар шулай ине: алдашмаҫҡа, урлашмаҫҡа, татыу булырға. Бала-саға үпкәләшеп, сыйышып китәһең, ул һәр саҡ ярҙамға килде. "Һеҙ бер туғандар", тип аңлатып, ҡулды бирҙереп, килештереп ҡуя торғайны. Ғәйебең бар икән, "Ҡабат улай итмәйем", тип һүҙ бирергә ҡуша. Ә атайҙың сәнғәткә булған һөйөүе бирелде беҙгә. Ул ҡурай ансамблендә йөрөнө, һәм ҡурайсылар менән илебеҙҙең төрлө ҡалаларында сығыштар яһанылар.

Атай шәп ҡурайсы булды. Беҙ үҙебеҙ ҙә Буранбай сәсәндең нигеҙендә йәшәнек. Хәҙер унда Фәрит ағайымдар тора. Атайыбыҙ ҡурайҙа уйнарға Буранбаев Әптрәхмәндән өйрәнгән. Башҡортостан көндәре үткән саҡта Ленинградта, Мәскәүҙә Ғата Сөләймәнов, Ишмулла Дилмөхәмәтовтар менән бергә сығыш яһаған. Раев Зәйнулла ағай ҡурайҙа уйнарға атайымдан өйрәнде һәм беҙҙең районға беренсе профессиональ ҡурайсы булып ҡайтты. Мине лә атайым өйрәтте.

**Фәрит:** Башҡортостандан 100 ҡурайсы ҡатнашҡан ул сараға беҙҙең ауылдан Азамат олатай Хәмитов һәм беҙҙең атай барған. Улар ауылда өс ҡурайсы булдылар, тағы ла береһе - Әхмәр Үтәбайҙың атаһы Ғүмәр олатай ине, тик ул Башҡортостан көндәренә бара алмаған. Былай һәр саҡ бергә булдылар.

**Фәттәх:** Әсәйем ейән-ейәнсәрҙәрен, беҙҙең балаларҙы эйәртеп, ҡырға алып сыға торғайны. "Беҙ уйнаған таш өй", тип, Тыпырлай тауына алып бара, таҡмаҡ әйтеп, бейетеп, уларҙа сәнғәткә һөйөү уятты. Фәрит ағайҙың улы Иҙел Аралбаев - хәҙер опера һәм балет театры солисы. Мәктәптә беҙ ҙә уға музыкаль белем бирҙек. Мин уға ҡурай өйрәтһәм, ҡатыным бейергә өйрәтте. Фәннүрҙең ҡыҙы Нәргизә юғары музыка белеме алды. Фәрит ағайымдың ҡыҙы Нәркәс опера һәм балет театрында эшләй. Хәбир улым өлгөлө балалар ансамблендә әсәһе ҡулында шөғөлләнде, шунан Р. Нуриевтың колледжын тамамлап, бөгөн Фәйзи Ғәскәров ансамблендә солист булып бейеп йөрөй. Ул Башҡортостандың атҡаҙанған артисы. Былар барыһы ла атай-әсәй яғынан сәнғәткә иғтибар һәм тәрбиә көслө булыуҙың һөҙөмтәһе. Элек, бәләкәй саҡта, ҡунаҡтар йыйылһа, беҙ урындыҡ, карауат аҫтына инеп, ололарҙы тыңлап ята торғайныҡ. Өлкәндәр, эй, матур итеп йырлайҙар, хатта тән ҙемберләп китә ине.

**Фәйез:** Бәләкәй саҡтан беҙҙең өй моңға тулы булды. Элек иртәнге һигеҙенсе яртыла концерт башлана ине бит радионан, беҙ шул тауышҡа уяна торғайныҡ. Йоҡлап киткәндә лә - музыка менән. Һәр ваҡыт башҡорт музыкаһы яңғырап торҙо. Ана шул, моғайын, кемгәлер аңлы, кемгәлер аңһыҙ рәүештә һеңдерелгән.

**Фәннүр:** Атай ҡайҙа барһа ла пластинкалар алып ҡайта торғайны. Татарстан йырсылары Илһам Шакиров, Әлфиә Авзалованың, үҙебеҙҙең ҡурайсыларҙың пластинкалары күп булды. Ғата Сөләймәновтың пластинкаһын тыңларға ярата торғайныҡ.

Атайым беҙҙән, балаларҙан, ҡунаҡтарға концерт ҡуйҙырта ине. Кем булдыра ала, шул сығып һөнәрен күрһәтә, ә ҡунаҡтар аҡса ташлайҙар. Кемеһелер биш тин, кемеһелер ун тин, кемеһелер һөйөп ала, беҙгә фатиха бирә.

Таулыҡайҙан Ишбулды Хәсәнов еҙнәйебеҙҙең тауышы шул тиклем шәп булды. Йоҡомһорап ятаһың да, шул еҙнәй йырлай башлаһа, бөтөн йоҡо оса. Бәләкәс кенә көйө: "Эх, шуның кеүек йырларға ине!" - тип уйлап ята торғайным. Атайым үҙе лә матур йырланы. Беҙҙең иң тәүге тәнҡитсе лә ул булды инде. Тыңлай ҙа: "Улым, был ерендә алдайһың да инде", - тип, дөрөҫ йырларға өйрәтә торғайны.

**Фәрит:** Йәш сағында Венгриянан берәү килеп, атайымдың йырҙарын яҙҙырып алып киткән. Ул ваҡытта беҙҙә магнит таҫмаһына яҙҙырыу юҡ ине бит. Рәмил Ҡотдосов атайымдың йәш саҡтағы шул яҙмаһын алып ҡайтты, рәхмәт уға.

**Фәннүр:** Әсәйҙең бер туған ағаһы Воркутала шахтер булып эшләне. Ул ҡайтһа, ауыл менән ҡунаҡ итәләр, ул да моңоборға зарығып ҡайталыр инде. "Был олатай килһә, аҡсаны күп бирә", тибеҙ, башҡортса кейенеп алабыҙ, йырлап-бейеп, киноға барырлыҡ аҡса эшләйбеҙ.

**Фәттәх:** Башҡорт кейемдәрен әсәй үҙе тегеп бирә торғайны. Фәннүргә бейергә ситек тә һатып алып бирҙе. Мәктәпкә уҡырға барғас, ҡустыбыҙ сәхнәгә сыға башланы. Уның оҫта бейегәнен күреп, район смотрына саҡырҙылар. Матур сығыш яһағас, хатта Артекҡа путевка менән бүләкләнеләр.

**▸ Артек күптәрҙең хыялы булды бит. Унда барған бала иң бәхетле кеше ине. Ә һин, Фәннүр, ниндәй тәьҫораттар менән ҡайттың?**

**Фәннүр:** Атай-әсәй, ағайым оҙатырға Өфөгә тиклем килделәр. Үҙемде армияға китеп барған һымаҡ хис иттем. Поезд менән алып киттеләр. Бер ай бала өсөн оҙаҡ бит инде, башта ҡыйын ине, шунан өйрәнеп кителде. Ауыл мөхитенән сығып, тегендә аҡ нәски, шортикта йөрөү әкиәт һымаҡ булды. Ҡаҙаҡтар менән дуҫлаштым, думбырала уйнарға өйрәндем. Ныҡ күңелле булды. Артек йырҙарын әле лә хәтерләйем. Ағайым ҡурайҙа уйнарға өйрәтеп ебәргәйне, унда ла бейеп, ҡурай уйнап, лауреат булып, "Артек тандары" миҙалы алып ҡайттым.

**▸ Фәтих, өлкән ул булараҡ, үҙегеҙҙе кесе туғандарығыҙ өсөн ни ҡәҙәре яуаплы тоя инегеҙ? Ағай булараҡ, үҙегеҙҙе нисек тоттоғоҙ?**

**Фәтих:** Әсәйем эште һәр беребеҙгә бүлеп бирә торғайны. Эште мотлаҡ теүәлләйбеҙ, апайыбыҙ берәү генә булғас, ҡатын-ҡыҙ эше, тип ҡарап торманыҡ, иҙәнен дә, һауыт-һабаһын да йыуҙыҡ. Хәҙерге тел менән әйткәндә, субординация һаҡланды. Ҡустыларым әйтеүҙе, өйрәтеүҙе ҡабул иттеләр, Аллаға шөкөр. Белмәгәндә, үҙҙәре һорап, мөрәжәғәт иттеләр. Атайҙың белемгә ынтылышы ныҡ көслө ине. Был бигерәк тә гәзит-журналдарҙы күп итеп алдырыуында сағылды, ошо мөнәсәбәт беҙгә лә бирелде. Матбу-

*✓ Ағайым өйгә ҡайтып инһә, иртәнсәк беҙҙе уятып, урамда йүгертеп, физик күнегеүҙәр яһатып, теҙеп алып йөрөтә, ҡайтҡас, урындарҙы йыйыштырырға ҡуша, шунан иртәнге сәйгә йыуындырып алып килә торғайны.*

# УЛАР!



ғат баҫмаларына яҙҙырыуҙы беҙҙең ирекҡә ҡуйҙы, һәм беҙ күңел тартҡан журналдарҙы кинәнеп алдырҙыҡ. Әлбиттә, барыбыҙ ҙа техника менән ныҡ ҡыҙыҡһына инек. "Юный техник", "Юный натуралист", "Моделист-конструктор" һымаҡ журналдарҙы даими алдырҙыҡ. Үҙенең мотоциклы булғанғалыр, атайым "За рулем" журналынан өҙөлмәне. Һәр бер номерын теркәп, туплама яһап барҙы.

**Фәрит:** Фәтих ағайымдың беҙгә биргән тәрбиәһе тураһында әйтәйем әле, сөнки ул үҙе һөйләмәҫ. Беҙ бәләкәй саҡта Баймаҡта профессиональ-техник училище астылар. Алтмышынсы йылғылар күмәк ине ауылда, барыһы ла шунда киттеләр. Улар училищеның тәүге сығарылыш уҡыусылары ла булдылар. Бөтәһе лә бер иш формала күк фуражка, күк костюм кейеп йөрөйҙәр, шуға уларҙы Баймаҡ кешеләре "фазан" тип йөрөтә ине. Ағайым өйгә ҡайтып инһә, иртәнсәк беҙҙе уятып, урамда йүгертеп, физик күнегеүҙәр яһатып, теҙеп алып йөрөтә, ҡайтҡас, урындарҙы йыйыштырырға ҡуша, шунан иртәнге сәйгә йыуындырып алып килә торғайны. Үҙенә күрә ир-егет тәрбиәһе бирергә тырышты. Үҙе лә бит һигеҙенсе класты ғына бөтөп, Баймаҡта тәрбиә алып йөрөгән малай, ә беҙҙе, кесе туғандарын, ниндәй ныҡ ҡарай ине.

**Фәттәх:** Малай саҡ. Велосипедта йөрөгө килә. Кем һине өйрәтә? Әлбиттә, ағайҙар. Башта һине тотоп йөрөйҙәр, шунан ултыртып ебәрәләр, бер заман ат менгәндәй булып, үҙең тәгәрәп китәһең инде. Ат тигәндән, һине кем атҡа атландыра? Шул үҙендең ағайҙарың! Һыу ингәндә, был батып ҡуймаһын, тип, улар ҡурсалай. Велосипедтан һуң мотоциклға сират етә. Унда ла ағайҙар өйрәтте.

**Фәйез:** Атай ҙә, әсәй ҙә, һәр саҡ татыу булығыҙ, тип әйтә килделәр. Шөкөр, уларҙың әйткәненә күрә, байрам булһын, эш булһын, беҙ көнө-төнө бергә. Үҙебеҙ өйҙәр һалып сыҡтыҡ, бер-беребеҙгә ярҙам иттек. Был бит татыулыҡтың һөҙөмтәһе. Атай-әсәйгә, апайға рәхмәт. Ҡайһы бер туғандар бер-береһенә зыяратҡа ла бармай, ундай хәлдәр ҙә була, Аллам һаҡлаһын. Беҙҙең балалар - ике туғанмы, өс туғанмы - һәр саҡ бергә. Беҙ күмәк.

**Татыулыҡты һаҡлар өсөн ниндәй сифат кәрәк? Ниндәйҙер талап барҙыр бит?**

**Фәттәх:** Бала саҡтан атай менән әсәй әйтеп һеңдермәһә, аҙаҡтан яһалма индереп булмай был сифатты. Тәрбиә бала саҡта һалына.

**Фәрит:** Ололар "Ана һөтө менән инмәгән, тана һөтө менән инмәй", тип юҡҡа ғына әйтмәгән. Тәрбиә нигеҙе өйҙә һалына. Хәҙер ҡайһы бер кешеләр тәрбиәне балалар баҡсаһына, мәктәпкә һылтай ҙа ҡуя. Улай түгел. Мәктәп иң элек белем бирергә тейеш. Күп кеше шуны уйламай, килә лә, уҡытыусыны тәнҡитләй башлай, ә тәрбиә иң алда үҙенең алдында торған бурыс икәнен онота.

**Фәннүр:** Беҙ уҡыған заманда ата-әсә тәрбиәһе көслө булды. Мәктәптән ҡайтып: "Уҡытыусы ҡолағымды борҙо",- тип, әйтһәң, үҙең әрләнәһең. Уҡытыусы булараҡ әйтәм, бөгөн киләләр ҙә: "Тәрбиәләгеҙ, беҙ һеҙгә тапшырғанбыҙ", - тиҙәр. Бала бит көтөүгә бирелгән һарыҡ түгел.

**Фәрит:** Ҡөрьәндә ете йәшкә тиклем баланы һүҙ менән тәрбиәләргә, унан әйтептә, әйткәнде алмаһа, тыңламаһа, сыбыҡ менән һуғырға ла рөхсәт ителгән. Сыбыҡ беҙгә лә электе, шунһыҙ булмай.

**Фәттәх:** Халыҡта шундай әйтем дә бар, баланы үҙеңдән йомшаҡҡа һалма, үҙеңдән тәмлене ашатма. Был үҙенә күрә ғаиләлә субординацияны һаҡлау. Элек ата-бабалар шуны тотҡандар, шуны эшләгәндәр. Хәҙер ҡайсаҡ балаларын аллалаштыра башлаған йәштәрҙе лә күрәбеҙ.

**Бер-берегеҙгә нисек мөрәжәғәт итәһегеҙ?**

**Фәттәх:** Беҙ ғаиләлә бер-беребеҙҙе исем менән әйтмәйбеҙ. Ҡайһы берәү үҙенең ағаһына исеме менән өндәшә бит, ә беҙҙә ундай тәртип юҡ. Ғаиләлә ҡаты итеп тыйҙылар: ағай икән - ағай, апай икән - апай, ҡусты икән - ҡусты. Улар тиңдәш түгел, һәр кешенең үҙенең дәрәжәһе бар. Был - ихтирам.

**Фәрит:** Нисек ағайыңа үҙеңдең тиңдәшең һымаҡ өндәшәһең ти! Ҡала балаларының бер-береһенә исем менән өндәшкәнен ишетеп, "Ул һиңә ағаймы-ҡустымы?" тип һораһаң, бала үҙе лә аптырап ҡала, белмәй. Сит ил йәнһүрәттәрен ҡараһаң да бөтәһе лә бер-береһенә исем менән өндәшәләр. Шуларҙы ҡараған бала өйрәнә лә китәлер инде.

**Һеҙ барығыҙ ҙа әрмелә хеҙмәт иттегеҙме?**

**Фәйез:** Беҙ, ғаиләләге биш ул, бөтәбеҙ ҙә армияла хеҙмәт иттек. Атай йортонда бишебеҙҙең дә армиялағы ҙур фотолары тора. Шулай уҡ ике туғандарҙың барыһы ла хеҙмәттә булдылар. Беҙҙең үҙебеҙҙең традиция бар: кем армияға алына, уны вокзалда ҡурай уйнап, бейеп оҙатып ҡалабыҙ һәм армиянан ҡайтҡанда ла ҡурай уйнап, бейеп ҡаршы алабыҙ.

**Фәрит:** Шуға ла кесерәк туғандар: "Мине лә ағайҙар һымаҡ оҙатырҙармы икән, тип, ҡайтыр ваҡыттары етһә, мине лә ағайҙар һымаҡ ҡаршы алырҙармы икән?"- тип көтөп йөрөйҙәр.

**Фәтих:** Оҙатҡан ваҡытта һәр ваҡыт "Әрме" йырын йырлап оҙата торғайныҡ.

**Фәннүр:** Әрмеләргә барып сәс еткерҙем.... Эйе, беҙ бәләкәй саҡта хәрби хеҙмәткә китәсәк егеттәр алдында атай ошо халыҡ йырын йырлай торғайны. Беҙ, бала-саға, тыңлап ултырабыҙ һәм армияға киткәндә "Әрме"не мотлаҡ йырларға кәрәк икән, тип ышанабыҙ.

**Фәрит:** Ул саҡта элекке мәсет ауыл клубы ине. Хеҙмәткә китәһе егеттәрҙе колхоз шунда саҡырып, концерт ҡуйып, һәр береһенә сумаҙан, таҫтамал бүләк итә торғайнылар. Беҙ, малайҙар: "Ух, беҙ киткән ваҡытта ла шулай итәсәктәр бит!" - тип дәртләнеп ҡуя торғайныҡ. Тик был йола беҙ армияға алыныр алдынан бөттө лә ҡуйҙы. Хәҙер шуны кире тергеҙһәләр, ҡалай һәйбәт булыр ине, үҫеп килгән быуынға тәрбиә бит ул. Хеҙмәткә алынған егеткә дәрт бирәсәк: "Күпме халыҡ килеп оҙатып ҡалды, шундай-шундай нәмәләрҙе аманат итеп бирҙеләр",- тип уйлаясаҡ. Егет ҡанатланып, армияға ҙур шәхес булып китеп барасаҡ.

**Фәйез:** Совет власының барыбер тәрбиә буйынса идеологияһы көслө булған. Кеше ҡәҙерен белеү тигән нәмә бар ине. Патриотик тәрбиәгә иғтибар һүнмәһен ул. Ватан, ил, халыҡ тураһында һәр ир-егет уйларға бурыслы. Фундаменталь әйберҙәр кеше аңынан айырылғыһыҙ булырға тейеш.

**Фәрит:** Беҙҙең заманда егеттәр армияға бара алмаһа, ояла торғайнылар. Һалдат ҡайтҡас, яҡындары ҡунаҡ йыя, шул ваҡытта тегеләр килмәй ине. Беҙ үҙебеҙ ҙә улар алдында армия тураһында һөйләмәй торғайныҡ, сөнки уларға шул хәтлем ҡыйын икәнен аңлай инек. Улар бит ҡасып ҡалмаған. Хәҙер инде йәштәр араһында, ысынлап та, ҡасып ҡалғандар күп.

**Һөнәр һайлау, эҙләнеү юлы нисек булды?**

**Фәтих:** Кеше бала саҡтан хыяллана. Ә хыялың - бер, мөмкинлек - икенсе. Атайым мине, эргәлә генә бит, тип, һөнәрселек училищеһына бирҙе. Оҡшаны, тип әйтмәйем, ләкин ул оло тормош юлына бер баҫҡыс ине. Артабан армияға киттем. Ул үҙе бер дәрес булды, сөнки хәрби хеҙмәттә киләсәк тураһында уйланаһың. Башҡорт дәүләт педагогия институтын тамамлағас, Шүлкә мәктәбенә уҡытырға барҙым. Хәҙер килеп, шуны әйтәм: алған һөнәрҙең бер ҡасан да артығы юҡ. Училищела уҡығанда алған электрик һөнәре артабан миңә бик кәрәкте. Электр үткәреүҙе, ҡоролмаларҙы йүнәтеүҙе бөтәһен дә үҙем эшләйем. Атайыма рәхмәтлемен, тимәк, ул төптән уйлаған булған.

**Фәрит:** Мәктәпте тамамлағас, хәрби хеҙмәткә алындым. Тәбиғәт, урман минең күңелемә яҡын ине. Армияла саҡта урмансы булыу тураһында хыялландым һәм хәрби бурысты үтәп ҡайтҡас, урман техникумына уҡырға барҙым. Утыҙ йыл урман хужалығында эшләнем.

**Фәттәх:** Мин инде сәнғәткә ғашиҡ кеше, шуға ла бәләкәй саҡтан уҡ ниндәй һөнәр һайлауым асыҡ ине. Мәктәптә үткән сараларҙа әүҙем ҡатнаштым. Баймаҡ сәхнәләрендә ҡурайҙа уйнап, грамоталар алып ҡайта торғайным. Атайыма: "Сәнғәт училищеһына барырға теләк бар",- тигәс, үҙе алып килеп, Ғата ағай Сөләймәновҡа тапшырҙы. Ришат Рәхимов минең остазым, уға ныҡ рәхмәтлемен. Унын ҡулында белем алып сыҡтым. Беҙҙең тынлы инструменттар бүлеге була торғайны, оркестрҙың мотлаҡ берәй ҡоралында уйнарға өйрәнергә тейеш инек. Шамил Яҡуповҡа рәхмәт, флейтала өйрәндем. Һәм армияла мин тынлы оркестрҙа хеҙмәт иттем. Мәктәптә музыка уҡыттым, балаларҙы ҡурайға өйрәттем. Ситтән тороп юғары белем алдым, шулай ҙа музыканттарға һәр ваҡыт ҡытлыҡ булғас, музыканан уҡыттым. Мин йәштән бейеүгә ғашиҡмын. Динислам Исҡужин етәкселегендә "Ирәндек" халыҡ бейеүҙәре ансамбленә йөрөй башлағайным, шунда кәләш менән таныштым, унда егерме йылдан артыҡ бейенек. Ошо ансамбль беҙҙе осраштырҙы, һәм ғаиләбеҙ менән ғүмер буйы сәнғәткә хеҙмәт иттек. Иҙел Аралбаев, Рәмил Ҡотдосов, Юнир Һағынбаев, Йәмил Үтәбаев кеүек таланттарҙы тәрбиәләнек.

**Фәйез:** Бала саҡта милиционер булырға хыяллана инем. Мин Төньяҡ флотта өс йыл хеҙмәт иттем. Хеҙмәттән һуң Омскиҙағы юридик институтҡа уҡырға барырға тейеш инем, командирым документарҙы әҙерләп ебәргәйне лә. Тик атай менән әсәй риза булманылар. "Апай-ағайыңдар педагог, улар юлын һайла", тигәс, һүҙҙәрен йыҡманым. Башҡорт дәүләт университетының география факультетына уҡырға индем, уны тамамлағас, өйгә лә ҡайтып тормай, тура милиция начальнигына индем. Улар юғары белемле белгесте ҡушҡуллап эшкә ҡабул иттеләр. Ҡайтып, атайға әйткәс: "Ярар, улым, үҙең ҡара", - тине. Шулай итеп, иртәгәһен үк милицияла эш башланым. 2008 йылда подполковник дәрәжәһендә хаҡлы ялға сыҡтым. Тәбиғәт мине барыбер алыҫ ебәрмәне. Әлеге көндә хайуандарҙы һаҡлау буйынса экология өлкәһендә Баймаҡ менән Йылайыр районы буйынса әйҙәүсе белгес булып эшләйем. Әйткәндәй, улым ғаилә династияһын дауам итә, ул полицияла эшләй.

**(Дауамы 10-сы биттә).**

ИР-ЕГЕТТӘР ҠОРО

# АРАЛБАЕВТАР УЛАР!

**(Башы 8-9-сы биттәрҙә).**

**Фәннүр:** Бәләкәстән йырланым да, бейенем дә. Атайымдың да мине йырлатҡыһы килде. Хөсәйен Мәжитов, Мәғәфүр Хисмәтуллиндарҙы миҫалға килтереп һөйләй торғайны гел. Фәттәх ағайымдың да йоғонтоһо ныҡ ҡына булды. Фәрит ағайым спорт менән, ирекле көрәш, самбо менән ныҡ ҡыҙыҡһынды. Иплəп кенә миңә спорт тәрбиәһе бирә башланы. Бәләкәс кенә сағымдан уҡ көрәшә һәм балалар һабантуйы ойоштора торғайным. Спорт ярыштарын да гел мин ойошторҙом, артабан ағайым ыңғайына етди шөғөлләнеп киттем. Армияла ла спортты ташламаным. Ҡайтҡас, төрлө өлкәлә үҙемде һынап ҡараным. Атайым балта оҫтаһы булғас, бер йыл колхозда оҫта булып йөрөнөм. Ҡыш бура бурарға кәрәк, ауыр. Шул саҡта: "Ай-һай, уҡырға кәрәк", - тип уйланым. Стәрлетамаҡ физкультура техникумын бөткәндән бирле мәктәптә эшләйем. Милли көрәш буйынса түңәрәктәр асып ебәрҙем. Үҙем дә көрәш буйынса Башҡортостан чемпионымын. Өҫтәл теннисы буйынса Урал арьяғы чемпионы булдым. Үҙемдең ҡыҙҙарым да теннисcылар. Һөнәр һайлау, тигәндән, техникумда уҡығанда медицина менән дә ҡыҙыҡһындым, табип булыу теләге йәшәне. Балам булһа, берәйһен медицинала уҡытырмын, тигәйнем. Ҙур ҡыҙым Нәргизә сәнғәт юлын һайлаһа, Нурания ҡыҙым медуниверситетты ҡыҙыл дипломға тамамлап, табип булып эшләй.

**Әсәйегеҙ яғынан һеҙҙе һунарсылар нәҫеле тип тә атарға була. Һәр хәлдә, тәбиғәт, урман эшенән ситтә түгелһегеҙ. Фәйезде һунарсы тип тә атанылар. Фәйез, ғөмүмән, ер-һыуға мөнәсәбәт, тәбиғәт менән бәйләнешегеҙҙе белге килә.**

**Фәйез:** Эйе, әсәй мәрхүмәнең атаһы Әбделхәбир Күсәрбай улы, уның бөтөн уландары ла һунарсы булғандар. Ул ваҡытта ҡаргиҙәр техникалар юҡ, бүрене һыбай суҡмар менән һуғып ала торған булғандар. Беҙ һунарға йөрөй башлағанда атайым: "Ҡараңғыла сығып китеп, ҡояш сыҡҡансы урманда булырға кәрәк", - ти торғайны. Урманда булып ҡайтыу ғына ла бит ял-энергия бирә.

**Фәттәх:** Башҡорт элек-электән тәбиғәт балаһы. Ул азатлыҡ, иркенлек яратҡан. Һунар тип түгел, ә тәбиғәткә яҡын булайыҡ, тип йөрөйбөҙ беҙ ҙә. Ғаилә ағзалары менән йыйылып та сығабыҙ. Тәбиғәт менән аралашыу - үҙе бер ғүмер.

**Фәрит:** Элек яҙ еттениһә, мәктәп балаларын урманға алып сыға торғайнылар, беҙ бөтәбеҙ ҙә, ағай-ҡустылар, шунда йөрөнөк. Балалар, ҡасан урман ултыртырға барабыҙ, тип көтөп йөрөй торғайны. Үҙем урмансы булып эшләй башлағас, мәктәпкә килһәм, балалар: "Ур-ра, ағай килде, урман ултыртырға барабыҙ!"- тип ҡыуаналар ине. Улар урманға барһа, ихлас эшләйҙәр. Мин урман хужалығында эшләгәндә Бикештән Привалов Радик Александрович тигән бер урыҫ мастеры Буранбай, Таулыҡай, Сыңғыҙға килеп, башҡорт балаларын эшкә алып китә торғайны. "Нишләп үҙегеҙҙең ауыл балаларын алып йөрөтмәйһең?"- тиһәм: "Ой, улар ялҡау, мин башҡорт балаларын алып барам, улар эшкә әрһеҙ, эш рәтен беләˮ, - ти торғайны. Хәҙер мәктәптең, балаларҙың тәбиғәт менән бәйләнеше өҙөлдө, хеҙмәт терапияһы төшөп ҡалды, тиергә була...

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Аралбаевтар менән Башҡортостан юлдаш телевидениеһының "Алтын тирмә" тапшырыуына килгәндәрендә осрашҡайныҡ. Был ғаиләнең, был тоҡомдың тағы бик күп ғаилә йолалары, тәртип-ҡағиҙә өлгөләре тураһында һөйләргә булыр ине. Ҡағыҙ биттәре етмәҫ. Әңгәмәбеҙ аҙағында Фәттәх: "Аралбаевтарҙың тағы ла бер традицияһы бар, Өфөгә килһәк, Салауат батырҙың хәлен белеү - беҙҙең мотлаҡ бурыс", - тине һәм ағай-энеһен ошо йоланы үтәү өсөн һәйкәл эргәһенә ашыҡтыра һалды...**

**Фәрзәнә АҠБУЛАТОВА әңгәмәләште.**

ҒАИЛӘ МӘКТӘБЕ

*✓ Бөгөнгө көндөң "ирекле мөхәббәт" рухында тәрбиәләнеп үҫеп еткән күпселек йәштәргә тота килеп: "Ғаилә төҙөү мәсьәләһендә ата-әсәңдең кәңәшен тыңла!" - тиеү елгә ҡаршы... борсаҡ һибеү һымағыраҡ.*

# ЖИРАФҠА ЯҠШЫРАҠ КҮРЕНӘМЕ?



## Ә шулай ҙа атай-әсәй кәңәше мотлаҡ!

**(Башы 7-се биттә).**

Бала сағымдан бер ғаиләне күреп үҫтем. Р. ағай менән С. еңгәй (мәрхүм инде улар) бик татыу йәшәнеләр, бала-сағалары ла күп булды. Ағай кешенең ологайған атаһы һәм әсәһе лә улар менән бергә йәшәне. Ирен, ҡайны-ҡәйнәһен ныҡ хөрмәт иткән, башҡа туғандарға, күршетирәгә лә яғымлы, балаларына ла иғтибарлы булырға өлгөргән еңгәнең һәр саҡ алъяпҡыс кейеп, түрбаш тирәһендә ниҙер эшләп йөрөгәне генә күҙ алдымда. Уларҙың улы менән гел бергә уйнай торғайныҡ. Ағай был еңгәне районыбыҙҙың алыҫ ҡына бер ауылынан алған булған икән. Дөрөҫөрәге, атаһы бер таныш мулланың ҡыҙын үҙе һөйләшеп, килен итеп алып биргән икәненә һуңғарыраҡ хәбәрҙар булдым. Бына шулай, атай кешенең һүҙен йығыу тигән нәмә уйына ла килмәгән, үҙе дини рухта тәрбиәләнгән был ағай, элек бөтөнләй белмәгән ҡыҙҙы ҡатын итеп алып, ғаилә мәсьәләһендә һис бер ҡайғыһыҙ ғүмер итте. Эшкә егәрле буған ире менән еңгәй ҙә сикһеҙ бәхетле булды. Һәр хәлдә, улар араһындағы йылы мөнәсәбәтте күреп йөрөгән зирәк малайға (миңә) фәҡәт ана шулай булып тойолдо. Балалары ла тәртипле, эшсән булып үҫте, бөгөнгө көндә барыһы ла дин юлында...

Ислам дине ҡануны буйынса йәшәгән ата-бабаларыбыҙ борон ғаилә төҙөүгә енси теләкте ҡандырыу ысулы ғына тип ҡарамаған шул. Балалар үҫтереп, ырыуҙы, тоҡомдо артабан дауам итеү иң алғы планға ҡуйылған. Малай йә ҡыҙ булһынмы, бала сағынан бер-береһенә ихтирамлы булыу рухында тәрбиә алып үҫкәндәр борон. Ул ғына ла түгел, инде балиғ булғандан һуң да ата-әсәһен тыңлап, уларҙың кәңәштәрен тотоп йәшәгән беҙҙең милләттәштәребеҙ. Ә инде Октябрь түңкәрелешенән һуң халҡыбыҙ аңынан дин менән бергә уның ана шундай әхлаҡи ҡиммәттәре лә ҡаҡҡылап-һуҡҡылап сығарып бөтөрөлгән, үкенескә. Хатта Ислам динен беҙҙең йөрәгебеҙгә ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙҙы иҙеүсе бик насар күренеш тип һеңдерҙеләр бит. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, бөгөн дә ана шундай иныныуҙа булғандар күп. "Мөхәббәт" төшөнсәһен тик бер яҡлы ғына аңлап, "Ромео һәм Джульетта"лар, Һиндостан фильмдары аша өйрәнеп, инде әллә нисә быуын үҫеп сыҡты. Хәҙер килеп өйләнешеүселәрҙең 75 проценты айырылыша, тип саң ҡағабыҙ...

Әммә бына ошо бөгөнгө хәлебеҙ өсөн йәштәребеҙҙе ғәйепләргә ашыҡмайыҡ. Үҙебеҙ ҙә йәш сағыбыҙҙа, кемдер әйтмешләй, "ирекле мөхәббәт" яҡлы булдыҡ, ғаилә мәсьәләһен йәштәр фәҡәт үҙҙәре генә хәл итергә тейеш, тип һананыҡ. Ә бит беҙ үҙебеҙҙең балаларыбыҙҙы, боронғо ата-бабаларыбыҙ һымаҡ, бала-сағынан ололарға ихтирам рухында тәрбиәләргә тейеш инек. Хәҙер ҡасандыр сәскәнебеҙҙе урабыҙ, үҙебеҙ ултыртып, хатта һыуҙар ҡойоп тигәндәй үҫтергән үҫентеләребеҙҙең "уңышын" йыябыҙ! Нисек кенә үкенесле булып тойолһа ла... Әлеге йырҙа артабан әйтмешләй: "Да, Жираф был не прав. Но виновен - не Жираф!.. А тот, кто крикнул из ветвей: "Жираф большой, ему - видней!" Бәғзеләр әле булһа аҡылға ултырып етмәне: яңы тормош ҡөтә башлаған балаларыбыҙҙың ғаиләһен һаҡлап алып ҡалыу урынына аҙ ғына бер сәбәп өсөн дә уларға "Айырыл да ҡайт!", йә "Айыр ҙа ебәр!" тигән кәңәш биреүсән...

"Улым - уллы, ҡыҙым-ҡыҙлы булмай белмәҫ" тигән әйтем дә бар халыҡта. Йәғни, үҙҙәре бала-саға үҫтереп, балалары балиғ булмай тороп, күптәрҙең барыбер тормош үҙенсәлектәрен тулыһынса аңлап етмәү ихтималлығы хаҡында һүҙ бара. Атайәсәйҙең үҙ ваҡытында иҫкәртеүенең балалары өсөн ниндәй ҙур әһәмиәткә эйә булыуына ла миҫал беләм. Элегерәк, оло йәштәрҙәге бер таныш ағай егет сағында ауылындағы һылыу йөҙлө, зифа буйлы бер йәш ҡыҙға ғашиҡ булғаны хаҡында хәтирәһе менән бүлешкәйне. Һылыуҡайға күҙ һалған башҡа егеттәр ҙә күп булған, әммә ҡыҙ был ағайҙы оҡшатҡан, күрәһең. Ә ҡыҙҙың ата-әсәһе бик ярлы, тапҡан-таянғанын хәмергә әйләндереп, эскелек менән булышып йәшәгән. Тик "мөхәббәткә иҫергән" егетте ҡыҙ үҫкән мөхиттең ниндәй булыуы бөтөнләйгә ҡыҙыҡһындырмаған... Йәштәрҙең үҙ-ара мөнәсәбәте инде "кульминацион нөктәгә" яҡынлашып килгән мәлдә егеттең ата-әсәһенә шул хаҡта хәбәр барып еткән. Ата-әсә улына: "Шул эскесе Фәләндең ҡыҙынан башҡа ҡыҙ бөткәнме һиңә? Беҙ быға риза булмаясаҡбыҙ", - тигән һымаҡ, ҡатыраҡ ҡына итеп әйтеп алған. Егет, бәхеткә күрә, был яҡындарының һүҙен тотҡан һәм әлеге һылыу ҡыҙҙан баш тартҡан. Ҡыҙ башҡаға тормошҡа сығып киткән, әммә, оҙаҡламай, айырылған... Ә егеткә ата-әсәһе икенсе ауылдан яҡшы ғаиләлә үҫкән бер ҡыҙҙы димләп, килен итеп алып биргән. Ҡартайғансы ана шул ҡатыны менән балалар, ейән-ейәнсәрҙәр үҫтереп, бәхетле ғүмер итеүе һәм шуға һис кенә лә үкенмәүе хаҡында һөйләгәйне әлеге ағай...

"Мөхәббәт" темаһына күпме генә әкиәттәр һөйләмәһендәр, боронғоса димләү ысулы менән ҡауышҡан ғаиләләр барыбер күпкә нығыраҡ була тимәксемен. Әле лә иртә өйләнергә ашыҡмай, тиҫтерҙәренең бер-бер артлы өйләнешеп-айырылышҡандарын бер талай "күҙәткәндән" һуң ғына, яҡындары аша танышып, бынамын тигән ғаилә төҙөгән шундай әллә нисә парҙы беләм. Шул уҡ ваҡытта, бер-береһен "өҙөлөп" һөйөп өйләнешкән әллә күпме парҙарҙың тарҡалғандары бихисап...

Ҡәҙерле туғандар, төшөнкөлөккә бирелергә лә ашыҡмайыҡ. Кемдер әйтмешләй, "поезд әле китмәгән". Йәшәйһе ғүмерҙәр алда. Был һүҙҙәрем башлыса бөгөнгө көндә малайҙар һәм ҡыҙҙар үҫтереп ятыусы йәштәребеҙгә ҡағыла. Киләсәктә улдарығыҙ "бисә айырып", ҡыҙҙарығыҙ "ирҙән айырылып" һеҙҙе ҡайғыртмаһын өсөн уларға бөгөндән ғаилә тормошо хаҡында нәсихәттәр уҡый башлау кәрәктер. Күп кенә зыялыларыбыҙ быны өсөн балаларҙы баштан уҡ ысын башҡорт рухында тәрбиәләп үҫтереү кәрәк тип һанай һәм шуға нык ҡына әһәмиәт бирә. Был - ифрат дөрөҫ, тигән фекерҙәмен мин дә. Әммә, минең ныҡлы инаныуымса, башҡортлоҡҡа ла бер яҡлы ғына ҡарау етмәй. Әгәр ҙә беҙ башҡорттоң телен, мәҙәниәтен һаҡлап ҡалыу хаҡында ғына һүҙ йөрөтөп тә, мең йылдан ашыу ата-бабаларыбыҙ тотоп килгән хаҡ динебеҙ тураһында онотабыҙ икән, беҙ, һис шикһеҙ яңылышасаҡбыҙ. Бөгөн дин юлында булған йәштәребеҙгә иғтибар иткәнегеҙ бармы? Ә бит уларҙың күпселеге - ныҡлы ғаилә төҙөй, һәр береһендә кәмендә өсәр бала. Фәҡирлектә лә йәшәмәйҙәр, эшләп, аҡса ла таба ғаилә башлығы. Динле халыҡҡа депопуляция тигән нәмә лә янамай, тимәксемен. Балаларын да мөмкин тиклем башҡорт мәктәбенә уҡырға бирә улар. Боронғо ата-бабаларыбыҙ үҙҙәренән һуң бөтөнләй дин тотмаған быуындар буласағын хатта күҙ алдына ла килтерә алмағандыр, моғайын. Динле булыуҙы йылына бер мәртәбә мулланан үлгәндәргә аят уҡытып, бит һыйпауҙан һәм шунда бер-береңә тинлектәр таратышыуҙан ғибәрәт, тип һанаусылар ғына ҡалып бара арабыҙҙа! Ғибәҙәт ҡылыуҙы бөтөнләй инҡар итеүселәр күпселек. Ауылдарҙа, ҡалаларҙа буш мәсеттәр һерәйешеп ултыра. Баҡсалағы түтәлгә күпме генә ашлама һалһаң да, һыу һипмәйенсә, бер ни ҙә үҫтереп алып булмай. Тап ана шуның һымаҡ, үҙебеҙҙең йөрәктәребеҙҙе иман менән һуғармай тороп, милләтебеҙҙе, телебеҙҙе, ғаиләләребеҙ нигеҙҙәрен дә бер нисек тә нығыта алмауыбыҙ бар. Ә боронғо динле ата-бабаларыбыҙҙың ғаиләләре ишле булған, шағирә Гүзәл Ситдиҡова әйтмәксе, "мөрйә һайын өрлөккә бишек, ҡайсаҡ хатта бер нисәү, тағылған...". Ҡатнаш никахтар ҙа көнүҙәк проблема булып тормаған.

Оҙон һүҙҙең ҡыҫҡаһы, ғаиләлә ата-әсәй һүҙен тыңлау мотлаҡлығы, шулай уҡ ир һәм ҡатындың урыны, уларҙың һәр береһенә хас вазифалары ла булыуы хаҡындағы Ҡөрьән аяттарын, Бәйғәмбәр с.ғ.с. хәҙистәрен белеп үҫергә тейеш балаларыбыҙ. Ә инде бөгөнгө көндөң "ирекле мөхәббәт" рухында тәрбиәләнеп үҫеп еткән, өҫтәүенә, динебеҙ ҡанундарын бөтөнләйгә белмәгән күпселек йәштәргә тота килеп: "Ғаилә төҙөү мәсьәләһендә ата-әсәңдең кәңәшен тыңла!" - тиеү, йомшаҡ ҡына итеп әйткәндә, елгә ҡаршы... борсаҡ һибеү һымағыраҡ.

Һүҙ аҙағында. Баяғы мәшһүр рус йырсыһының тел төбөнән бөтә илдә торған ғаилә проблемаһына ишараны аңлау ҡыйын түгел, шулай бит? Әммә, ысынбарлыҡта, әлеге януарҙарҙың ғаилә мәсьәләһенә килгән хәлдә, ундағы татыулыҡ, һәр кемдең үҙ урынын белеүе, тоҡом ҡалдырыуға, балаларҙы бағып үҫтереүгә ҡағылышлы вазифаһын үтәү - юғары кимәлдә бит, хатта бәғзе әҙәм балаһы көнләшерлек! Уйланырға урын бар бында.

**Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ.**

***✓ Туп-тура бар-бар ҙа, элекке эҙеңә кил дә сыҡ, имеш. Хикмәтле урманда шулай ҙа була икән! Баҡтиһәң, беҙ апаруҡ түңәрәк юл үтеп, кире үҙебеҙҙең юлға килеп сыҡҡанбыҙ.***



*ХИКМӘТЛЕ ХИКӘЙӘТ*

# УРМАНДА АҘАШЫУ



**Был хәл күптән булды инде. Уны ҡабат-ҡабат уйлайым да, моғайын да, тәбиғәт ваҡыты менән беҙҙе шаяртып алырға яраталыр, тигән уйға киләм.**

...Ҡышҡы урман буйлап саңғы менән дүрт кеше китеп барабыҙ. Сама менән ун саҡрым бергә барғас, беҙҙең юлдар айырыла. Алла бирһә, өсәүебеҙ һул яҡҡа боролоп, бер ауылға, ә берәүебеҙ бер аҙ ғына уңға тартып, үҙ ауылына юл алыр. Көндө әйтәм, иртәнсәк кенә тыныс ине. Бына әле яйлап ҡына ҡар яуа башланы. Айырылыу урынына барып еткәндә ҡары ла, еле лә апаруҡ көсәйә төшә. Ваҡыт та апаруҡ булып киткән икән шул. Ҡышҡы көндө әйтәм, бигерәк ҡыҫҡа. Әле генә таң ата, күп тә үтмәй кис тә була. Ни бары дүрт-биш сәғәттән күҙ ҙә бәйләнәсәк. Ҡара иҫәп буйынса беҙ эңерләтеп кенә тәғәйен ауылға барып инергә тейешбеҙ. Насип итһә инде. Ярай әле беҙ өсәү, тип уйлап ҡуям мин. Ә бына теге яңғыҙ, ул-был хәл була ҡалһа, нимә эшләр икән. Йә саңғыһы һыныр (Аллам һаҡлаһын инде), йә бүре килеп сығыр (быныһынан ла Аллам һаҡлаһын инде). Аптырағас, ошолай кәңәш бирәм.

- Әйҙә, дүртәүләп бергә китәйек, ә һин иртәгә көндөҙ ҡайтырһың. - Яңғыҙ китәсәк саңғысы миңә бер килке ҡарап тора һәм әйтә ҡуя:

- Аҙаҡ, урмандан ҡайта алмаған, тигән "данды" нисек күтәрмәк кәрәк!

Уныһы шулай инде. Бәләкәй саҡтан урманды гиҙеп йөрөгән кешегә был хәл килешеп етеңкерәмәй шул. Тик әлеге лә баяғы ҡарҙың көсәйә төшөүе, көндөң эңергә табан тартыуы күңелгә бер аҙ шик һала. Ярай, мәйтәм, барыһы ла, моғайын, имен-аман булыр. Айырылышыу урынында бер аҙ һөйләшеп торабыҙ. Шунан яңғыҙ саңғысы әйтә ҡуя:

- Урмандың был урыны хикмәтле икәнен яҡшы беләһегеҙ.

Ниндәй хикмәт тураһында һүҙ баралыр инде. Быны белгән юҡ. Шул арала тегеләр көлөшә-көлөшә бер нисә ҡыҙыҡ хәлде иҫкә алалар.

- Ай-һай, ваҡытында был төпкөлдә ниндәй генә атаҡлы урмансы аҙашманы инде. Улар тураһындағы хәлде һаман лаҡап итеп һөйләйҙәр...

Бына эш нимәлә икән. Тимәк, беҙ бушҡа ғына бер яҡҡа өсәү китмәйбеҙ. Яңғыҙ саңғысы киткән яҡ күпкә тыныс, ә бына беҙҙең яҡ... Яңғыҙ саңғысының алыҫлашып барған арҡаһына бер килке ҡарап торам да эстән генә бисмиллаларҙы әйтеп, хикмәтле урман яғына юл алам. Бер аҙҙан теге икәүҙе ҡыуып етәм. Дөрөҫөрәге, улар мине көтөп тора. Шунан алда барыусы әйтә ҡуя:

- Ысынлап та, ваҡыты менән урмандың был төпкөлөндә күптәр аҙашып йөрөгәйне. Ә мин бындағы ер-һыуҙы һәйбәт беләм.

Ҡурҡмаһаң да була, тигәнде аңлатты, буғай. Ярай, мәйтәм, имен-аман ауылға алып барып еткерә алһаң, рәхмәттән башҡа һүҙ юҡ һиңә. Шул арала күңелгә апаруҡ борсоу һалып, ҡар күпкә көсәйә төшә. Тора-бара күҙ ҙә бәйләнә башланы. Мин хәҙер тегеләрҙең арҡаларын ара-тирә генә күреп барам. Урман ялан түгел шул. Тигеҙлек юҡ бында. Тау ҙа таш, соҡор ҙа саҡыр, йырын да мырын. Етмәһә, йығылған ағастар күп. Урыны менән тау аҫтына шыуып китәбеҙ. Урыны менән кире тауға үрмәләйбеҙ. Минең сама буйынса сәғәт-сәғәт ярымдан ауылға ла барып инергә тейешбеҙ.

Бер мәл мин бер аҙ артта тороп ҡалам. Тегеләргә рәхмәт инде. Ярай әле, көтөп торалар. Мин барып етәм. Әммә улар ҡуҙғалырға ашыҡмай. Нимә булды икән? Аптырап, уларҙың алдына сығам. Һәм аптырап ҡалам. Сөнки беҙҙең алда ярылып... саңғы эҙе ята! Бына һиңә - мә! Кем йөрөнө икән? Был саңғысы әле генә үткәнгә оҡшай. Сөнки яуған ҡар уны йүнләп ҡаплап та өлгөрмәгән. Аптырамалы хәл булды бит әле. Уйлап ҡараһаң, был ваҡытта урмандың был төпкөлөндә беҙҙән башҡа берәү ҙә йөрөмәй бит! Баштан төрлө уйҙар уйҙар үтеп китә. Ысынлап та, беҙҙән башҡа... Әллә беҙ кире... Юҡ, булмаҫтыр... Әммә минең уйҙы дөрөҫләп, "Сусанин" әйтә ҡуя.

- Беҙ кире үҙебеҙҙең эҙгә килеп сыҡҡанбыҙ!

Күптәр, моғайын, Сусанин тарихы менән таныштыр. Иван Сусанин - ул илебеҙҙең милли геройы. Ваҡытында ул илбаҫарҙы урманда аҙаштырған. Һөҙөмтәлә батшаны һәм уның ғаиләһен оло фажиғәнән ҡотҡарған. Ә бына беҙгә аҙашыу кәрәкмәй. Беҙгә ҡайтырға кәрәк. Унда беҙҙе ғаилә көтә.

Ә шулай ҙа беҙҙең хәл нисек улай килеп сыҡты әле ул? Туп-тура бар-бар ҙа, элекке эҙеңә кил дә сыҡ, имеш. Хикмәтле урманда шулай ҙа була икән! Баҡтиһәң, беҙ апаруҡ түңәрәк юл үтеп, кире үҙебеҙҙең юлға килеп сыҡҡанбыҙ. Шул арала тегеләр үҙ-ара һөйләшәләр, кәңәшләшәләр, килеп тыуған хәлде асыҡлайҙар. Әгәр уларҙың әйткәне раҫ булһа, беҙ фәлән урында был һырттан түгел, ә теге һырттан киткәнбеҙ. Шуға яңылышҡанбыҙ. Ә хәҙер шулай-шулай тартып барһаҡ, шул урынға барып сығабыҙ. Ә унан ауылға ла күп тә ҡалмай.

Тағы ҡуҙғалып китәбеҙ. Хәҙер урмандың был төпкөлөн биш бармағы һымаҡ белгән "Сусанин" уртала бара. Алда барғанды әйтәм. Уныһы, исмаһам, Сусаниндың берәй туғаны булмаһа ярар ине. Сыбыҡ осо туғанлығы ла кәрәкмәй. Шул арала апаруҡ ара үтәбеҙ. Мәйтәм, миңә генә алға торорға тура килмәһен берүк. Бына тормош ошо яғы менән ҡыҙыҡ та инде. Шаяртып ҡына уйлаған уй саҡ тормошҡа ашманы бит, әй! Алға күҙ һалһам, тегеләр тағы мине көтөп тора. Тағы саңғы эҙе булмаһа ярар ине, тип барып еткәйнем... Аллаға шөкөр, беҙҙең алда тағы саңғы эҙе ята! Әммә миндә хәҙер ярһыу-тетрәнеү юҡ. Шулай булырға тейеш һымаҡ ҡабул итәм. Сөнки арытылған. Апаруҡ хәлдән тайылған. Етмәһә, һыуһаттырған. Хатта теге икәүҙең һөйләшкәненә бер аҙ битарафмын. Улар бер аҙ кәңәшләшкәндән һуң дөйөм фекергә килә.

- Был эҙ беҙҙеке түгел!

Ә кемдеке һуң? - был өнһөҙ һорау, әлбиттә, һауала эленеп ҡала.

- Был эҙ теге яңғыҙҙыҡы!

Көләмһерәп ҡуям. Шаярталар, мәйтәм. Улай була ҡалһа, теге яңғыҙ саңғысы төптө кире яҡҡа китеп бара ла инде! Урманды гиҙеп йөрөгән кеше улай уҡ яңылыша алмайҙыр инде. Ярай, беҙ ниндәйҙер түңәрәк яһағанбыҙ. Ә был бит туп-тура тап кире яҡҡа китеп бара! Юҡтыр, булмаҫ, тип уйлап ҡуям мин. Шулай ҙа теге икәүҙең һөйләшкәненә ҡолаҡ һалам.

- Хәҙер ул күп тә бармай, фәлән уяға барып етәсәк. Һәм шул уя буйлап китәсәк. Ә уның башында йыуа-а-а-ан, бейе-е-е-ек ялбыр ҡарағай ултыра. Ул шул ҡарағайға барып етәсәк һәм уны таныясаҡ. Үҙенең яңылышҡанын шунда ғына аңлаясаҡ. Һәм кире боролласаҡ. Моғайын, ул килгән юлынан әҙерәк кенә өҫкә тартып, фәлән һырт буйлап китер. Шулай итә ҡалһа, ул фәлән урынға килеп сығасаҡ. Беҙ хәҙер шул урынға барайыҡ. Һәм сәй ҡайнатып, уны көтөп торайыҡ.

Тағы ҡуҙғалып китәбеҙ. Теге "яңғыҙ Сусанинға" сәй ҡайнатып ҡуйырға кәрәк бит. Шул арала тәғәйен ергә имен-аман барып етәбеҙ. Шишмә боҙон балта менән уйып, кәтелүккә сәй ҡуйып ебәрәбеҙ. Шул арала тау һыртынан... көлә-көлә "яңғыҙ Сусанин" өйөп килеп төшә. "Усаҡтағы утығыҙҙы күреп ҡалдым", ти. Күмәкләшеп сәй эсеп алабыҙ. Аңғармай йөрөһәң, хикмәтле урман шулай аҙаштыра ул, тип үҙ-ара көлөшәләр. Шулай шул, тип улар ыңғайына мин дә көлгән булам. Хәҙер имен-аман ҡайтып етәбеҙ, урмандың был яғы тыныс, тип тегеләр ҡыуана. Шулай шул, тип улар ыңғайына мин дә ҡыуанған булам. Шул арала ҡар яуыуынан туҡтай. Бер аҙ һыуыта төшә. Күк йөҙөндә йондоҙҙар емелдәшә башлай. Ҡараңғы урман күпкә яҡтыра бара.

Тағы ҡуҙғалып китәбеҙ. Ике-өс саҡрымдай ара барып өлгөрмәйбеҙ, "яңғыҙ Сусанин" беҙҙән айырылып, ҡараңғылыҡҡа инеп юғала. Үҙ ауылына ҡайтып китте ул. Өндәшеп торманым уға. Сөнки уның ошолай әйтере билдәле ине.

- Аҙаҡ, урмандан ҡайта алмаған, тигән "данды" нисек күтәрмәк кәрәк!

Ярай, үҙе әйтмешләй, урмандың был яғы хикмәтле түгел. Моғайын, имен-аман ҡайтып етәр. Уға хәҙер текә тауға үрмәләйһе лә һырт буйлап ҡына китәһе. Бары шул ғына. Ун-ун ике саҡрым араны, үҙе әйтмешләй, һә, тигәнсе үтәсәк. Һәм ҡайтып етәсәк.

Ҡалған юл мажараһыҙ үтте. Төн уртаһында ауылға барып индек. Аллаға шөкөр, ярай әле барыбыҙ ҙа имен-аман ҡайтып еттек, тип уйлап ҡуям мин. Теге аҙашыу барыбер минең өсөн сер булып ҡалды. Әллә урмансылар шулай яңылышты, әллә хикмәтле урман шулай шаяртты. Быныһын хәҙер кем белһен инде.

**Һөйләүсенән**
**Әғләм ШӘРИПОВ**
**яҙып алды.**

*ПАРСАЛАР*

## Уҡытыусы

Кем ул уҡытыусы? Ул беҙгә "А" хәрефен өйрәтеүсе, йәки ике икең дүрт икәнлекте аңлатыусы ғына түгел. Был тормошта беҙ бихисап уҡытыусылар менән осрашабыҙ. Һәр бер ваҡиға, ишеткән яңылыҡ, уҡыған китап, ҡараған фильм беҙҙе нимәгәлер өйрәтергә, ниндәйҙер мәғлүмәт бирергә һәләтле. Бер олоно, бер кесене тыңла, тигәндәй, үҙеңдән бәләкәйҙәр ҙә һиңә ниндәйҙер аҡыл биреп ҡуйыуы мөмкин.

Беҙ ғүмер буйы уҡыйбыҙ, ғүмер буйы камиллашабыҙ. Беҙҙе уратып алған тәбиғәт, ҡоштар, хайуандар донъяһы, хатта өнһөҙ ятҡан әйберҙәр ҙә беҙгә өҙлөкһөҙ һабаҡ бирә. Тик уҡытыусыңды һиҙә һәм аңлай белергә, уның һабаҡтарын ҡабул итергә әҙер булырға кәрәк. Шул ваҡытта ғына беҙ был донъяның ғәжәйеп матурлығын күрә, уның мәңгелек серҙәрен төшөнә, уны һаҡлау зарурлығы кәрәклеген аңлай башларбыҙ.

## Хаяһыҙ булмаһындар

Янауыл ҡалаһында 2001 йылда башлап яҙыусылар семинарында Башҡортостан яҙыусылар союзы рәйесе, халыҡ шағиры Рауил Бикбаев ағай Мәҙинә (Йәғәфәрова) менән минең бүлмәгә инеп, икебеҙгә лә республикалағы шағир-яҙыусыларҙың телефон номерҙары яҙылған матур йәшел тышлы китапсыҡтар биреп сыҡты. Бындай китапсыҡтарҙы ағайыбыҙ семинарҙа ҡатнашыусыларҙың барыһына ла биреп йөрөгән икән. Тик баяғылар араһында ябай ҡағыҙ тышлылары ла булған. Беҙҙәген күреп, бер ҡыҙ Рауил ағайҙың бүлмәһенә инеп, миңә лә шундайҙы бирегеҙ, тип һорап йөрөгән. Иртәгеһенә сираттағы ҡулъяҙманы тикшереүҙе башлар алдынан Р. Бикбаев кисәге ваҡиғаға бәйләп: "Башҡорт ҡыҙҙары сая ла булһын, ләкин хаяһыҙ булмаһындар ине", - тип ҡуйҙы.

Был һүҙҙе мин тәүгә ишетһәм дә, ғүмергә онотолмаҫлыҡ булды.

## Сәбә-ка

Ҡайһы бер һүҙҙәр, саҡ ҡына үҙгәрә биреп, икенсе телгә күсә, ул телдең һүҙ байлығын арттырыуға булышлыҡ итә. Беҙҙең телебеҙҙәге күп һүҙҙәр ғәрәп - фарсы, төрки, урыҫ һәм башҡа телдәрҙән ингән. Шул уҡ ваҡытта төрки телдәрендәге ҡайһы бер һүҙҙәр урыҫ телен байыта.

Мин үҙем урыҫ телендәге "собака" тигән һүҙ тураһында уйланғаным бар. Беҙ этте, ғәҙәттә "сәбә!" тип ҡыуабыҙ. Урыҫ үҙенең "-ка" өлөшсәһен ҡушып, үҙләштереп алманы микән был һүҙҙе? Бәлки, ул да этте иң беренсе "сәбә - ка!" тип ҡыуғандыр?

**Мәрйәм СӘЛМӘНОВА.**
**Әбйәлил районы.**
**(Дауамы бар).**

*✓ Һәр эштә кәңәш ит, изгелеккә өндә, тиҙәр халыҡта. Тарих төпкөлөнә күҙ һалһаҡ та, иң тәүҙә ҡәүем аҡылын сағылдырыусы кешеләр - Ағинәй менән Аҡһаҡал тураһында телгә алына. "Урал батыр" эпосында ла улар хаҡында һүҙ бара.*



ИНТЕРНЕТТАН



# ИҢ ФАЙҘАЛЫҺЫ

Донъяла бик абруйлы һаналған Forbes журналы эксперттары иң файҙалы аҙыҡ-түлек исемлеген төҙөгән. Организм өсөн иң кәрәкле аҙыҡ итеп ҡурай еләге, көртмәле һәм ер еләге табылған. Еләктәрҙә май юҡ, улар витаминдарға, антиоксиданттарға бай. Был продукттар иммунитетты нығыта һәм яман шештәрҙе булдырмай. Икенсе урында сәтләүектәр һәм ҡуҙаҡлылар тора. Артабан баш мейеһенә, йөрәк эшмәкәрлегенә яҡшы тәьҫир иткән балыҡ тора. Брокколи һәм пекин кәбеҫтәһе организмдан токсиндарҙы сығара, һарымһаҡ менән һуған иммунитетты күтәрә.

■ Компьютер һәм төрлө күнегеүҙәр оло йәштәге кешеләрҙә йыш осраған хәтер насарайыу хәүефен 75 процентҡа кәметә. Аризоналағы Майо клиникаһы медиктары үткәргән тикшеренеүҙәрҙә 70-93 йәштәге ҡатын-ҡыҙҙар һәм ир-аттар ҡатнаша. Анкетаға уларҙың һуңғы йылдарҙағы йәшәү рәүешен сағылдырыусы һорауҙар ҙа инә. Тиҙ атлап йөрөү, йәйәүле туризм, аэробика, кәс талап ителә торған күнегеүҙәр, гольф уйнау, йөҙөү, теннис, йога, һуғыш сәнғәте һәм ауыр атлетика кеүек спорт төрҙәре менән шөғөлләнеүселәрҙең хәтере күпкә яҡшыраҡ булыуы асыҡлана. Шулай уҡ ҡарттарҙың заман технологиялары ҡаҙаныштары, анығыраҡ әйткәндә, компьютер менән ҡулланыуы ла хәтер функцияһының түбәнәйеүенә юл ҡуймай икән. Һорау алыуҙа 1000 оло кеше ҡатнашҡан. Компьютер менән ҡулланмаусы ҡарттарҙың 20,1 процентының хәтере нормаль тип табылған, 37,6 процентында енел формалағы хәтер насарайыуы күҙәтелгән. Ә компьютер ҡулланыусы һәм даими рәүештә күнегеүҙәр яһаусыларҙа был айырма 36 процентҡа 18,3 процент тәшкил иткән.

■ Японияның Тояма университеты ғалимдары мунса менән саунаның йөрәк-ҡан тамырҙары системаһына ғына түгел, кешенең кәйефенә лә яҡшы йоғонто яһауын асыҡлаған. Британияның New Scientist журналында баҫылған тикшеренеү һөҙөмтәләренән күренеүенсә, аҙнаһына 5 тапҡыр 15 минутлап мунсаға йәки саунаға барыу йөрәк һәм ҡан тамырҙарын нығыта. Бындай терапия йөрәктең ҡан ҡыуыу һәләтен яҡшырта, кеше физик көсөргәнешкә сыҙай башлай. Өҫтәмә тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, тән температураһы күтәрелеү һөҙөмтәһендә баш мейеһенең нейрондары эшмәкәрлеге әүҙемләшә, ул "бәхет гормоны" серотонин бүленеүе өсөн яуаплы. Тимәк, мунса яратыусыларҙың кәйефе яҡшы була, үҙҙәрен яҡшыраҡ тоя, уларҙың үҙ-үҙенә ҡуйған баһаһы юғарыраҡ була. Мунса тын алыу юлдары ауырыуҙары ваҡытында ла файҙалы, иммунитетты ла нығыта, тирене таҙарта, ябығырға булышлыҡ итә.

■ АҠШ белгестәре аллергияның яңы төрөн теркәгән. Wi-Fi үткәргесһеҙ селтәргә булған аллергия билдәләре башҡа аллергия төрҙәренән бер нәмәһе менән дә айырылмай. Уны икенсе төрлө электромагнит тулҡындарына артыҡ һиҙгерлек (Electromagnetic hypersensitivity) тип йөрөтәләр. Баш ауыртыуы, быуындар һыҙлауы, күҙҙәрҙең ҡороуы йәки йәшләнеүе, тамаҡ ҡымырйыуы - ошо билдәләр менән табиптарға мөрәжәғәт итеүселәр арта бара. Улар менән һөйләшкәндән һуң, ауырыуҙарҙың Wi-Fi зонаһында күп ваҡыт уҙғарыуы асыҡланған. Бында барыһы ла был үткәргесһеҙ селтәрҙең микротулҡынлы мейес менән бер тулҡында эшләүе сәбәпсе. Заман технологияларының зыянлы тәьҫиренән һаҡланыу өсөн табиптар йышыраҡ тәбиғәткә сығырға кәңәш итә.

АҒИНӘЙ МӘКТӘБЕ

**Ағинәй - ул иманлы әсәй, өләсәй, донъя тотҡаһы вазифаһын тергеҙеүгә ең һыҙғаныусы. Ағинәй - ул йәшәйешебеҙҙе ысын асылына ҡайтарыуға өндәүсе. Ағинәй - ул халҡыбыҙҙың тәрбиә мәктәбе һабаҡтарына йөҙ бороусы. Ағинәй - ул халҡымдың киләсәге булһын тип янып йөрөүсе. Ағинәй - ул милләтебеҙҙең рухи таяныс, йолаларға йән өрөүсе. Баймаҡ районы "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы ағзаларының ауылдарҙа үткән йыйындарында ҡатнашып, уларҙың һөйләгәндәрен тыңлап, быға саҡлы ла уларҙың сараларын, эштәрен күҙәтеп, ошондайыраҡ тулы булмаған һығымталар яһаным. Тулыраҡ ғәмәлдәрҙә Иҫке Сибай, Әбделкәрим, Сыңғыҙ һәм Күгиҙел ауылдарында райондың ҡырҡлап ауылы ағинәйҙәре ҡатнашлығындағы йыйындарҙа ҡатнашыусылар - республика "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы рәйесе Гөлфиә Янбаева, район ойошмаһы етәксеһе Гүзәл Монасипова, шулай уҡ "Ир-егеттәр ҡоро" ағзалары барланы.**

# БӨГӨНГӨНӨ ҮТКӘНГӘ ЯЛҒАП,

## киләсәккә күпер һалыусылар

Шишмә тау-таштар араһынан юл табып, сылтырап аҡҡан кеүек, халҡыбыҙҙың хазинаһын тергеҙеү, һаҡлау һәм киләсәк быуынға тапшырыу саралары ла бихисап. Күп осраҡта был бурысты атҡарыу бөгөн ағинәйҙәр иңенә ҡайтып ҡала. Был юлы инә район ағинәйҙәре ошо яуаплы йөктө урындағы ир-егеттәр вәкилдәре менән дә уртаҡлашыу буйынса кәңәш ҡорҙо. Аҡыл менән аҡыл осрашты. Милләт бишеге булған тыуған төйәгебеҙҙең бөтөнләгән, ҡотон, рухиәтен, йолаларын, халыҡ кәсептәрен, йәшәйеш ҡағиҙәләрен, туған телебеҙҙе, моңобоҙҙо артабан да һаҡлау өсөн бергә тупланып эшләү кәрәклеге белдерелде. Тәненең һәр бер күҙәнәгендә, быуынында, ҡанында, аңында, рухында ағинәйлек һәм аҡһаҡаллыҡ һыҙаттары булған һәр кемдең изге был эшкә ҡушыла алыуы һыҙыҡ өҫтөнә алынды.

- Белеүегеҙсә, беҙҙең районың "Ағинәй" йәмәғәтселеге бөгөн һәр тарафта, төрлө йәштәге ҡатын-ҡыҙҙар менән дә, балалар менән дә берҙәй эш алып бара. Район хакимиәте, ауыл биләмәләре башлыҡтары, китапханасылар, мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәре беҙгә туранан-тура ярҙам итә, бер сара ла ағинәйҙәрһеҙ үтмәй, - тип һөйләне Гүзәл Миҙхәт ҡыҙы. - Бөгөн ауыл биләмәләрендә ир-егеттәргә, аҡһаҡалдарға таяныу, уларҙы берлектәге эшкә йәлеп итеү бурысы ҡуйыла. Улар өсөн генә тәғәйенләнгән йолалар, халыҡ кәсептәре иҫкә төшөрөлә...



Ысынлап та, һәр осрашыуҙа ир-егеттәр ҙә ҡатнашыуы, үҙ тәҡдимдәре, фекерҙәре менән сығыш яһауы ошо фекерҙе йөпләне лә инде. "Һәр эштә кәңәш ит, изгелеккә өндә, тиҙәр халыҡта, - тип башлап китте сығышын Ярат ауылының имамы Мөхтәр хәҙрәт Монасипов. - Тарих төпкөлөнә күҙ һалһаҡ та, иң тәүҙә ҡәүем аҡылын сағылдырыусы кешеләр - Ағинәй менән Аҡһаҡал тураһында телгә алына. "Урал батыр" эпосында ла улар хаҡында һүҙ бара. Һәр заманда ла Ағинәй менән Аҡһаҡал рух һәм милләт тәрбиәсеһе булған. Бер маҡсат тотоп йәшәгәндәр. Әхмәр Үтәбаев үҙенең "Буранбай" тигән шиғырында: "Кұҙғалығыҙ, тип әйтһәк, мин беләм, бер кем дә ҡуҙғалмаясаҡ. Халҡым ҡуҙғалһын өсөн үҙемә ҡуҙғалырға кәрәк", - тигән юлдар бар. Дин ғалимы Йәләлитдин Руми ҙа: "Шәм булып тирә-яҡты яҡтыртыр өсөн үҙеңә янырға кәрәк", - ти. Күрәһегеҙ, ике заманда тыуған яҙыусының ораны ауаздаш. Бөгөн һеҙ, ағинәйҙәр, майҙанға йыйылғанһығыҙ. Әгәр ҙә һеҙҙең күңелегеҙ изгелек менән тулы булмаһа, һеҙ алға бара алмаясаҡһығыҙ. Рәйес Түләктең "Сәхнәнән төшкәс сисеп ырғытылған кейем кеүек булмағыҙ", тигән һүҙҙәрендә ниндәй тәрән мәғәнә ятыуын аңлағыҙ. Ағинәйҙәр менән аҡһаҡалдар бергә эшләүҙе дауам итәйек. Бөгөн беҙ халҡыбыҙҙы милләт булараҡ тәрбиәләргә, рухи байлығыбыҙ, телебеҙ, йолаларыбыҙ, ғөрөф-ғәҙәттәребеҙҙе тергеҙергә һәм үҫеп килгән быуынға түкмәй-сәсмәй генә тапшырырға тейешбеҙ. Элек ошо һанап кителгән бурыстарҙы ир-егеттәр башҡарған бит. Хәҙер инә уларҙың күбеһе ҡатын-ҡыҙҙар иңенә һалынған..."

ҠУЛ БЕЛГӘН ШӨҒӨЛ

# ҠАҘ ҮРСЕТЕҮҘЕҢ ДӘ...

## үҙ сере бар шул



**Тажзәхмәт таралыу сәбәпле, былтыр бер ҡайҙа сығып йөрөмәнем. Нимә кәрәк, шуны балалар алып килеп торҙо. Килен дә, бер кемгә барма, бер кемде индермә, тип, мәтрилап кенә торғас, бер йыл буйы тигәндәй донъя менән бәйләнешем урам яҡ тәҙрә аша ғына булды.**

Күптән түгел балалар күрше ауылға әхирәтемә алып барып килде. Көн оҙоно йәш саҡтарҙы иҫкә төшөрөп ултырҙыҡ. Бик матур йәшәй ул, килене һәм улы менән көн итә. Әммә балалыҡ дуҫым һөйләшкән арала хәҙерге тормошҡа зарланып та алды. Юҡ, замандың ауырлығына, элекке рухи ҡиммәттәрҙең юғала барыуына түгел, ә йәш быуындың ололар һүҙенә, кәңәштәренә ҡолаҡ һалмауына борсолдо.

"Элек ҡаҙҙы ла, өйрәкте лә үҙебеҙ баҫтырып, көтөп үҫтерә торғайныҡ. Хәҙер һатып алалар ҙа, ҡураға бикләйҙәр ҙә, шунан ҡош-ҡорт аҫрайбыҙ, тигән булалар. Инкубаторҙан һатып алған ҡаҙ-өйрәктең ите үҙең баҫтырғандыҡына етәме ни инде? Йыл һайын әйтәм, йорт ҡаҙы табып, үҙебеҙ үрсетәйек, үҙем көтөрмөн, тием. Юҡ, килтереп һатҡандарын көтөп ултыралар инде шунда", - тине ул.

Эйе, беҙҙең заманда һәр йортта тиерлек үҙҙәре себеш баҫтыртып сығара торғайнылар. Үҙенә күрә күңелле шөғөл ине ул. Күрше-тирә кәңәшләшеп, кәрәк булһа, йөмортҡаларын алмашып, бүлешеп йәки "ҡул арты китә" тигән ырымға ышанғандар үҙҙәре баҫтыртып сығарып бирә торғайны.

Эйе, беҙҙең заман эшләп үҫте, тырышып донъя көттө. Картуф баҡсаһы ла әлеге кеүек ус аяһындай түгел ине, колхоз сөгөлдөрөн дә гектарлап алып утаныҡ. Ырҙынға иген елгәрергә лә ҙур теләк менән йөрөнөк. Унда күңелле лә булды, эшкә лә өйрәндек, аҙ ғына булһа ла аҡсаһы ла була торғайны.

Бөгөнгө балаларҙың күбеһе сөгөлдөр утауҙың нимә икәнен дә белмәй. Һуңғы бер нисә йыл инде сүп үләненән ҡотолоу өсөн баҫыуға гербицид һибәләр. Өҫтәүенә, сөгөлдөрҙә лә хәҙер сәсеп бармайҙар, сөнки илебеҙҙәге шәкәр заводтарының күбеһе шәхси ҡулдарға күсте һәм... ябылып бөттө. Хәҙер шәкәр ҡомон күбеһенсә сит тарафтарҙан ташыйҙар. Заманында бөтә Советтар Союзына гөрләп торған күрше Мәләүез шәкәр заводы ябылыуға ла байтаҡ ваҡыт уҙҙы.



### 6 ИЮНЯ ПОНЕДЕЛЬНИК

**РОССИЯ 1**

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
21.20 Т/с "Елизавета". [16+]
22.20 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.00, 1.50 Т/с "Земский доктор. Любовь вопреки". [12+]
2.45, 3.30 Т/с "По горячим следам". [16+]

**БСТ**

7.00 "Сәләм".
10.00, 16.30 Т/с "Бабье лето". [16+]
11.00 Новости недели (на рус.яз).
11.45 Специальный репортаж. [12+]
12.00, 5.30 Счастливый час. [12+]
13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).
13.30, 1.45 Бәхетнамә. [12+]
14.30 "Бай". [12+]
15.00, 18.15, 20.30 Интервью.
15.15 Әлләсе... [12+]
16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).
16.15 "Гора новостей". [6+]
17.30, 20.45, 4.30 История одного села. [12+]
17.45 Ради добра. [12+]
18.00 Пофутболим? [12+]
19.00 Вечерний телецентр.
20.00 Полезные новости. [12+]
20.15 "Сәңгелдәк". [0+]
21.00 "Елкән". [6+]
22.00 Тайм-аут. [12+]
23.00, 4.00 Күстәнәс. [12+]
23.30 Х/ф "Хармс". [16+]
2.30 Спектакль "Море мечты". [12+]
4.45 Честно говоря. [12+]

### 7 ИЮНЯ ВТОРНИК

**РОССИЯ 1**

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
21.20 Т/с "Елизавета". [16+]
22.20 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.00, 1.50 Т/с "Земский доктор. Любовь вопреки". [12+]
2.45, 3.30 Т/с "По горячим следам". [16+]

**БСТ**

7.00 "Сәләм".
10.00, 16.30 Т/с "Бабье лето". [16+]
11.00, 16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).
11.15 Республика LIVE #дома. [12+]
11.45 Дорожный патруль. [16+]
12.00, 5.30 Счастливый час. [12+]
13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).
13.30, 2.15 Бәхетнамә. [12+]
14.30 Хазина. [0+]
15.00, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]
15.15 Брифинг Министерства здравоохранения РБ по коронавирусу.
15.30 "КультУра". [6+]
15.45 Бишек. Колыбельные моего народа. [6+]
16.15 "Гора новостей". [6+]
17.30 "Дорога к храму". [0+]
18.00 "Криминальный спектр". [16+]
19.00 Вечерний телецентр.
20.00 Полезные новости. [12+]
20.15 "Сәңгелдәк". [0+]
20.45 История одного села. [12+]
21.00 Нык бул. [6+]
22.00 "100 имен Башкортостана". [12+]
23.00 Колесо времени. [12+]
0.00 Х/ф "Закрой глаза". [16+]
3.00 Спектакль "Наш одуванчик". [12+]
5.00 Автограф. [12+]

### 8 ИЮНЯ СРЕДА

**РОССИЯ 1**

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
21.20 Т/с "Елизавета". [16+]
22.20 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.00, 1.50 Т/с "Земский доктор. Любовь вопреки". [12+]
2.45, 3.30 Т/с "По горячим следам". [16+]

**БСТ**

7.00 "Сәләм".
10.00, 16.30 Т/с "Бабье лето". [16+]
11.00, 16.00, 21.30 Новости (на рус. яз).
11.15 Республика LIVE #дома. [12+]
11.45 "Криминальный спектр". [16+]
12.00, 5.30 Счастливый час. [12+]
13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).
13.30, 2.15 Бәхетнамә. [12+]
14.30, 5.00 Тормош. [12+]
15.00, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]
15.15 "Апчхи". [0+]
15.30 "Сулпылар". [6+]
16.15 "Гора новостей". [6+]
17.30 Тайм-аут. [12+]
18.00 Дорожный патруль. [16+]
19.00 Вечерний телецентр.
20.00 Полезные новости. [12+]
20.15 "Сәңгелдәк". [0+]
20.45 "Честно говоря". [12+]
22.00 Историческая среда. [12+]
23.00 "Байык-2022". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]
0.00 Х/ф "Невеста моего друга". [16+]
3.00 Спектакль "Ой, кто там лежит?" [12+]
6.30 Новости (на рус. яз). [0+]

### 9 ИЮНЯ ЧЕТВЕРГ

**РОССИЯ 1**

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
21.20 Т/с "Елизавета". [16+]
22.20 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.00, 1.50 Т/с "Земский доктор. Любовь вопреки". [12+]
2.45, 3.30 Т/с "По горячим следам". [16+]

**БСТ**

7.00 "Сәләм".
10.00, 16.30 Т/с "Бабье лето". [16+]
11.00, 16.00, 21.30 Новости (на рус. яз).
11.15 "Честно говоря". [12+]
12.00, 5.30 Счастливый час. [12+]
13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).
13.30, 2.15 Бәхетнамә. [12+]
14.30 Бай баҡса. [12+]
15.00, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]
15.15 Бирешмә. Профи. [6+]
16.15 "Гора новостей". [6+]
17.30 Моя планета Башкортостан. [12+]
18.00 "Криминальный спектр". [16+]
19.00 Вечерний телецентр.
20.00 Полезные новости. [12+]
20.15 "Сәңгелдәк". [0+]
20.45, 23.45, 4.45 История одного села. [12+]
21.00 Башкорттар. [6+]
22.00 Республика LIVE #дома. [12+]
23.00 Ап-асыҡ. [12+]
0.00 Х/ф "Любовь без правил". [16+]
3.00 Спектакль "Операция". [12+]
5.00 Үткән гүмер. [12+]
6.30 Новости (на рус. яз). [0+]

### 10 ИЮНЯ ПЯТНИЦА

**РОССИЯ 1**

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
21.20 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
0.00 Х/ф "Долгое прощание". [12+]
2.00 Х/ф "Семья маньяка Беляева". [12+]

**БСТ**

7.00 "Сәләм".
10.00, 16.30 Д/с "Большой скачок". [12+]
11.00, 16.00, 21.30 Новости (на рус. яз).
11.15, 21.00 "Йома". [0+]
11.45 "Криминальный спектр". [16+]
12.00 Республика LIVE #дома. [12+]
12.30 Үткән гүмер. [12+]
13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).
13.30, 23.00 Автограф. [12+]
14.00 БашГост. [6+]
14.30 Моя планета Башкортостан. [12+]
15.00, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]
15.15 "Алтын тирмә". [0+]
16.15 "Гора новостей". [6+]
17.30 "Аль-Фатиха". [12+]
18.00 Дорожный патруль. [16+]
19.00 "Башҡорт йыры-2022". Телевизионный конкурс среди профессиональных исполнителей башкирской песни. [12+]
19.45 Специальный репортаж. [12+]
20.00 Полезные новости. [12+]
20.15 "Сәңгелдәк". [0+]
20.45 История одного села. [12+]
22.00 БашГост. [12+]
23.30, 3.30 Х/ф "Домик в сердце". [12+]
1.30 Спектакль "Гильмияза". [12+]
5.00 Тормош. [12+]
5.30 "Млечный путь". [12+]
6.30 Новости (на рус. яз). [0+]

### 11 ИЮНЯ СУББОТА

**РОССИЯ 1**

5.00 Утро России. Суббота.
8.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
8.20 Местное время. Суббота.
8.35 По секрету всему свету.
9.00 Формула еды. [12+]
9.25 Пятеро на одного.
10.10 Сто к одному.
11.00, 17.00, 20.00 Вести.
12.00 Т/с "Ликвидация". [16+]
18.00 Привет, Андрей! [12+]
21.00 Х/ф "Вы мне подходите". [12+]
0.40 Т/с "Петр Первый. Завещание". [16+]

**БСТ**

7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]
8.00, 18.30 Новости (на баш. яз).
8.15 "Аль-Фатиха". [0+]
8.45 "И стонет курай, и ликует курай". [12+]
9.30 М/ф "Мультфильмы". [0+]
10.00 "Елкән". [6+]
10.30 "Гора новостей". [6+]
10.45 "КультУра". [6+]
11.00 "МузКәрәҙ". [0+]
11.15 Бишек. Колыбельные моего народа. [6+]
11.30 Нык бул. [6+]
12.00 Күстәнәс. [12+]
12.30 Үткән гүмер. [12+]
13.00 Автограф. [12+]
13.30, 5.15 Башкорттар. [6+]
14.00 "Дарю песню". [12+]
16.00 Колесо времени. [12+]
17.00 Концерт Рафиса Сирусина. [12+]
19.00 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]
19.45 Ради добра. [12+]
20.00 Полезные новости. [12+]
20.15 "Сәңгелдәк". [0+]
20.30 "Байык-2022". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]
21.30 Новости (на рус. яз).
22.00 "100 имен Башкортостана". [12+]
22.30, 2.30 Новости недели (на баш. яз).
23.15 "Башҡорт йыры-2022". Телевизионный конкурс среди профессиональных исполнителей башкирской песни. [12+]
0.00 Х/ф "Брак по-соседски". [16+]
3.15 Спектакль "Ҡаһым түрә". [12+]
5.45 "Млечный путь". [12+]
6.30 Новости (на рус. яз). [0+]

### 12 ИЮНЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ

**РОССИЯ 1**

5.20, 4.00 Х/ф "Берега любви". [12+]
7.15 Устами младенца.
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 Когда все дома с Тимуром Кизяковым.
9.25 Утренняя почта с Николаем Басковым.
10.10 Сто к одному.
11.00, 15.00 Т/с "Ликвидация". [16+]
13.00, 17.00 Вести.
14.00 Москва. Кремль. Церемония вручения Государственных премий Российской Федерации.
18.00 Песни от всей души. [12+]
20.00 Вести недели.
22.00 Москва. Кремль. Путин.
22.40 Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.30 Д/ф "А о Петре ведайте..." [12+]
2.25 Х/ф "Ночной гость". [12+]

**БСТ**

7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]
8.00 Новости (на баш. яз).
8.15 "Йома". [0+]
8.45 "Бай". [12+]
9.15 "Орнамент". [6+]
9.30 Тормош. [12+]
10.00 "Книга сказок". [0+]
10.15 "Городок АЮЯ". [6+]
10.30 "Гора новостей". [6+]
10.45 "Сулпылар". [0+]
11.15 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]
11.30 "Ҡош юлы. Балалар". [6+]
11.45 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]
12.30 Итоги недели (на баш. яз). [12+]
13.15 "Алтын тирмә". [0+]
14.00 "Дарю песню". [12+]
15.30 "Дорога к храму". [0+]
16.00, 5.30 Историческая среда. [12+]
16.30 Х/ф "Салават Юлаев". [12+]
17.45 Концерт Загира Исянчурина. [12+]
20.00 Полезные новости. [12+]
20.15 Әлләсе... [12+]
21.00, 22.30 Республика LIVE #дома. [12+]
21.30 Новости недели (на рус.яз).
22.15, 6.45 Специальный репортаж. [12+]
23.00, 3.45 Х/ф "Поединок". [16+]
0.30 Спектакль "Салават". [12+]
4.15 Моя планета Башкортостан. [12+]
4.45 "Млечный путь". [12+]
6.00 Итоги недели (на рус. яз). [0+]

## СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**6 июнь "Мираликундия"** (В. Ливщиц, И. Кичанова), әкиәт. 10.30 6+
**7 июнь "Оскон осто, янғын сыкты"** (А. Ишбулдина), әкиәт. 10.30 0+
**8 июнь "Хыялый"** (С. Әбүзәр), лирик комедия. 12+
**9 июнь "Мышиная история"** (Д. Урбан), әкиәт. 10.30 6+

### М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**6 июнь "Я считаю до пяти"** (М. Бартенев), әкиәт 11.00 0+
**7 июнь "У ковчега в восемь"** (У. Хуб), ғаилә өсөн спектакль. 11.00 6+
**8 июнь "Цирк на поляне"** (М. Непряхин), әкиәт. 11.00 0+
**9-10 июнь "Чиполлино"** (Дж. Родари), мажаралар. 11.00 0+

### Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

***Башҡорт опера һәм балет театрының Бәләкәй сәхнәһендә:***
**11 июнь "Муха-цокотуха"** (К. Чуковский). 12.00, 14.00 0+

### Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**6 июнь "Орган плюс"** концерт. 6+
**7 июнь "Салауат" Балалар бейеү академияһының** йомғаҡлау концерты. 6+

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1443 һижри йыл.*

| Июнь (Зөлҡәғиҙә) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Ақшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 6 (7) дүшәмбе | 3:14 | 4:44 | 13:30 | 18:57 | 21:45 | 23:15 |
| 7 (8) шишәмбе | 3:13 | 4:43 | 13:30 | 18:58 | 21:46 | 23:16 |
| 8 (9) шаршамбы | 3:13 | 4:43 | 13:30 | 18:59 | 21:47 | 23:17 |
| 9 (10) кесе йома | 3:12 | 4:42 | 13:30 | 18:59 | 21:48 | 23:18 |
| 10 (11) йома | 3:12 | 4:42 | 13:30 | 19:00 | 21:49 | 23:19 |
| 11 (12) шәмбе | 3:11 | 4:41 | 13:30 | 19:00 | 21:49 | 23:19 |
| 12 (13) йәкшәмбе | 3:11 | 4:41 | 13:30 | 19:01 | 21:50 | 23:20 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

БАШ ЭШЛӘТМӘК

# ИЮНЬ ЮБИЛЯРҘАРЫ




**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.**

**19-сы һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Очерк. Арктика. Мамлакат. Байрам. Парта. Аҙым. Сәрмән. Аҡса. Теократия. Болт. Ҡаҙы. Алыш. Ләлә. Вәғәз. Ырыуы. Ырым. Ҡуян. Ырҙын. Әтәс. Алҡа.

**Вертикаль буйынса:** Портнова. Морозов. Ауырғазы. Ауыл. Рәхмәт. аҙан. Чекмак. Шымсы. Раса. Тамаҡ. Ыуыҙ. Кәкүк. Ысыҡ. Баҡсасылыҡ. Балыҡ. Ритм. Магнитофон.

ЯБАЙ ҒЫНА КӘҢӘШТӘР

# СЫҒАРЫЛЫШ УҠЫУСЫЛАРЫНА

**Сығарылыш уҡыусылары өсөн яуаплы осор бара - улар имтихан тапшыра башланы. Роспотребнадзорҙың халыҡҡа гигиена белеме биреү үҙәге белгестәре уларға ябай ғына биш кәңәш әҙерләне.**

**Дөрөҫ туҡланығыҙ.** Имтихан ваҡытында туҡланыу ҙур роль уйнай. Фастфудтан һәм газировканан баш тартығыҙ. Көндәлек рационда ит, балыҡ, йәшелсә, емеш-еләк булырға тейеш. Аҙыҡты алдан әҙерләп, кәрәк ваҡытта йылытып ашарға мөмкин.

**Йоҡоға тейешле ваҡыт бүлегеҙ.** Һуңға тиклем имтиханға әҙерләнеп ултырыуығыҙ менән генә белемегеҙ артып китмәҫ. Йоҡоғоҙ ғына тыныcһыҙ булыуы мөмкин. Шуға күрә, иң яҡшыһы - кисен йоҡларға ятыр алдынан саф һауала йөрөп инеү тынысландырыр ҙа, йоҡоғоҙ ҙа яҡшыраҡ булыр. Был иһә һынау алдынан бик тә кәрәк.

**Имтиханға әҙерләнгәндә ял итеп алығыҙ.** Көнө буйы китап уҡып ултырыуҙың файҙаһы юҡ. Әгәр ҙә ваҡыты-ваҡыты менән, йәғни һәр 50-90 минут һайын 15 минут тирәһе ял итеп алһағыҙ, мәғлүмәт еңелерәк үҙләштерелер. Тикшереүҙәр күрһәтеүенсә, имтиханға әҙерләнгәндә ҡыҫҡа ғына ял минуттары иғтибарҙы, мәғлүмәтте үҙләштереү һәләтен көсәйтә, мейе эшмәкәрлеген яҡшырта.

**Күберәк хәрәкәтләнегеҙ.** Физик әүҙемлек ҡан әйләнешен яҡшырта, был иһә мейе эшмәкәрлегенә ыңғай йоғонто яһай. Шуға күрә имтихан осоронда ла спорт менән шөғөлләнеүегеҙҙе дауам итегеҙ йәки көн тәртибенә ниндәй ҙә булһа хәрәкәтле эш индерегеҙ. Ул ҡатмарлы булмаған физик күнегеү йәки йәйәү йөрөү булырға мөмкин. Ул мейегә ял ғына бирмәй, ә эмоциональ йәһәттән көсөргәнеште лә кәметә.

**Үҙегеҙҙе ыңғайға көйләгеҙ.** Көсөргәнешкә бирелмәй, тыныслыҡ һаҡларға, үҙегеҙҙе ыңғайға көйләргә өйрәнегеҙ. Юғиһә, материалды үҙләштереү ҡыйын булыр. Бының өсөн имтиханға әҙерлекте һуңғы көнгә ҡалдырмағыҙ, алдан уҡ ҡабатлағыҙ. Һынау алдынан иртәрәк ятығыҙ, иртәрәк торроғоҙ, душ инегеҙ, иртәнсәк яҡшы итеп ашағыҙ.

ЙӘШЕЛ ДАРЫУХАНА



# ШАЙТАН ТАЯҒЫ

**Шайтан таяғы, ә русса "татарник колючий", сәнскеле үҫемлек. Ул июнь-сентябрь айҙарында ҡыҙғылт көрән сәскә ата, орлоғо сентябрь-октябрҙә өлгөрә. Шайтан таяғы республикабыҙҙа киң таралған. Дауалау өсөн уның япрағы һәм сәскәһе ҡулланыла. Үҫемлектең япрағы сәскә атҡан сағында йыйыла. Киптерер алдынан япрағын буйға ярырға, шунан күләгәле урынға һалырға. Кипкән үләнде таҡта йәки ҡағыҙ ҡумтала һаҡларға кәрәк.**

Халыҡ дауаһында шайтан таяғы бик кәрәкле үҫемлектәрҙең береһе иҫәпләнә, бигерәк тә яман шеш һәм эренле яраларҙан уңышлы файҙаланыла. Башҡа ауырыуҙарҙан да һөҙөмтәле ҡулланыла ул. "Уның тамырынан яһалған төнәтмә ҡатын-ҡыҙҙарға ҡан килеүҙе туҡтатырға, ә арт юлына индереү һәм шул төнәтмәлә ултырып йыуыныу арт юлы шешенеүенән ярҙам итә..." тип яҙа Әбүғәлисина. Моғайын, ул тура эсәктең яман шешен күҙ уңында тотҡандыр, тип фараз итергә була. Нисек кенә булмаһын, был рәүешле дауаланыу ысулы бөгөн дә бер аҙ үҙгәртелеп ҡулланыла. Шайтан таяғының яман шешкә ҡаршы һөҙөмтәле булыуын табиптар ҙа инҡар итмәй. Хатта шештәрҙе ҡырҡып ташлағандан һуң уны ауырыуҙы иҫкәртеү сараһы булараҡ, шулай уҡ тиренең сей яраларын, ҡыҙыл сөсө, скрофулез ауырыуҙарын дауалағанда ҡулланырға кәңәш итәләр.

Халыҡта шайтан таяғын ҡурылдай астмаһы, бронхит, йөрәк неврозы, столбняк, бөйөр, бәүел ҡыуығы, ревматизм, төрлө шешенеүҙәрҙе дауалағанда ҡулланалар. Шулай ҙа ҡурылдай (бронхит), бөйөр ауырыуҙары йәки төрлө шешенеүҙәрҙән арыныу өсөн башҡа бик яҡшы шифалар күп. Ә бына шайтан таяғы яман шештәрҙән (злокачественная опухоль) үтә кәрәкле дауа. Уны араҡыға һалып төнәтергә мөмкин: банканың яртыһынан күберәк шайтан таяғы сәскәһе һалып, тултырғансы араҡы ҡойорға һәм 1 ай төнәтергә. Был төнәтмә яман шешкә ҡаршы әҙерләнгән бәлзәмдәр эсенә инә.

**Ашҡаҙан яман шеше.** 1 ҡалаҡ ваҡланған япраҡҡа 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 1 сәғәт төнәтергә һәм һөҙөргә. Көнөнә 3-4 тапҡыр ашағандан һуң 1-әр стакан эсергә. Бынан тыш ул циститты дауалай, һейҙерткес сифатҡа эйә.

Япраҡтарынан онтаҡ яһарға һәм көнөнә 3-4 тапҡыр ашарҙан алда 1-әр балғалаҡ ҡабып, аҙағынан һыу йоторға.

**Тире яман шеше, сөсө ауырыуы (волчанка), скрофулез.** 1 ҡалаҡ үләнгә 1 стакан ҡайнар һыу нисбәтендә ҡойоп, 4 сәғәт төнәтергә һәм һөҙөргә. Көнөнә 3-4 тапҡыр ашарҙан алда яртышар стакан эсергә. Тирене йыуыу һәм сылатҡыстар яһау өсөн 3-4 ҡалаҡ үләнгә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, шулай уҡ 4 сәғәт тотоп ҡулланырға.Тире яман шеше булғанда үҫемлектең яңы һығылған һуты менән зарарланған урындарҙы сылатырға.

**Геморрой.** Хәл яҡшырғансы япраҡтарының онтағын көнөнә 3 тапҡыр 1-әр балғалаҡ ашарға.

Шайтан таяғы менән оҙаҡ дауаланғанда ла зыян килтермәй. Шулай ҙа гипертония булғанда һаҡ ҡулланырға кәрәк, ул ҡан баҫымын бер аҙ күтәрергә мөмкин.

✓ *Театрҙың бөгөнгө тамашасыһы әҙерме классика кимәлендәге етди әҫәрҙе ҡабул итергә? Спектаклдең көсөргәнешле бер мәлендә Сильваның йыртыҡ балағын күреп, күптәр көлә башламаһа, был һорауҙы бирмәҫ тә инем.*

ПРЕМЬЕРАНАН ҺУҢ...

# ТАМАШАСЫ НИ КӨҪӘЙ -

## мәрәкә булған ерҙә күңеллерәкме уға?

**Бер-береһен белмәгән ике егет ике ҡыҙҙы таныш булмаған станцияға оҙатып киләләр. Йәштәр дыуамал була: һүҙгә әүрәп, төн уртаһы еткәнен дә абайламайҙар, һуңғы электричка күптән киткән, сираттағыһы таңғы алтыла ғына була, таныш түгел ерҙә йоҡларға урын юҡ, ҡыҙҙар ҡайтып еткәс, күҙҙән юғала. Ни эшләргә? Егеттәр бер-береһе менән таныш түгел, әммә уртаҡ хафа уларҙы берләштерә: нисек булһа ла яҙғы һыуыҡ төндә йылыныр урын табырға кәрәк. Икеһе ике яҡҡа китеп, төндө үткәргәндәй фатир эҙләйҙәр. Уларҙың береһе утыҙ йәшлек яңғыҙ йәшәгән ҡатындың ишеген шаҡый, күпме генә ныҡышһа ла, теләгән һөҙөмтәгә өлгәшә алмай. Уларҙан һуң был ишекте үҫмер бер егет шаҡый, ләкин ул да кире боролоп сыға. Ә бына оло йәштәге бер ир һис ҡаршылыҡһыҙ өйгә инеп китә. Ҡатын менән ирҙең үҙ-ара һөйләшкәнен тыңлап торған егеттәр уның Сарафанов Андрей Григорьевич атлы кеше булыуын белә...**



Шулай башланып китә Александр Вампиловтың "Өлкән улым" (Старший сын) комедияһы. Күптән түгел Арыҫлан Мөбәрәков исемендәге Сибай дәүләт башҡорт драма театрында ошо әҫәр буйынса әҙерләнгән спектаклдең премьераһы булды. Ҡуйыусы режиссеры - Вадим Ғилманов, рәссамы - Рәсәйҙең һәм Ҡалмыҡ Республикаһының атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре В.Б. Яшкулов. Спектаклде музыкаль яҡтан Ғ.В. Аҡбулатов биҙәгән.

Баяғы егеттәр яңғыҙаҡ ҡатынға күрше йәшәгән Сарафановтың фатирына ишек шаҡый. Ирҙең ун ете йәшлек улы уларға ишек аса. Ул, баҡһаң, әле атаһын индергән күрше ҡатындан ҡыуылып сыҡҡан баяғы егет икән. Артабан ваҡиғалар бөтөнләй уйламаған юҫыҡта үҫешә: йылы өйҙән нисек тә булһа сыҡмаҫ өсөн егеттәрҙең береһе - Бусыгин, Сарафановтың улы, йәғни йәш егет Васеньканың бер туған ағаһы булырға ризалаша. Дөрөҫөрәге, шулай тип алдашырға мәжбүр була һәм егетте ышандыра. Тиҙҙән атай кеше лә күрше ҡатындан әйләнеп ҡайта. Ул да ышана! Тағы өйҙә ун туғыҙ йәшлек Нина ла бар икән: Андрей Григорьевичтың ҡыҙы, Васеньканың бер туған апайы. Ул да ышана! Артабан...

Артабан ни булғанын 1975 йылда "Ленфильм" киностудияһында Виталий Мельников төшөргән ике сериялы "Старший сын" телевизион фильмын ҡарағандар хәтерләргә тейеш. Евгений Леонов, Николай Караченцов, Михаил Боярский, Светлана Крючкова, Наталья Егорова кеүек билдәле актерҙар уйнай ул фильмда. Шәп фильм! Әҫәр үҙе бик көслө бит! Вадим Ғилмановтың быпдай етди драма әҫәрен сәхнәгә сығарыуын ҙур ҡыйыулыҡ тип баһаларға кәрәк.

Нисек үтте һуң премьера? Оҙон-оҙаҡ фекер сурытмаҫ өсөн әлеге ваҡиғаны (премьераны) өс өлөшкә, өс донъяға бүлеп ҡарайыҡ. Беренсеһен драматург донъяһы, тип алайыҡ. Утыҙ биш йәшендә генә фажиғәле үлеп ҡалған яҙыусының әҫәрҙәре вафатынан һуң ғына билдәлелек ала. "Старший сын" комедияһы ла шул иҫәптә. Вампиловтың пьесаһы буйынса төшөрөлгән "Валентина" фильмын да иҫкә төшөрһәк, яҙыусының рухи донъяһын аңларға була: йәшәйеш, мәңгелек ҡиммәттәр, быуындар күсәгилешлеге, күңел бәйләнештәре, мөхәббәт хаҡында һөйләй уның әҫәрҙәре.

Икенсе донъя итеп шартлы рәүештә режиссер, актерҙар, рәссам, композитор һәм спектаклде сәхнәгә сығарыуҙа ҡатнашҡан башҡа хеҙмәткәрҙәрҙе алайыҡ - спектаклде сәхнәгә сығарыуға төп көстө улар түгә бит. Ғәҙәттә, иң тәүҙә, сәхнә асылғас та рәссамдың хеҙмәте, ижады күҙгә ташлана. Валерий Борисович Яшкуловтың декорациялары ябайлығы менән айырылып тора. Ябайлыҡта - бөйөклөк, тип, бушҡа әйтмәйҙәрҙер, был юлы ла рәссам үҙ асылына тоғро ҡалған: башта пәйҙә булған тимер юл полотноһы ваҡиғалар үҫешендә, томан эсенә инеп юҡ булғандай, ҡайҙалыр юғала һәм актерҙарға иркенләп уйнарлыҡ урам сатына, йә өй эсенә әйләнә - әйҙә, уйна, кинән, мин сәхнәгә йән өрҙөм, мәғәнә өҫтәнем, тигәндәй! Әйтерһең дә, рәссам баштан уҡ тамашасыларға ишара яһай: тормош - юл саты, унда төрлө ваҡиғалар булыуы ихтимал. Ә ваҡиғалар, ысынлап та, бик көсөргәнешле, өс көнлөк ваҡытты сағылдырған пьесала улар тамашасыға тын алырға ла мөмкинлек бирмәй.

Музыкаль биҙәлеш тураһында ошо өлкә белгестәре һүҙ әйтергә тейештер, дилетант булғы килмәй. Тик ниңәлер махсус белемле композиторҙар, музыканттар теге йәки был сәхнә әҫәре өсөн махсус яҙылған музыка тураһында һөйләп тә, яҙа һалып та бармайҙар. Аңлашыла, ноталарҙы уҡый белгән махсус белемлеләр арабыҙҙа бик һирәк (мин дә шулар иҫәбендә), бәлки, шуғалыр ҙа - ун беренсе класс уҡыусыһы беренсе класс уҡыусыһына алфавитты өйрәтеп маташмай бит - шуның һымаҡ инде. Ә шулай ҙа музыкаль биҙәлеш авторы хаҡында һис юғы бер нисә һүҙ ишетке килә - ижад баһаланырға тейеш тә баһа! Күп кенә сәхнә әҫәрҙәре, фильмдар нәҡ шул көй аша хәтергә уйылып ҡала бит - көйөн ишетһәң, бөтөн әҫәр иҫкә төшә лә ҡуя!

Премьеранан һуң актерҙар ролдәрҙе нисек башҡарыуы тураһында һөйләргә ашығырға ярамайҙыр, әлегә әллә күпме сәхнәләрҙән әллә күпме ижади коллективтар тарафынан ҡуйылған драма әҫәрен сибайҙар үҙҙәренсә ҡуйҙы, тип сикләнеп торайыҡ. Һирәк булһа ла, спектакль барышында ҡул сабыуҙар булды, әммә әлегә улар артистарҙың уйынына түгел, авторҙың оҫталығына һоҡланыу һымаҡ ҡабул ителде.

Өсөнсө донъя - тамашасылар донъяһы. Нәҡ уларҙың ихтыяжын ҡәнәғәтләндереү өсөн күпме көс түгелә, ваҡыт сарыф ителә. Театрҙың бөгөнгө тамашасыһы әҙерме классика кимәлендәге етди әҫәрҙе ҡабул итергә? Спектаклдең көсөргәнешле бер мәлендә янғындан зыян күргән Сильваның йыртыҡ балағын күреп, күптәр һындары ҡатып көлә башламаһа, был һорауҙы бирмәҫ тә инем. Әллә мәрәкәгә генә өмөт итеп килделәрме икән? Әллә тамашасыһын юғалтмаҫ өсөн театр үҙе мәрәкәгә иғтибарҙы күберәк бүләме? Тормошта ла шулай бит: мәрәкә булған ерҙә күңеллерәк һымаҡ...

**Радик ӨМӨТҠУЖИН.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

## КӨСЛӨ ҠУРҠЫНЫС ТҮГЕЛ...

### үсле ҡурҡыныс

Тамаҡты йыртҡан аш түгел, тормошто боҙған дуҫ түгел.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Үҙегеҙгә, һәләттәрегеҙгә ышанығыҙ! Үҙ көсөгөҙгә һәм мөмкинлектәрегеҙгә ныҡлы һәм нигеҙле ышанмай тороп, бәхетле һәм уңышлы булып булмай.

**(Норман Винсент Пил).**

Йәшәүҙән ҡурҡмағыҙ. Йәшәү кәрәк тип ышанығыҙ һәм ошо ышаныс, өмөт быны хаҡиҡәткә әйләндерергә ярҙам итер.

**(Уильям Джеймс).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Берҙән-бер көндә Хужа Насретдин йәшәгән илдә батшаның иң аҡыллы кәңәшсе-вәзире донъя ҡуя. Донъя ҡуйыр алдынан вәзир батшаға: "Миңә алмаш итеп беҙҙең батшалыҡтағы иң етди кешене эҙлә, сөнки етдилек - аҡыл эйәләренә генә хас булған сифат", - тип әйтеп ҡалдыра. Батшаның вәкилдәре бар батшалыҡтан ошондай етди аҡыл эйәһен эҙләргә сығып китә. Бына улар Хужа Насретдин йәшәгән ауылға ла килеп етә. Насретдин улар килгәнсе үк батшаның иң аҡыллы вәзире үлеп ҡалыуы тураһында ишеткән була. Батша яңы аҡыл эйәһен ниндәй сифаттарына ҡарап һайлаясағы тураһында ла алдан һиҙемләй, сөнки иң етди кеше - ул иң аҡыллы кеше, тигән риүәйәтте яҡшы белгән була. Хужа Насретдин тиҙ генә хәйлә ҡора: батша вәкилдәренә балыҡ йылымы йөкмәп, йылғанан ҡайтып килешләй тап була. Вәкилдәр Хужаның был төбәктәге иң бай кешеләрҙең береһе булғанын белә һәм шуға унан аптырап һорайҙар: "Был илдә балыҡ тотоу менән иң ярлы кешеләр генә шөғөлләнә. Ә һин бит байһың, ниңә йылым йөкмәп йөрөйһөң?" "Мин тап ошо йылым һәм балыҡ тотоу шөғөлө ярҙамында байыным да инде, - ти Хужа, - элекке шөғөлөмә рәхмәтле булыуымды белгертеү өсөн мин был йылымды гел үҙем менән йөрөтәм..." "Бына был иң етди, тимәк иң аҡыллы кеше! - тип һығымта яһай батша вәкилдәре. - Ярлы кеше байыһа, үҙенең ҡасандыр ярлы булғанын белгертмәҫ өсөн үткәндәрен, хатта туғандарын онота, үткәндәге ярлы хәлен хәтерләткән бар нәмәнән ваз кисә. Ә Хужа Насретдин бер нәмәне лә онотмаған..." тип һығымта яһай вәкилдәр һәм Хужа тураһында батшаға хәбәр итә. Шулай итеп, Хужа Насретдин батшаның яңы аҡыл эйәһе-вәзире итеп тәғәйенләнә. Үҙен вәзир итеп тәғәйенләгән көндө Хужа йылымын үҙе менән алмай, алыҫҡараҡ йәшереп ҡуя. Уны батшаға тәҡдим иткән вәкилдәр аптырап ҡала һәм унан: "Насретдин, ә һин йылымыңды гел үҙең менән йөрөтәм, тигәйнең, әле уны ҡайҙа ҡуйҙың?" - тип һорай. "Балыҡты тотҡас, йылымды ташлайҙар..." - тип яуап бирә Насретдин..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.
1 582218 911006 22022

**Баш мөхәррир:**
**Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Сәриә ҒАРИПОВА,
Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
ООО "СПУТНИК-ЮГ" нәшриәтендә баҫылды
(453400, Башҡортостан Республикаһы, Дәүләкән ҡалаһы, Мәжит Ғафури урамы, 4, офис 203).

**Телефондар:**
**Баш мөхәррир** 253-25-44
**Хәбәрселәр** 252-39-99
**Матбуғат таратыу** 252-39-99

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
3 июнь 17 сәғәт 30 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44** телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**
Тиражы - 3387
Заказ - 682